*Хөрмәтле уҡыусыбыҙ! Артабан да зауығығыҙға, күңел талабығыҙға тап килгән йөкмәтке менән ҡыуандырырбыҙ һеҙҙе, тип ышандырабыҙ. Ә эргәтирәгеҙҙә теге йәки был сәбәптәр менән гәзитебеҙгә яҙылмай ҡалғандар булһа, ошо хәбәрҙе еткерегеҙ уларға: 16 ғинуарға тиклем яҙылһалар, гәзит уларға февралдән килә башлар. Бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9 - 15 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №2 (368)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Каникулдар тиҙ екһетте,** йәғни Бушты-бушка ауҙарыуҙар... 4



**Ҡанға яҙылған ҡанун -** нәҫел-нәсәбенде барлау 5



**Пушкин әкиәтендә - лукоморье...** ысынбарлыҡта ул - Башҡорт хандың Ҡара диңгеҙ буйындағы дәүләте 7



**Заманыбыҙҙың аңын дауаларлыҡ...** заңын дағаларлыҡ һүҙебеҙ бар 8-9



14 Календарь

НИҺАЙӘТ!

## БАЛАЛАРҘЫҢ ДА... хоҡуҡтары бар

Бала хоҡуҡтарын кеше хоҡуҡтарынан айырып ҡарап булмай, шулай ҙа балиғ булмағандарҙың физик, мораль һәм юридик яҡтан үҙен-үҙе яҡлау мөмкинлеге үтә сикле булыуын һәр кем белә. Тап шуның өсөн бәғзе бер илдәрҙә бала һәм үҫмер хоҡуҡтарын һаҡлау һөҙөмтәлерәк булһын өсөн айырым ювеналь юстиция эшмәкәрлеге ойошторолған. Рәсәй юстицияһында бындай йүнәлеш юҡ, шуның өсөн был өлкәлә Бала хоҡуҡтары буйынса уполномоченный вазифаһы булдырылып, уны биләгән дәүләт хеҙмәткәре бала хоҡуҡтарын, иркен һәм законлы мәнфәғәттәрен яҡлауҙы бөтә ил кимәлендә ғәмәлгә ашырыуға булышлыҡ итергә тейеш.

Ниһайәт, Башҡортостан Республикаһында ла ошондай вазифа индереләсәк. Күптән түгел ошо юғары дәүләт вазифаһы тураһындағы положениелар Башҡортостан Конституцияһына ла индерелгәйне. БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың 2009 йылдағы һуңғы ултырышында БР Президенты тарафынан индерелгән "Башҡортостан Республикаһында Бала хоҡуҡтары буйынса уполномоченный тураһында" БР Законы ҡабул ителде. Ошо закон уполномоченныйҙың төп бурыстарын һәм компетенцияларын билдәләй. Бала хоҡуҡтары буйынса уполномоченныйға граждандарҙы ҡабул итеү, бала хоҡуҡтары боҙолоу осраҡтары, дәүләт власы, урындағы үҙидара органдарының, етәкселәрҙең һәм ойошмаларҙың вазифалы кешеләренең бала хоҡуҡтарын һәм мәнфәғәттәрен боҙоусы ҡарарҙары һәм ғәмәлдәре буйынса мөрәжәғәттәрҙе ҡарау йөкмәтелә. Ул ошо хаҡтағы факттарҙы тикшереп, балаларға һәм уларҙың законлы вәкилдәренә юридик ярҙам ойоштора, бала хоҡуҡтарын, иркен һәм мәнфәғәттәрен яҡлау маҡсатында судҡа мөрәжәғәт итә. Республикабыҙҙа ошондай яңы вазифа индерелеүе айҡанлы киләсәктә ауыр ситуацияға тарыған һәр бала юридик ярҙам һәм яҡлау табыр, бала хоҡуҡтары боҙолоу осраҡтары кәмей барыр, тип өмөтләнәйек.

**Вәли ИҘРИСОВ.**




ФЕНОЛОГ ЯҘМАЛАРЫ

## АТ АУНАҺА... көн боҙола

Әлек-электән беҙҙең ауылда һауа торошон алдан белеп торған олатайҙар булды. Синоптиктар билдәләгән һауа торошо мәғлүмәте беҙҙең ауылдағы менән күп осраҡта тура килмәй, шуға күрә мин һауа торошон үҙем билдәләп ҡарарға булдым. Иң тәүҙә октябрҙән башлап көн һайын махсус дәфтәргә көндөң ниндәй булыуын теркәй башланым. Олатайым февраль - авгусҡа, март - сентябргә һәм артабан шулай дауам итеп, алты ай алты айға тура килә, тип әйтә торғайны. Был ысынлап та шулай булып сыҡты. Элек һәр айҙың 5-6, 16-17, 26-27-се көндәрендә яуым-төшөм була торғайны. Әгәр ҙә шул ваҡытта яуаһа, ике-өс көнгә һуңлап булһа ла барыбер яуып ҡуя. Ә яҙ һәм көҙҙөң һуңғы айҙарының 26-27 көндәрендә ҡырау төшөр ине. Май аҙағында мотлаҡ ҡырау була, шуға күрә картуфты май айының 16-17-һендә ултыртыу отошлораҡ була, сөнки ул шытып сығып өлгөрмәй һәм уға ҡырау теймәйәсәк.

Һауа торошон алдан күҙаллап белеү ауыл кешеһе өсөн бик уңайлы. Мин үҙемдең яҙмаларыма ҡарап, балаларға һауа торошон алдан әйтеп ултырам. Шуның буйынса алдағы көнгә эш планлаштырырға ла мөмкин. Бигерәк тә ҡыҙыу бесән ваҡытында иртәнге көнгә һауа торошон алдан белеп, эшенде яйлау уңайлы. Ауылдаштарым һабантуй кеүек байрамдар, өмә уҙғарырға теләһәләр, башта минең менән кәңәшләшеп алалар. Ә байрамдары үткәндән һуң, килеп, рәхмәт әйтеп китәләр, сөнки күҙаллауҙарым гел дөрөҫкә сыға.

Хәҙер һауа торошо үҙгәрҙе, элекке менән сағыштырғанда ике-өс көнгә айырма бар, ә ҡайһы саҡ алдан күҙаллауҙар менән бөтөнләй тура килмәй. Яуым-төшөм әҙәйҙе, ҡоролоҡ инде дүртенсе йыл дауам итә. 1944 йылда ла шулай ҡар әҙ булды, хатта услап алырлыҡ та ҡар булманы, һыу әҙ булғанға күрә ерҙәр ярылып ятты. Быйыл да ауылда ҡоролоҡтан ер ярыла. Һауа торошоноң үҙгәреүе ағас бөтөүе, һыу буйындағы ағастарҙың ҡырылыуы менән бәйлелер, тип уйлайым.

Элек иртән тороу менән мөһим эштәрҙең береһе - ҡар көрәү була торғайны. Кистән яуа башлаған ҡар, иртәнгә тиклем юлдарҙы көпләп, баҡсаларҙы күмеп ҡуйыр ине. Һуңғы йылдарҙа ул тиклем ҡарҙы күргән дә юҡ. Быйыл да ҡышын ҡар әҙ буласаҡ.

Ата-бабалар алдағы көнгә һауа торошон малдарға, тәбиғәткә ҡарап та белгән. Бына беҙҙең яҡтарҙа әйтелгән әйтемдәр: "Иртән көнсығыш ҡыҙарһа, көн болара"; "Көн боҙолор булһа, ҡояш сайҙаҡланып, боҙоҡланып ҡарай башлай"; "Ат ятып мырылдаһа, көн боҙола"; "Ат аунаһа, йәки ятһа, көн боҙола".

**Бирғәле ВӘЛИЕВ,**
**Бөрйән районы Ҡолғана ауылы.**

ЯҢЫ РУБРИКАЛАР

# МАТУР ХӘТИРӘЛӘР...

## бала саҡтан, йәшлектән

**Гәзитебеҙ биттәрендә һәр кем үҙенең балалыҡ, йәшлек йылдарынан фәһемле, ҡыҙыҡлы хәтирәләре менән уртаҡлаша алһын өсөн "Матур хәтирәләр" тип аталған рубрика тәҡдим итәм. Моғайын, күптәр күтәреп алыр минең был тәҡдимде. Үҙем башлайым.**

Хәҙер онотола ла башлаған инде, әллә 3-сө, әллә 4-се синыфта уҡығанда беҙҙе пионерҙар сафына алдылар. Тантаналы байрамға алдан әҙерләндек, һәр беребеҙ: "Итәғәтле, илһөйәр, намыҫлы булып үҫермен, тип иптәштәрем алдында һүҙ бирәм!" - тигән ант һүҙҙәрен ятланыҡ. Ошо һүҙҙәрҙе бергәләшеп әйткәндән һуң беҙгә галстук таҡтылар. Күп йылдар үтһә лә, ул байрам хәтерҙән юйылмай, күңелдә матур бер хәтирә булып балҡып тора.

Икенсе көн, дәрестәрҙән һуң, беҙҙең синыф бүлмәһенә 7-се синыфта уҡып йөрөүсе Байрамова Роза апай килде лә: "Һеҙҙең синыф пионерҙары үҙегеҙ араһынан иң ышаныслы, иң әүҙем уҡыусыны пионер отрядығыҙҙың башлығы итеп һайларға тейеш. Гел "5"кә уҡыусы Бакирова Әнүзәне һайлайыҡмы?" - тине. Беҙ ҡулдарыбыҙҙы күтәреп, дәррәү тауыш бирҙек. Ә һуңынан: "Һеҙҙең отрядығыҙ өс звеноға бүленә. Һәр звеноға звеньевой һайлағыҙ", - тине Роза апай. Бына беҙҙең звеноға башлыҡ һайлау мәле етте. Ошо вазифаға һайланғым килеү хисе бөтә булмышымды биләп алды. "Мине һайлағыҙ, мине!" - тип эстән генә ҡабатланым, тулҡынланып хыялландым. Тик мине һайламанылар. Миңә шул тиклем ауыр булды шул саҡ. Звено башлығы була алмауыма күңелем әрнене.

Йылдар үтеп торҙо. Бына беҙ комсомол сафына баҫтыҡ. Шағир яҙғанса: "Алда барғым килә, балҡып янғым килә!" Беҙҙең үҫмер йылдарындағы һоҡландырғыс хистәр, һүҙҙәр ине бит былар. Алда булыу теләге һәр кемдең күңелендә ине.

Тағы ла йылдар үтте, 9-сы синыфҡа уҡырға килдек. Етәксе, әйҙәүсе, ойоштороусы булырға теләгем һүрелеп бөтөп бара ине инде ул саҡта. Сөнки мине, шымыҡай ҡыҙҙы, барыбер береһе лә әйҙәүсе итеп күрмәй ине. Беҙҙе тарих фәненән уҡытырға әле генә институт тамамлаған Марат Хафизов ағай килде. Уны беҙҙең синыф етәксеһе итеп тәғәйенләнеләр. Беҙҙең синыфтың шаян, тәртип яғынан аҡһаусы, тигән даны бар ине. Бер көн уҡып, дәрестәр тамамланғас, синыф йыйылышы үткәрҙе ағай. "Һәр синыфтың комсомол етәксеһе бар, тағы ла старостаһы булырға тейеш. Арағыҙҙан синыф етәксеһенә, йәғни миңә ярҙамсы булырҙай уҡыусыны староста итеп һайлағыҙ", - тине. Ниндәйҙер битарафлыҡ баҫҡан уҡыусыға әйләнеп бара инем. Хатта кемде һайларға, тигән уй ҙа килмәне башыма. Һайлаһындар. Шул саҡ Закиров тигән синыфташыбыҙ ҡулын күтәреп тороп баҫты ла: "Яхина Фәүзиәне тәҡдим итәм! Уны лайыҡ тип һанайым", - тип әйтеүе булды, бөтәһе лә ҡул күтәреп, тауыш бирҙе. "Юҡ, мин риза түгелмен", - тип ҡаршылашып маташтым. Тәки һайлап ҡуйҙылар. Шулай бер йыл буйы староста булырға тура килде. Бер ауырлығы ла юҡ: йыйылыштарҙы асаһың, ағайға һүҙ бирәһең, дежурныйҙарҙы ҡуяһың. Йәш уҡытыусыны бик яраттыҡ, хөрмәт иттек, шуға ла беҙҙең синыф уҡыусылары башҡаса тәртип боҙманы, тыныс ҡына уҡып йөрөнө...

Ә шулай ҙа ул саҡта һабаҡташтарым араларындағы бәләкәй буйлы, оялсан, тыныс холоҡло ҡыҙыҡайҙы ниңә староста итеп һайлап ҡуйҙы икән? Әллә башҡорт һәм рус әҙәбиәтенән иншаларҙы һәйбәт яҙыуым быға булышлыҡ иттеме? Уҡытыусылар иншаларымды йыш ҡына бөтә синыф алдында уҡып күрһәтә ине бит. Иҫемдә, мәктәпте тамамлауыма бер нисә йыл үткәс, сит ҡаланан каникулға ҡайттым да интернатта уҡып йөрөүсе кескәйҙәрҙе күреп сығырға барҙым. Шул саҡ Фәнизә исемле ҡыҙыҡай: "Ә беҙгә һин яҙған иншаны уҡынылар", - тип хәбәр итте. "Әле һаман иншаны минән һәйбәтерәк яҙыусы юҡмы әллә?" - тип шаярттым. Ә әле, әллә ул иншаларҙа минең күңел торошо ла сағылғанмы ла, уйниәттәремде белеп булғанмы икән, тип тә уйлап ҡуям. Бәлки, шулайҙыр...

**Фәүзиә ЯХИНА.**



*Йәшлектә киләсәк тураһындағы хыял менән, ҡартлыҡта йәшлек тураһындағы хәтирәләр менән йәшәйбеҙ...*

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# ЯУЛАНМАЙМЫ...

## әллә яулап булмаймы?

**Тормошобоҙ сетерекле һорауҙарҙан тора, тиһәк, килешерһегеҙме? Әйҙәгеҙ, раҫлап ҡарайыҡ шуны. Өр-яңы рубрикабыҙ "Сетерекле һорау" тип атала. Был рубрикала ғәҙәттән тыш сәйер, ғәҙәти булмағанса киҫкен яңғыраған, етди һәм етди булмаған ҡыҙыҡлы һорауҙар ҡуйыласаҡ. Һорауҙарға яуап биреүсенең һүҙҙәрендә хәҡиҡәт тә, тапҡырлыҡ та, кинәйә лә, ишара ла, мәрәкә лә бер үк кимәлдә сағылырға тейештер, тип уйлайбыҙ. Шулай итеп, иң беренсе булып был рубрикала ҡатнашырға Башҡортостандың халыҡ артисы Вәхит ХЫЗЫРОВ тәүәккәллек ҡылды.**

**ҺОРАУ: "Яулап булмаҫтай ҡатын-ҡыҙ булмай, бары тик уларҙы яулай алмаған ирҙәр генә бар", тигән әйтемгә ҡарашығыҙ нисек?**

**Вәхит ХЫЗЫРОВ:**

- Дөрөҫ әйтем һәм уның икенсе өлөшө миңә бөтөнләй ҡағылмай. Сөнки мин, йырсы булараҡ, үҙемдең йырҙарым менән күпме ҡыҙ-ҡатындың күңелен яулағанмындыр, униһын ул ҡыҙ-ҡатындар үҙҙәре генә белә. Ә бына башҡа төрлө яулауҙарға килгәндә инде, минең бында үҙ ҡарашым һәм алымым бар. Мин бер ваҡытта ла үҙемә, был ҡыҙ-ҡатынды яулайым әле, тигән маҡсат ҡуймайым, ҡуйған хәлдә лә ниәтемде нәфис затҡа һиҙҙермәйем. Үҙен яулағанды һиҙгән ҡыҙ-ҡатын "баҙарын" күтәрә башлай. Бер генә ынтылыш яһайым да, туҡталып ҡалам һәм ҡармағын һыуға һалған балыҡсы кеүек, көтөргә тотонам. Көтә белеү - үҙе һөнәр. Шунан бер мәл теге "балыҡ" ҡармағыма үҙе килеп ҡабып, үҙемде яулай башламаһынмы! Юғиһә, беҙҙең ир-ат һыу һөлөгө кеүек ҡыҙҙар күрһә, бесән йә ярма күреп ынтылған ас башмаҡ кеүек, мөгөҙө менән эш итә башлай. Егеттәр, иң тәүҙә ҡыҙҙарҙың йөрәген яуларға кәрәк бит, әбйәлилсә әйтәм, шуны ла аңдамайһығыҙмыни?..

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Вәхит дуҫыбыҙ был мәсьәләгә бына шулай ҡарай. Бәлки, был сетерекле һорау буйынса башҡа төрлө уйлаусылар ҙа барҙыр? Улар ҙа был хаҡта беҙгә яҙып ебәрә ала. Ә был сетерекле һорауыбыҙ тәғәйен уҡыусыларыбыҙҙың үҙҙәренә: "Ни өсөн аҡыллы ҡыҙ-ҡатындар аҡыллы ирҙәрҙең - етешһеҙлеген, аҡыл яғынан айырылып тормаған ирҙәрҙең - өҫтөнлөгөн күрергә тырыша?" Яуаптарығыҙҙы көтәбеҙ.**

**Рубриканы Әхмәр ҮТӘБАЙ алып бара.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓РФ Хөкүмәте "2010 йылда Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙы ойоштороу тураһында" Ҡарар ҡабул итте. Ҡарарға ярашлы, был кампания Рәсәйҙә быйыл 14 -25 октябрҙә үтәсәк.

✓БР Президенты Мортаза Рәхимов Благовар Һәм Туймазы райондарында эш сәфәрендә булды. Президент Благовар районында быйыл файҙаланыуға тапшырыласаҡ ҡошсолоҡ цехы төҙөлөшөн ҡараны. Был цехта киләсәктә Благовар районы фермер һәм шәхси хужалыҡтарында, ауыл хужалығы предприятиеларында үҫтерелгән ҡош-ҡорт эшкәртеләсәк. Президент Туймазы районы Аҙнағол ауылында кәзә һөтө етештереүсе крәҫтиән-фермер хужалығы, шулай уҡ тоҡом һыйырҙары үрсетеүсе бер нисә хужалыҡ эше менән танышты.

✓Быйыл йыл башынан республиканың дәүләт учреждениелары белгестәре шифаханаларға түләүһеҙ путевкалар менән тәьмин ителәсәк. Путевкалар ғаиләһендә йән башына уртаса килем өс йәшәү минимумы күләменән артмаған бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренә биреләсәк. БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев ошо туралағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Путевкалар бындай хеҙмәткәрҙәргә йылына бер тапҡыр һәм ун дүрт календарь көнгә биреләсәк.

✓Әсәлек капиталы тураһындағы ҡарар ҡабул ителеүгә өс йыл үтте, тимәк, быйыл йыл башынан ғаиләләр был аҡсаны үҙе теләгәнсә ҡуллана аласаҡ. Бөгөн индексациялауҙарҙы ла иҫәпкә алғанда әсәлек капиталы күләме 343 378 һум тәшкил итә. Быйылдан РФ Хөкүмәте әсәлек капиталын ҡулланыу мөмкинлектәрен киңәйтә, йәғни уның менән торлаҡ йорт һатып алғанда йә төҙөгәндә алған заем буйынса кредиттарҙы ҡаплап, шулай уҡ фатир һатып алғанда, йорт төҙөгәндә файҙаланып була. Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһенән хәбәр итеүҙәренсә, программа ҡабул ителгәндән алып беҙҙең республикала барлығы 68669 әсәлек капиталы сертификаты бирелгән. Был аҡсаны ипотека кредитын ҡаплауға ебәреү тураһында 4347 ҡарар ҡабул ителгән.

✓Өфө гроссмейстеры Денис Хисмәтуллинға күптән түгел Мәскәүҙә үткән Рәсәй чемпионаты суперфиналында уңыш йылмайҙы. Ул дүрт мәрәй йыйып, алтынсы-һигеҙенсе урындарҙы бүлеште. Был уңыш яҡташыбыҙға Рәсәй шахматындағы "рангылар табелендә" үҙ урынын нығытыу мөмкинлеге бирҙе.

**✓ *Ун йыл эсендә сәйәси Олимптың иң башына күтәрелеп, исеме ваҡытлы матбуғат сараларында миллионлаған тапҡыр телгә алынған кешенең нисек итеп ошо дәрәжәгә күтәрелеүен белербеҙ микән?***

*ШАҢДАУ ПЛЮС*

# ТӘҮГЕ УН ЙЫЛЛЫҠТЫҢ...

## ҡайғылары һәм серҙәре

**Егерме беренсе быуаттың тәүге ун йыллығы артта ҡалды. Уның ниндәй ваҡиғалары иҫебеҙҙә айырыуса тәрән эҙ ҡалдырҙы икән? Быға тиклем күҙәтеүҙәр аҙна йәки йыл кимәлендә булғайны. Әле ун йыллыҡҡа баҙнат ителде. Былай барһа, ваҡыты еткәс, үткән быуат хаҡында ла яҙмаҫбыҙ тимә, йәмәғәт! Шулаймы? Мин уйлап тапҡан нәмә түгел был. Рәсәй ваҡытлы матбуғат саралары үткән ун йылды "нулевойҙар" тип атап өлгөрҙө инде. Мәслихәт! Нулевой, тиҙәр икән, булһын әйҙә! Уңдыҡмы, әллә туңдыҡмы? Ҡыуандыҡмы, әллә күберәк күҙ йәштәрен түктекме?**

### 2000 - Ельциндың китеүе, Путиндың килеүе, "Курск"тың батыуы

Эйе, нисек кенә аянызлы булмаһын, 2000 йылдан башҡаса тәьҫораттар ҡалмаған икән. 1999 йылдың 31 декабре төнөндә ул саҡтағы Рәсәй Федерацияһы Президенты Борис Николаевич Ельцин тура эфирҙа үҙ теләге менән вазифаһынан баш тартты. "Мин арыным! Мин китәм!" - тине ул. Был сараны уйлап табып, тормошҡа ашырыусыларға (Ельциндың ысынлап та үҙе теләп китеүенә ышаныусылар һаман бар микән?) бөгөн һәйкәл ҡуйырға кәрәк. Идея бик матур ине - "Яңы быуатҡа яңы президент менән!"

Әйткәндәй, һуңғараҡ - 2003 йылда ошондайыраҡ уҡ идеяны беҙҙә, Башҡортостанда, тормошҡа ашырырға маташып ҡаранылар. Беҙҙә килеп сыҡманы. Беҙ үҙ Президентыбыҙ менән ҡалдыҡ. Ә Рәсәй дәүләтенең башына быға тиклем бигүк билдәле булмаған сәйәсмән (ул саҡтан "сәйәсмән" тип әйтергә тел дә әйләнмәй ине) килде - Владимир Владимирович Путин. Кем ул һеҙ - Владимир Путин? Был һорауҙы уға сит ил журналистары ҡабат-ҡабат биргәйне. Ун йыл үтеп тә китте - Владимир Владимирович ике осор президент булып өлгөрҙө, уның урынына Дмитрий Анатольевич Медведев килде. Ә был һорауға күптәр һаман яуап таба алмай аптырана. Ун йыл эсендә сәйәси Олимптың иң башына күтәрелеп, әллә күпме ваҡиғалар кисереп өлгөргән, исеме ваҡытлы матбуғат сараларында миллионлаған тапҡыр төрлө яҡлап (әрләп тә, хурлап та, маҡтап та, яҡлап та) телгә алынған кешенең нисек итеп ошо дәрәжәгә күтәрелеүен ҡасан да булһа белербеҙ микән? Бәлки, киләһе быуатты ҡаршылағандалыр? Был донъяла ул да, беҙ ҙә булмағанда...

2000 йыл Владимир Владимировичтың етәксе булараҡ оло һынау кисереү йылы булды. Урыны уны һынап ҡараны. Йәнәһе, нисек, ныҡмы яңы президент? Алдына баҫҡан проблемаларҙы хәл итергә һәләтлеме? Президент булырлыҡмы? Ҡәтғи ҡарарҙар ҡабул итерлекме? Әйтергә кәрәк, Баренц диңгеҙендә "Курск" һыу аҫты кәмәһенең батыуы Путин өсөн бөтөнләй көтөлмәгән хәл була. Ул "Курск" батҡандан һуң биш көн(!) үткәс кенә Сочиҙа үткәргән отпускыһын бүлергә баҙнат итә. Сит ил журналисының "Курск" кәмәһе менән нимә булды?" тигән һорауына Владимир Путин ҡыҫҡа ғына итеп "ул батты" тип яуап бирә. Был видео һаман да интернетта бар. 23 август көндө Владимир Путин телеэфирҙа "Курск" кәмәһенең батыуы хаҡында һөйләп бирә. 28 август көндө иһә тележурналист Сергей Доренконың тура эфирҙағы тапшырыуы сыға. Ул Владимир Путиндың, Рәсәй Оборона министрлығының һыу аҫты кәмәһендәге кешеләрҙе ҡотҡарыу буйынса эшмәкәрлеген (дөрөҫөрәге, бер нәмә лә эшләмәүҙәрен) ҡаты тәнҡитләй. Был Доренконың һуңғы тапшырыуы була. Уны әлегә тиклем тура эфирҙа күргән юҡ.

Рәсәй Президентының бер нисә көн буйына өндәшмәүе, "Курск" кәмәһенең батыуының ысын сәбәптәре беҙҙең өсөн мәңгелеккә сер булып ҡалыр микән?

### 2001 - Нью-Йорк "игеҙәктәр"енең юҡҡа сығыуы, йәки "туғыҙ-бер-бер"

2001 йылдың 11 сентябре (йәки Америка Ҡушма Штаттарында ҡабул ителгәнсә, "туғыҙ-бер-бер") бөтә донъя тарихының өр-яңы битен асҡан көн. Быға тиклем дә террорсылар тик ятманы - үҙҙәренең көсөн, теләктәрен, маҡсаттарын һәм мөмкинлектәрен күрһәтеү өсөн яңынан-яңы террористик ысулдар уйлап сығарып ҡына торҙо. Тик был юлы шәһиттәр - (Алла һәм изге дин хаҡына үҙ-үҙҙәрен ҡорбан килтереүселәр, тип аңларға кәрәктер) ҡот осҡос һөжүмтәләргә ирешә. Улар Америка Ҡушма Штаттары ҡалаларында - Нью-Йоркта, Вашингтонда һам Пенсильвания штатында бер юлы өс меңгә яҡын кешене юҡ итә. Был ҡорбандар бушҡа ғына булды. Америка Ҡушма Штаттары һәм Көнбайыш дәүләттәре донъя мосолмандары менән бер телдә һөйләшеп ҡарарға кәрәклеге хаҡында уйлап та бирмәне. Һөҙөмтәлә теракттар бөтә донъяла дауам итте. Алда Рәсәйҙе "Норд-Ост" (2002 йыл) һәм Беслан (2004) фажиғәләре көтә ине.

Ә Америка Ҡушма Штаттарында 110-шар ҡатлы Нью-Йорк "игеҙәк"тәренә террорсылар һөжүм итеүенә ышанмағандар ҙа бар. Ҡайһы берәүҙәр фекеренсә, был атакалар Американың махсус хеҙмәттәре тарафынан ойошторолған булған. Башняларҙың емерелеүе самолеттар бәрелеүе һөҙөмтәһендә түгел, ә махсус рәүештә урынлаштырылған көслө шартлатҡыстар арҡаһында булған, тигән фекер ҙә бар. Дөрөҫлөктө ҡасан да булһа белербеҙме?

### 2002 - Мәскәү. Дубровка. "Норд-Ост"

2002 йыл иҫкә төшһә, ошо атамалар хәтергә килә. 23 октябрь кисендә бер төркөм террорсылар (Мовсар Бараев етәкселегендәге чечен боевиктары) Мәскәүҙә Дубровкала Мельников урамындағы Театр үҙәген баҫып ала. Унда был ваҡытта "Норд-Ост" мюзиклы барған була. Залда 800-гә яҡын тамашасы, сәхнәлә - спектаклдә ҡатнашҡан актерҙар, сәхнә артында - хеҙмәтләндереүсе персонал. Террорсылар тамаша ваҡытында сәхнәгә килеп сыға. Ошо ваҡыттан алып 26 октябрҙең кисенә тиклем террорсылар аманаттарҙы Театр үҙәге бинаһында бикләп тота. Чечен боевиктарының төп талабы - Чечняны азат итеү, унан Рәсәй ғәскәрҙәрен сығарыу, әлбиттә, үтәлмәй. 26 октябрь таң менән бинаға елләтеү юлдары аша ниндәйҙер билдәһеҙ газ (уның составы, кешеләргә йоғонтоһо киң йәмәғәтселеккә һаман билдәһеҙ) ебәрелә. Һөҙөмтәлә, рәсми мәғлүмәттәр буйынса - 130, ә аманаттарҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, 200-гә яҡын кеше һәләк була. Был - террорсыларҙы иҫәпкә алмағанда. Ул саҡта Мәскәүҙең баш врачы аманаттарҙың һәләк булыуы - билдәһеҙ газ ҡулланыу менән бәйле, тип белдерә. Әммә Рәсәй Генераль прокуратураһы аманат булған кешеләрҙең үлемдәренең сәбәптәре "билдәләнмәгән" тигән ҡарар ҡабул итә. Рәсәй Президенты Владимир Путин журналистар менән осрашҡанда "кешеләрҙең үлеме газ менән бәйле түгел, ул зарарһыҙ", тип аныҡлап, дөрөҫөрәге, нығытып ҡуя. Ул хәтлем кешенең яра һәм йәрәхәттәре булмаған килеш үлеүе һаман сер булып ҡала.

### 2003 - Ананастар ашаһаң да, сел кимереп төкөрһәң дә, һуңғы көнөң етер һинең, яуыз олигарх!

Аңлағанһығыҙҙыр, Владимир Маяковскийҙың буржуй хаҡындағы билдәле (ҡырҡты үткәндәр уны яҡшы хәтерләргә тейеш, йәш быуын мәктәптә Маяковскийҙы уҡый микән, белмәйем) ике юллығын үҙемсә үҙгәртеберәк, заманабыҙға яраҡлаштырыбыраҡ, башҡортсаға тәржемә итеп ҡарағайным. 2003 йыл өсөн бик тә урынлы шиғыр булып сыҡты ул.

2003 йылдың 25 октябрендә Новосибирск ҡалаһының "Толмачево" аэропортында Михаил Борисович Ходорковский ҡулға алына. Был ваҡытта уға 40 йәш тулған була. Рәсәйҙә иң бай, ә донъяла иң байҙар исемлегендәге тәүге тиҫтәгә ингән билдәле эшҡыуар. 1992-1993 йылдарҙа Рәсәй энергетика һәм яғыулыҡ министры, ә 1997 йылдан алып төрмәгә инеп киткән көнгә тиклем "ЮКОС" нефть компанияһының хужаһы. Бөгөнгө көнгә хәтлем ситлек артында.

Улар (Рәсәй олигархтары, тимәксемен) үҙҙәрен донъя тотҡаһы һымаҡ күрҙе. Емерелеп юҡҡа сыҡҡан СССР-ҙың мөлкәтен (ер аҫтындағы һәм өҫтөндәге байлыҡтарҙы) төрлө (күп осраҡтарҙа - законһыҙ) юлдар менән ҡулдарына эләктергәс, улар шашыныпмы шашынды. Компания менән идара итә алғас, бөтә илде етәкләй алам, тип уйланы улар. Шул ваҡытта байҙар күпләп депутатлыҡҡа, төбәк башлыҡтары вазифаларына ынтылды. Тап 2003 йылда беҙҙең республикала президент посына бер түгел, ике олигарх тамшанды. Улар үҙҙәрен агитациялауға һәм пропагандалауға бар көстәрен, финанстарын, хатта ғаилә ағзаларын (Веремеенко - ағаһын, ә Сафин - ҡыҙын) йәлеп итеүгә тиклем барып етте. Ходорковский ҙа бит аҡса һуғыу менән генә сикләнеп ҡалмай, әүҙем рәүештә сәйәсәткә тығыла башланы. Уның маҡсаттары өҫтә әйтелгән икәүҙекенә ҡарағанда күпкә олораҡ ине. Рәсәй президенты посына дәғүә итеүен йәшермәй, Ходорковский Дәүләт Думаһындағы сәйәси партияларҙы финанслап, ижтимағи ойошмалар булдырып, үҙен халыҡҡа танытыу йәһәтенән эш башлап ебәргәйне. Кем быға түҙә ала инде? Ходорковскийҙы һалымдар түләмәүҙә, ят мөлкәтте үҙләштереүҙә, хатта кеше үлтереүгә булышлыҡ итеүҙә ғәйепләп, туғыҙ йылға төрмәгә яптылар. Һуңынан был срок бер йылға кәметелде кәметелеүен, әммә 2009 йылда Ходороковский өҫтөнән тағы ла суд башланды. Дөйөм алғанда, власть башында бөгөнгөләр ултырған саҡта Ходорковскийҙың урыны төрмәлә. Мәскәү төрмәләрендә лә түгел, ә алыҫтараҡ, мәҫәлән, Читала.

Әйткәндәй, Ходорковскийҙы ҡулға алып, уның финанс-иҡтисади "империя"һын туҙҙыра башлар алдынан Интернетта "Рәсәйҙә олигархик түңкәрелеш көтөлә" тигән сәйәси доклад донъя күрҙе. Унда Ходорковскийҙан тыш, Рәсәй олигархтары исемлегенә тағы ла Роман Абрамович, Михаил Фридман, Олег Дерипаска һәм Владимир Потанин индерелә. ЮКОС хужаһынан башҡалары - иректә һәм иҫән-һау. Тимәк, олигархтар башына һуғыр өсөн кемдер кәрәк булған, тип фаразларға мөмкин.

**(Дауамы 15-се биттә).**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Өфөлә "Башинформсвязь" призына футбол буйынса халыҡ-ара турнир бара һәм унда 1994 йылғы үҫмерҙәр көс һынаша.

✓ Яңы йыл төнөндә ете Өфө ғаиләһе иң оло шатлыҡ кисерҙе: уларҙың балалары тыуҙы. Баш ҡаланың баш акушер-гинекологы Нәзир Минһажев әйтеүенсә, Яңы йыл тыуып, ике минут үткәс, 3-сө ҡала бала табыу йортонда 2010 йылдың тәүге сабыйы донъяға килә. Ошонан һуң берәм-берәм тағы алты бала донъяға тыуыуы тураһында хәбәр һала. Барыһы ла - ҡыҙҙар. Бары тик иртәнге сәғәт етелә генә 4-се бала табыу йортонда бер малай тыуа.

✓ СПИД-ты һәм йоғошло сирҙәрҙе иҫкәртеү һәм көрәш буйынса республика үҙәгендә 7429 ВИЧ-инфекциялы иҫәптә тора. Уларҙың 4692-һе - ирҙәр, 2737-һе - ҡатын-ҡыҙҙар. Йыл башынан ВИЧ-инфекциялы әсәләрҙән 188 бала тыуған, 319 ВИЧ-инфекциялы донъя ҡуйған. Сирҙе йоҡтороу юлы, элеккесә, наркоманлыҡ. Әммә врачтарҙы был инфекцияны енси юл менән йоҡтороуҙың арта барыуы борсой. Үткән йылда ғына ошондай юл менән сир йоҡторған 547 кеше теркәлгән. Республикала ВИЧ-инфекция менән ауырыу күрһәткесе 100 мең кешегә 27,4 кеше тура килә.

✓ РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы бойороғона ярашлы, 2010 йылдың 1 ғинуарынан дәүләт социаль ярҙамға хоҡуғы булған граждандарға, шулай уҡ I төркөм инвалидтарын һәм инвалид балаларҙы оҙатып барыусыларға санатор-курорт учреждениеларында бер көн ял итеү хаҡы 772 һумдан артмаҫҡа тейеш. Ә арҡа мейеһе имгәнгән инвалидтар өсөн социаль хеҙмәттәргә түләү хаҡы 1207,4 һумдан артмаҫҡа тейеш.

✓ Башҡортостан Республикаһының Тарифтар буйынса комиссияһы тәбиғи газға ваҡлап һатыу хаҡтарын арттырҙы. Зәңгәр яғыулыҡҡа хаҡ быйыл ике тапҡыр үҙгәртеләсәк, тип хәбәр итә комиссия. Шулай итеп, быйыл 1 ғинуарҙан фатирҙарында һәм йорттарында тотонолған газды иҫәпләү приборҙары булған граждандар - 2 һум 60 тин, 1 апрелдән 2 һум 99 тин түләйәсәк. Ә иҫәпләү приборҙары булмағандар бер квадрат метр майҙанды йылытыу өсөн бер айға 17 һум 10 тин, ә апрелдән 19 һум 62 тин иҫәбенән сығып түләйәсәк.

*✓ Тәүге йылдарҙа беҙ был каникулдарҙы рәхәтләнеп байрам иттек. Яңы йыл кисендә саманы онотоусылар был көндәрҙә иркенләп "бахмур синдромынан" сыҡты, туғандар бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөштө һәм...*

*СӘЙЕР ҒӘҘӘТ*

# ХАТ БАШЫ - ЯҘ ҠАРШЫ...

**Был ғәҙәтем бөгөнгө көн күҙлегенән, ысынлап та, бик сәйер күренә. Мин техника үҫешкән, "аська", виртуаль аралашыу, СМС-хәбәрҙәр ярҙамында аралашып булғанда заманда... хат яҙышырға яратам. Эйе, эйе, аҡ ҡағыҙ биттәренә хистәремде түгеп, конверт эсенә хатымды ҡәҙерләп һалып, конверт елемен ләззәтләнеп телемдең осо менән еүешләп йәбештерәм дә, почта йәшнигенә төшөрәм һәм яуап аласаҡ көнөмдө иҫәпләргә тотонам.**

Тәүге хатымды бишенсе синыфта Сибай ҡалаһында уҡыған апайыма яҙғайным һәм бөгөн дә ошо ғәҙәтемдән арына алмайым, әхирәтем һәм һеңлемә ҡайнар сәләмдәремде, уй-тойғоларымды, кәңәштәремде, һораусарымды хат аша юллайым. Минеңсә, телефон аша ҡабалан ғына һөйләнелгән хәбәр ҡағыҙға күсһә, бөтөнләй икенсе мәғәнә ала, күңел кисерештәре һәм фәһемле, һиммәтле фекер менән байый. Етмәһә, аҙна буйы ашҡынып көтөп алған бер-нисә бит хат әйтеп бөтөргөһөҙ шатлыҡ, күңел күтәренкелеге бүләк итә.

Яҡын кешеңдең яуап хатын көткән көндәрең сабырлығың, түҙемлегең үлсәме булып та тора. Әммә хаттың бер насар яғы бар. Ул да булһа, конвертты ныҡлап йәбештергәс кенә иҫкә берәй яңылыҡ килеп төшә. Шуға ла ҡайһы саҡта конверттың тышы ваҡ-ваҡ итеп сыймаҡланған көйө адресатҡа йүнәлә . Нисек кенә булмаһын, "Хат башы - яҙ ҡаршы!" һөйләме минең өсөн дуҫым, йөрәк кәңәшсем, фекерҙәшем, хатта ижадташым менән алыҫ араларыбыҙҙы яҡынайтып, бәйләп тороусы еп кеүек.

Интернет, смс аша ғына хәбәрләшкән йәштәштәремә эйәреп ҡараным мин дә, тик аҡ ҡағыҙға бер нәмә лә етмәй, тигән фекергә килдем. "Контакт"та, мәҫәлән, кем менән, нимә хаҡында яҙышҡаның бар донъяға билдәле(чат хаҡында әйтеп тораһы ла түгел). Бер төрлө баҫма хәрефтәр араһында аралашҡан кешеңдең уй-тойғоларын, кисерештәрен, һиңә генә таныш булған үҙенсәлекле һыҙаттарын танып та булмай. Һәм, ниһәйәт, "аська", СМС-хәбәрҙәр, "контакт" хаттар кеүек бай һәм һиммәтле фекерҙәрҙе һаҡларға мөмкинселек бирмәй, ә мин яҙыша башлағандан алып бар хаттарҙы йыйып барам. Уларҙы аҙаҡтан уҡыуы, шул саҡтағы ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрөп ултырыуы үҙе бер ғүмер!

Башҡа кешеләр ҙә хат яҙып ҡараһындар ине. Һәр аҡ ҡағыҙ тормоштоң яңы таҙа бите кеүек бит ул. Нимә, нисек яҙыуыңа ҡарап, ғүмереӊ офоғонда кешелек һинең эшеңде баһалар. Заман техникаһына һалынып, "аська", интернет, СМС-хәбәрҙәрҙә яҙған ҡыҫҡа һөйләмдәрҙәй ҡоро, баҫма хәрефтәрҙәй бер төрлө, күңел, рух байлығы хас түгел машиналарға әйләнмәйек беҙүк. Һәр беребеҙ ап-аҡ тормош битендә үҙ юлыбыҙҙы, ҡиммәтле уй-фекеребеҙҙе, өлгө алырҙай эштәребеҙҙе һыҙайыҡ.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**
**БДУ студенткаһы.**

*ПАРАДОКС*

**Рәсәй халҡының яртыһы ғинуар айының өстән бер өлөшөн алған Яңы йыл каникулдарын ҡыҫҡартырға кәрәк, тигән фекерҙе яҡлай. Был хаҡта белдереүселәр ғинуар айы каникулдарын ҡыҫҡартыу иҫәбенә май каникулдарын оҙайтыу тәҡдимен индерә. Profi Online Research агентлығы үткәргән анкетала Рәсәйҙең 13 эре ҡалаһынан 18 йәштән 60 йәшкә тиклем 600 кеше ҡатнашҡан. Ошо һандарға күҙ һалып, башҡалар менән сағыштырып, үҙебеҙсә фекер төйнәйек әле. Ысынлап та, бигерәк оҙон түгелме был Яңы йыл каникулдары тигәндәре?**

# КАНИКУЛДАР ТИҘ ЕКҺЕТТЕ,

## йәғни Бушты-бушҡа ауҙарыуҙар...

Иҫебеҙгә төшөрһәк, Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт кодексына каникулдарға бәйле төҙәтмә Дәүләт Думаһы тарафынан 2004 йылда индерелгәйне. Ул саҡта май байрамдары иҫәбенә ғинуар каникулдары 5 көнгә (1-5 ғинуар көндәре) оҙайтылап, Раштыуа байрамдары менән бергә 9-10-ға тиклем һуҙылыуы законлаштырылғайны. Тәүге йылдарҙа беҙ был каникулдарҙы рәхәтләнеп байрам иттек. Яңы йыл кисендә саманы онотоусылар был көндәрҙә иркенләп "бахмур синдромынан" сыҡты, туғандар, таныштар бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөштө һәм...

Хәҙер килеп, закон тарафынан "буштан-бушҡа" булып тойолған каникулдар рәсәйлеләрҙең яртыһын екһетеп тә өлгөрҙө. Шундайын абруйлы агентлыҡ шундай һандар килтерә икән, тимәк, проблема бында бар һәм уны бер нисек тә урап үтеп булмай. Әйткәндәй, 2008 йылда каникулдарҙы ҡыҫҡартыу мәсьәләһен КПРФ ағзаһы, депутат Анатолий Локоть күтәреп сыға. Уны Федерация Советы башлығы Сергей Миронов та яҡлап сығыш яһай һәм Яңы йыл каникулдарын иҡтисади яҡтан аҡланмай, тип табып, ял көндәре итеп 31 декабрь көнөн генә тәҡдим итә. Үткән йылдың мартында "Берҙәм Рәсәй" фирҡәһе ағзаһы, Дәүләт Думаһы депутаты Василий Захарьящев та был идеяны хуплап, ял көндәре итеп 1, 2 ғинуар, 1-4 май көндәрен тәҡдим итеп сығыш яһай. Әммә апрель айында Дума уның да тәҡдимен кире ҡаға.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кем нисек уйлайҙыр, әммә беҙгә, йәғни айлыҡ эш хаҡын айында алып, тотоноп йәшәүселәргә бындай каникулдар булдымы ни, булманымы ни? Бәлки, Сейшель, Канар, Индонезия утрауҙарында, Лазур ярында Яңы йыл ҡаршылап, бер юлы аҙналап ял итеүселәр өсөн кәрәктер был каникулдар? Беҙгә ни, хатта йыл һайын алына торған отпускыны ла бесән сабыу ваҡыты, тип аңлаусы ябай башҡорттарҙы, урыҫтарҙы, татарҙарҙы һәм башҡаларҙы, был каникулдар, йәғни бер нәмә лә эшләмәй тик ултырыу тиҙ екһетте, йәмәғәт. Кем нисек уйлайҙыр?**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**



*Балаһыҙҙар былтайыр, Сараһыҙҙан ҡалтайыр,*
*Балалылар шатланыр, Аҡбуҙатҡа атланыр.*

*О, СПОРТ!*

# БАЛАЛАР ХОККЕЙ УЙНАЙ

**Яңы йылдан "Өфө - сәләмәт тормош рәүеше 2010" ҡала спорт фестивале старт алды. Уның сиктәрендә ғинуарҙан февралгә тиклем ихата командалары араһында хоккей буйынса "Алтын шайба" Өфө ҡалаһы беренселеге үтә.**

Был турнир мәктәп йәшендәге балаларҙы спортҡа ылыҡтырыу, балалар һәм йәштәр араһында тәрбиәүи спорт саралары уҙғарыу маҡсатында ойошторола. Баш ҡаланың "Алтын шайба" хоккей беренселеге ике этапта үтә. Беренсе этап һәр районның дөйөм белем биреү мәктәптәрендә, мәктәп-интернаттарҙа, үҫмерҙәр клубтары һәм үҙәктәрендә 24 ғинуарға тиклем үтә. Еңеүселәр республика турнирында ҡатнашыу хоҡуғы аласаҡ.

# РАПИРА БУЙЫНСА ШӘПБЕҘ

**Дондағы Ростовта фехтование буйынса Рәсәй Кубогы тамамланды. Турнирҙа республиканан ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар командаһы ҡатнашты.**

Рапира менән фехтованиела ҡатын-ҡыҙҙар командаһы - дүртенсе, ир-аттарҙың Башҡортостан-1 командаһы - беренсе, Башҡортостан-2 командаһы бишенсе урынды яуланы. Шәхси беренселектә Антон Иванов һәм Руслан Насибуллин өсөнсө урынға лайыҡ булды. Шпага менән команда ярыштарында Антон Смирнов, Ришат Хизбуллин һәм Рәфис Рафиҡовтан торған республика командаһы дүртенсе урынға сыҡты. Билдәле булыуынса, беҙҙең республика спорттың рапира менән фехтование төрөндә һынатмай. 2008 йылда Рәсәй Кубогында Башҡортостан спортсылары икенсе урынды яулаһа, 2009 йылда ил чемпионатында өсөнсө урынға сыҡты.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан предприятиелары һәм ойошмалары хеҙмәткәрҙәре балалары республика профсоюз комитеттарынан Яңы йылға 300 мең бүләк алды.

✓Өфө ҡала округы Советы депутаттары баш ҡала территорияһындағы ергә аренда хаҡын яңынан билдәләне. Элеккесә, шәхси йорт төҙөлөшө, физкультура-һауыҡтырыу комплекстары, мунса, кер йыуыу предприятиелары, парикмахерский, китапханалар, мәктәпкәсә йәштәге учреждениелар һәм мәктәптәр, баҡса һәм дача участкалары урынлашҡан ергә аренда түләүе түбән көйө ҡалды. Ә бына сауҙа павильондары һәм киосклар, күңел асыу биналары һәм ял итеү йорттары, базалары өсөн бирелгән ергә юғары аренда хаҡы билдәләнде.

✓Башҡортостан "Юлдаш" телеканалының "Спорт" ижади берекмәһе "Спорт-Экспресс" гәзите менән берлектә республиканың илле спорт журналисы араһында һорау алыу үткәрҙе һәм 2009 йылдың иң яҡшы спортсыларын билдәләне. Көйәрмәндәргә күңел төңөлөүҙәре бүләк итһәләр ҙә, "Салауат Юлаев" һәм "Урал" командалары иң яҡшылар тип аталды. Максим Чудов (биатлон), Александр Радулов (хоккей), Дмитрий Васильев (трамплиндан саңғыла һикереү), Николай Красников (мотоуҙыш), Ксения Москвина (йөҙөү), Ольга Вилухина (биатлон), Лилия Шобухова (еңел атлетика) иң яҡшы спортсы тип билдәләнде.

✓Дәүләт йәштәр сәйәсәте өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең профессиональ оҫталығы Бөтә Рәсәй конкурсында Калинин районы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм йәштәр эштәре буйынса бүлеге начальнигы Урал Ҡараҙбаев махсус номинацияла еңеү яуланы. Шулай уҡ Өфөнән "Вираж" үҫмерҙәр клубы белгесе Игорь Карелин да конкурс еңеүсеһе булды.

✓Боҙҙа мотоуҙыш буйынса 50-се Рәсәй шәхси чемпионатында Башҡортостан спортсылары Николай Красников - алтын, Дмитрий Буланкин бронза миҙал яуланы. Стәрлетамаҡ "Каустик" мотоклубы спортсыһы Игорь Кононов дүртенсе урынға сыҡты. Был өс спортсы ла шәхси донъя чемпионатында Рәсәй исеменән сығыш яһаясаҡ.

✓10 ғинуарға тиклем "Өфө-Арена"ла һәм Спорт һарайында фигуралы шыуыу буйынса беренсе Уҡыусылар спартакиадаһының финал ярыштары бара.

АТЫҢ КЕМ? ЗАТЫҢ КЕМ?

# ҠАНҒА ЯҘЫЛҒАН ҠАНУН -

## нәҫел-нәсәбеңде барлау

**Күренекле башҡорт мәғрифәтсеһе һәм яҙыусыһы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев яҙғанса, һәр башҡорт кешеһенән үҙенең боронғо дәүерҙәрҙән бирле килгән нәҫел-нәсәбен, ырыу тарихын, уның ҡаһарман заттарын, үҙ халҡы тураһындағы дастан һәм риүәйәттәрҙе белеү талап ителгән. Был ҡағиҙә яҙылмаған ҡанунға әйләнеп, быуаттар дауамында теүәл үтәлә килгән. Совет осоронда ырыу-ҡәбилә мөнәсәбәттәре иҫкелек ҡалдығы, тип нарыҡланып, онотолоуға дусар ителһә лә, был тарихи ҡанунибыҙ юҡҡа сыҡманы. Атай-олатайҙарыбыҙ үҙ туғандарыбыҙҙы ете быуынға тиклем белеү кәрәклеге хаҡында беҙгә лә йыш һөйләр булды.**

Шуныһы мөһим: башҡорт донъяһында айырым урын тотҡан яҙма шәжәрәләребеҙ менән тарихсылар ҙа ҡыҙыҡһына башлағас, уларға ҡарата иғтибар бермә-бер артты. Был күренешкә дәүләтебеҙ етәкселәре лә битараф ҡалманы, халҡыбыҙҙың уҙаның күтәреүҙә шәжәрәләрҙе тергеҙеүҙең әһәмиәтен иғтибарға алып, уны бөтә республика кимәлендәге мөһим сара сифатында иғлан итте. Уҙған йыл ойошторолған республика шәжәрәләр конкурсы ошо эште тағы ла йәнләндерерәк ебәреп, үҙ шәжәрәләрен тергеҙә алғандар һанын байтаҡҡа арттырҙы. Яңы йыл алдынан ошо сараға йомғаҡ яһалғайны. Конкурстың "Шәжәрәне ентекле өйрәнгәне өсөн" номинацияһында Баймаҡ районынан Бикмәтовтар еңеп сыҡты. **Мират БИКМӘТОВ** менән әңгәмәләшәбеҙ:

- Ырыуыбыҙ тураһында күп тарихи мәғлүмәттәрҙе минә атайым (1882 йылғы) һөйләне. Беҙҙең шәжәрә тураһында ҡайһы бер яҙмалар һаҡланһа ла, тулы шәжәрәбеҙ юҡ ине. Шәжәрәбеҙҙе тәҙеү ниәте менән 1984 йылда Әнүәр Әсфәндийәровҡа мөрәжәғәт иттек. Ул беҙгә Ырымбур хәрби губернатор архивынан беҙҙең нәҫел кешеһе, башҡорт кантоны, яҫауыл Дәүләтша Бикмәтов тураһында документтар табып бирергә ярҙам итте. Ана шул яҙмаларға таянып, беҙ тамырҙарыбыҙҙың Силәбе өлкәһе Ҡонашаҡ районына барып тоташҡанын асыҡланыҡ. Тамырҙарыбыҙҙы юллап, 2001 йылда Ирек ҡусты һәм уның улы менән Арғаяш, Ҡонашаҡ райондарына барҙыҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ төйәге Иҫке Ҡорман ауылы юҡ инде хәҙер. Ҡыш булғанға күрә, хатта ауылыбыҙҙың урынын да күрә алманыҡ. Беренсе барғанда беҙ Арғаяш һәм Ҡонашаҡ районы, Силәбе өлкәһе гәзиттәре аша ырыуҙаштарыбыҙға "Кайҙа һеҙ, Дәүләтша кантондың нәҫелдәре?" тигән саҡырыу менән мөрәжәғәт иттек. Ошо мөрәжәғәттән һуң беҙгә яуап хаттары, шылтырыуҙар килә башланы. Беренсе сәйәхәттә Силәбелә йәшәүсе Фәйзәни Бикмәтов менән таныштыҡ. Ул беҙгә: "Минең Рәүеф улым Өфөлә йәшәй, унда беҙҙең ырыу, шәжәрә буйынса байтаҡ материал булырға тейеш", - тине. Баҡтиһәң, Рәүеф инде 12 йыл буйы үҙенең ауылының тарихын, Бикмәтовтарҙың шәжәрәһен өйрәнеү менән шөғөлләнгән булған икән. Артабан беҙ был эште Ирек, Рәүеф һәм мин өсәүләп дауам иттек. Бөгөн электрон вариантта беҙҙең туғандар 1625 йылғыларынан алып 3000-дән ашыу кешене тәшкил итә. Бөтә мәғлүмәттәр ҙә документтарға нигеҙләнгән. Тағы ла үҙебеҙҙең эҙләнеүҙәр ваҡытында бәләкәй генә шәжәрәләр таптыҡ. Фамилиябыҙҙы Бикмөхәмәт исемле олатайыбыҙҙың исемен ҡыҫҡартып Бикмәтов тип алғандар һәм беҙҙең фамилия 1695 йылдан алып үҙгәрмәгән.

Беҙҙең шәжәрә кемдеңдер йәки ниндәйҙер бер ғаиләнең генеалогик схемаһы ғына түгел, ә киң мәғәнәлә ғаилә, туғандар төркөмө шәжәрәһе, үткән тарихтың йылъяҙмаһы. 2009 йылда "Служивые Отечества" тип аталған үҙебеҙҙең шәжәрә китабын сығарҙыҡ. Был китап мәғлүмәттәренә таянып, Бикмәтовтарҙың төрлө быуындарынан йөҙәрләгән кеше, уҙған быуаттың 30-сы йылдарынан башлап, үҙҙәренең индивидуаль генеалогик схемаһын төҙөй ала.

Беҙ тағы ла фәнни принциптарға, ошо китапҡа, тарихи документтарға таянып, замана компьютер технологияларын һәм улдарының, ейәндәренең фотоларын ҡулланып, Бикмәтовтарҙың оло быуын кешеләренең хәтерләүҙәре буйынса Дәүләтша кантондың (1794-1850), Бикмәтов фамилияһының башлаусыһы Бикмөхәмәттең (1695-1767), Хужәхмәт Йәсәүиҙең (1829-1896) портреттарын эшләнек.

Бөгөнгө быуындарҙы тәрбиәләгәндә ырыу тарихы, шәжәрә ҙур әһәмиәткә эйә. Ейәндәребеҙ интернетта Бикмәтовтарҙың сайтын булдырҙы. Шулай итеп, хәҙер Бикмәтовтар бер-береһен интернет селтәр аша ла таба, аралаша ала. Йәш быуындың беҙҙең эшебеҙҙе дауам итеүе ҡыуандыра.

Шәжәрәбеҙҙе тағы ла тәрәнерәк өйрәнеү өсөн "Мииррауфи" (Мират, Ирек, Рәүеф) фәнни-эҙләнеү үҙәге төҙөнөк. 2008 йылда Баймаҡ ҡалаһында шәжәрә байрамы үткәрҙек. Байрамда Рәсәй һәм Башҡортостан тарихының мөһим этаптарын, ошо ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан Бикмәтовтар ырыуының данлыҡлы кешеләрен һүрәтләргә тырыштыҡ.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА**
**яҙып алды.**



ҺОРАУ - ЯУАП

### УҢАЙЛЫҺЫН ҺАЙЛАҒЫҘ

**Пенсияны Һаҡлыҡ банкыһының пластик картаһына күсерәсәктәр, имеш, тип ишеткәйнем, ә минә өйгә килтереп биреүҙәре бик уңайлы.**

-Борсолмағыҙ, һеҙҙең ризалыҡтан тыш, пенсиягыҙҙы картаға күсерергә бер кемдең дә хаҡы юҡ. Закон буйынса, пенсия аҡсаһы пенсионерҙың теләгенә ҡарап, банк кассалары йәки почта бүлексәһе аша таратыла. Уның үҙегеҙгә уңайлы теге йәки был төрөнә күсеү өсөн йәшәгән урындағы пенсия бүлегенә ғариза яҙырға кәрәк.

### ВАҠЫТЫНАН АЛДА

**Минә 47 йәш. Дөйөм эш стажым - 31 йыл, ә 2-се исемлек буйынса льготалыһы - 15,5 йыл. Шул иҫәптән 2002 йылға тиклемгә дөйөм стаж - 23 йыл, ә льготалыһы - 10,5 йыл. Мин 55 йәштән пенсияға сыға аламмы? Стажды өҫтәмә документтар менән раҫлау мотлаҡмы?**

-Ваҡытынан алда, йәғни 55 йәштән 2-се исемлек буйынса пенсияға сығыу өсөн ирҙәргә 25 йыл страховкалы стаж һәм һаулыҡ өсөн зарарлы шарттарҙа 12,5 эш стажы кәрәк.

Хат авторы үҙенең эш осорҙарын документтар менән раҫлаһа, пенсияға сығыу өсөн уға бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ юҡ.

### ЙӘШКӘ БӘЙЛЕ ТҮГЕЛ

**Пенсияны валоризациялау хаҡлы ялға 2002 йылдан һуң сыҡҡан "йәш" пенсионерҙарға ниндәй тәртиптә ҡағыла?**

- Валоризация пенсияға сығыу ваҡытына һәм кешенең йәшенә бәйле түгел. Буласаҡ пенсионерҙарға ул пенсия тәғәйенләнгән ваҡытта үткәреләсәк.

### ТАШЛАП КИТКӘН ӨСӨН

**Ҡул тормозына ҡуйып, машинамды магазин янында ҡалдырып торғайным, мин юҡта тормоз тросы өҙөлөп, машина яҡындағы йортҡа барып бәрелгән. Ләкин зыян күреүселәр юҡ, йортҡа ла бер ни ҙә булмаған. Ултырҙым да киттем, ҡараһаң, артымдан мине юл-патруль хеҙмәте машинаһы ҡыуып етеп, туҡтатты һәм протокол төҙөп, бер йылға машина йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм иттеләр. Был ғәҙелме?**

- Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы Кодекстың 1-се бүлегендәге 12-се статьяһында юл-транспорт ваҡиғаһы менән бәйле Юл хәрәкәте ҡағиҙәһендә ҡаралған бурыстарҙы башҡармаған өсөн яҙа (штраф) тейешле. Статьяның икенсе өлөшөндә юл-транспорт ваҡиғаһы булған урынды ташлап (ҡалдырып) киткән өсөн яҙа биреү ҡарала, ә һеҙҙең осраҡта тап шулай килеп сыҡҡан да. Шуға күрә инспекция хеҙмәткәрҙәрен ғәйепләү дөрөҫ түгел. Ә инде уларҙың ҡарары менән риза булмаһағыҙ, һеҙҙе транспорт йөрөтөүгә хоҡуҡтан мәхрүм иткән суд өҫтөнән унан юғарыраҡ суд инстанцияһына ғариза яҙығыҙ. Шуны ла онотмағыҙ: хоҡуҡтан мәхрүм итеү ваҡыты автомобиль йөрөтөүгә ваҡытлыса таныҡлыҡ бирелгән көндән башлана.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Быуындар һыҙлаһа

1 лирт ҡайнаған һыуға 1 ҡалаҡ сәй содаһы һалып болғарға һәм таҙа сепрәк менән һыҙлаған ергә йылы килеш һөртергә, бәйләмәскә. Һыҙлау бөткәнсе көн һайын 1 мәртәбә эшләргә.

Йөн ойоҡ йәки бейәләйгә 1 ҡалаҡ тоҙ һалып иретелгән 1 стакан йылы һыуҙы һеңдерергә лә һыҙлаған урынға ярты сәғәткә һалып ҡуйырға. Тоҙ һеңгән ойоҡто йә бейәләйҙе һығып, һыҙлаған ергә ябып, бәйләп ҡуяһың. Һыҙлаған урынға һыулан (мокрица) үләнен ябаһың, бешереп йыуаһың. Әрһеҙ үлән, ҡар аҫтында ла йәшел көйө һаҡлана.

### Эс бығырлаһа

Быға ашыҡ-бошоҡ ҡоролай ашауҙан эскә тулған һауа сәбәпсе. Ә ололарҙа эсәк мускулдары йомшарыуҙан килә, газ йыйыла. Бынан ҡотолоу өсөн дарыуханала һатылған күмерҙе алып ашағыҙ. Валериан тамырын, ромашка сәскәһен, меңъяпракты, әнис (укроп) орлоғон бергә болғарға ла, 1 ҡалаҡ ҡатнашманы 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтеп, һөҙөргә. Аҙна буйы ашар алдынан ярты сәғәт алда стакандың өстән бер өлөшөн эсергә. Борсаҡ, ҡуҙғалаҡ, виноград, шәрбәтле алма, кәбеҫтә ашауҙы сикләргә.

### Күңел ҡатмаһын өсөн

Тормошта ауыр ҡайғы ла, ҙур шатлыҡ та күп. Был ике осраҡта ла 3-5 минут һалҡын һыуҙа атларға йәки өрпәк ҡарҙа йөрөргә кәрәк, һуңынан аяҡтарҙы һөртмәйенсә генә йылы ойоҡ кейергә һәм иҙән буйлап атларға. Шунан ҡулдарҙы, арҡа-түштәрҙе сылатырға, һөртөнмәйенсә кибенергә, гел хәрәкәтләнергә. Был ысулды мәшәкәтле тип табыусылар ҡоҙоҡтан һыу алып ҡойона ала, әммә хәрәкәтләнеү мотлаҡ. Был алымдар ауыр ҡайғы, ҙур шатлыҡ килгәндә тыуған ярһыуҙы кәметә, йөрәкте һаҡлай.

### Баш ауыртһа

Бәләкәй генә моҡсаға тоҙ тултырып, һыуыҡтыстың туңдырыу камераһына һалып ҡуйып алаһың да, баштың түбәһенә генә ҡуйып, 10-дан 1-гә тиклем һанарға. Быны 10-15 минут дауамында эшләргә. Ауыртыу үтер. Баш, маңлай ауыртҡанда уҡыла торған доғаларҙы ла онотмағыҙ.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА.**

✓ *Бәпесте бишектә бәүетеп түгел, ә моңло көй менән арбап-әүрәтеп йоҡлатыу уны тынысландырыу менән бергә, үҫә төшкәс, уның милли йыр-көйҙәребеҙгә өҫтөнлөк биреүенә лә булышлыҡ итәсәк.*

*АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ*

**Яҙмыштан уҙмыш юҡ, тиһәләр ҙә, кешенең шәхси тормошоноң ниндәй йүнәлеш алыуы ғаилә тәрбиәһенән дә, уның үҙенән дә тора. Тыуған мәлдәрендә барса сабыйҙар бер-береһенән әллә ни айырылып тормай, шулай ҙа һәр кемдең нәҫел-гендары аша бирелгән үҙ булмышы бар, һәм ул бала бишектә ятҡанда уҡ айырым-асыҡ төҫмөрләнә. Кемдең тынысыраҡ холоҡло, тиҙ әүрәүсән, баҫалҡы, ә кемдең саманан тыш хәрәкәтсән, талапсан булып, үҙен алдымыраҡ күрһәтергә ынтылыуы бик иртә беленә башлай. Беҙ, ололар, йәмғиәттә шулай ҡабул ителгәнгәме икән, бына ошо ҡабатланмаҫ үҙенсәлектәре менән айырылып торған балаларыбыҙҙы билдәле бер ҡалыптарға ярашлы тәрбиәләргә тырышабыҙ.**

# ҠАЛЫП ИТЕКСЕГӘ ХУШ,

## ә ғаилә ижади ҡараш талап итә

### Сабыйҙы бәүетеп йоҡлатыу файҙалымы?

Ҡалыптар - бөтә кешеләр ҙә берҙәй ҡабул итә торған нәмә: сабыйҙы бишеккә һалып, тирбәтеп-бәүетеп йоҡлатыу ҙа шул уҡ бер ҡалыпҡа һалынған күренеш. Ә ҡалыптарҙың ҡайһыһы файҙалы булһа, ҡайһыһының зыянлы булыуы ла бар бит. Эйе, илап маҙаһыҙланған бәпесте бишеккә һалып бәүетһәң, ул тиҙ арала йоҡлап та китә. Бының әллә ниндәй сере лә юҡ һымаҡ: бишектә билдәле бер ритмда тирбәтелгән баланың һиҙеү-тойоу рецепторҙары үҙ эшмәкәрлеген ныҡ түбәнәйтә, сөнки бәүетеү иң әүәл сабыйҙың мейеһен арытыуға, унда, нейрофизиологтар әйтмешләй, тормоз процестарын көсәйтеүгә килтерә. Тимәк, бына ошо бала ҡарау ҡалыбын сабыйҙың мейе эшмәкәрлеген яһалма рәүештә тотҡарлап тороуға тиңләп була. Етмәһә, бишеккә һалып бәүетеү, тап академик Павлов әйткәнсә, үтә тотороҡло шартлы рефлекс булдыра. Бала көйһөҙләнә башлаһа, уны бишеккә һалыу ҙа етә.

Байтаҡ йылдар элек әсәһеҙ ҡалған сабыйҙар йортонда тәрбиә режимы менән танышҡас, бик аптырап ҡалғайным: баҡтиһәң, бындағы балалар тәүлектең дүрттән өс өлөшөн йоҡлап уҙғарырға тейеш икән. Әлбиттә, бындай шарттарҙа "тәрбиәләнгән" бала ғаиләләрҙәге тиҫтерҙәренән нныҡ артта ҡала. Заман психологтары билдәләүенсә, бишектә түгел, әсә ҡулдарында йоҡлап киткән бәпес психикаһында хәүефһеҙлек, ҡурсаланғанлыҡ тойғоһо тотороҡло була. Күрәһең, Азия илдәре ҡатын-ҡыҙҙарының сабый баланы һәр саҡта ла үҙҙәренән айырмай йөрөтөүендә быуаттар төпкөлөнән килгән халыҡ аҡылы сағылыш табалыр. Әйткәндәй, бәпесте бишектә бәүетеп түгел, ә моңло көй менән арбап-әүрәтеп йоҡлатыу уны тынысландырыу менән бергә, үҫә төшкәс, уның милли йыр-көйҙәребеҙгә өҫтөнлөк биреүенә лә булышлыҡ итәсәк.

### Балаларыбыҙ беҙҙе ҡабатларға тейешме?

Беҙгә балаларыбыҙҙан да ҡәҙерлерәк башҡа бер кем дә юҡ, шуға ла уларҙың киләсәге хаҡына мөмкин булғандың барыһын да эшләргә әҙербеҙ. Тик шуныһы: беҙ баланы үҙебеҙ ҡабул иткән ҡалыптарға ярашлы формалаштырырға тырышабыҙ, һәм йыш ҡына, уның булмышының ошо талаптарға тура килмәгәнен күрә-белә тороп, ҡуйған маҡсатыбыҙҙан ситкә тайпыла алмайбыҙ. Ә был үҫеп килеүсе шәхес өсөн файҙалымы һуң? Мәҫәлән, кемдер баланы, уның мөмкинлектәрен, һәләтен һәм теләген иҫәпкә алмайынса, мотлаҡ музыка мәктәбендә уҡытырға тырыша. Баланың музыка ҡоралдарында уйнай белеүе һәйбәт тә һуң, әммә был шөғөлдө үҙ итмәгән үҫмер күңелендә туҡтауһыҙ йәне һөймәгән күнегеүҙәр менән шөғөлләнеү тора-бара ытырғаныс уятып, ҡасан да булһа ҡаршылыҡ күрһәтеү менән тамамланасаҡ. Был балаларҙы йәлеп итеп булған бар өлкәләргә лә ҡағыла. Әгәр ниндәй ҙә булһа шөғөл өсөн балала етерлек ҡыҙыҡһыныу һәм һәләт юҡ икән, уны мәжбүри рәүештә ошоға өйрәтергә маташыуҙан бер фәтеүә лә булмаясаҡ.

Ҡайһы саҡта ата-әсәләр үҙ тормоштарында ғәмәлгә ашмаған хыял-маҡсаттарын балаларына күсерергә ынтылғандай тойола. Был осраҡта беҙ барлыҡ изге ниәттәребеҙҙе балаларыбыҙ өсөн башҡарабыҙ, тиһәк тә, уларҙы үҙебеҙ өсөн, үҙебеҙ уйлағанса йәшәтергә ынтылабыҙ. Әгәр бала үҙен беҙ махсус ҡорған фекер ситлектәренә ярашлы тотмай башлаһа, аптырайбыҙ, ғәжәпләнәбеҙ, үпкәләйбеҙ, хатта асыуланабыҙ ҙа. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ үҙебеҙҙе балаларыбыҙ урынына ҡуя алмаған һымаҡ, улар ҙа тик беҙгә ҡулайлы булып тойолған ҡалыптарға ярашлы йәшәй алмаясаҡ. Ололар, башлыса, үҙҙәре тәрбиә алған заман ҡанундарынан артыҡ ситкә китә алмай, ә йәш быуын ата-бабаларын ҡабатламайынса, үҙ ғәмәлдәрен үҙенсә ҡороуҙы хуп күрә. Аталар һәм балалар конфликты тип исемләнгән бындай ҡапма-ҡаршылыҡ һәр йәмғиәткә хас күренеш. Б.э. тиклем ижад ителгән боронғо грек трагедияларының береһендә атаһы улының тәртип-ҡараштары менән риза булмайынса, йәштәрҙең оҙон сәс үҫтереп, килешһеҙ кейемдә йөрөүен тәнҡитләй. Әгәр йәштәр тик ололар талап иткәнде, улар ҡушҡанды ғына үтәү менән ҡәнәғәтләнеп йәшәһә, бер ниндәй ҙә алға китеш, үҫеш булмаҫ ине. Тимәк, йәштәрҙең үҙ белдеге менән, үҙ тойомо менән үҙаллы тормош ҡороуына һис ҡаршы тормау фарыз. Миңә ҡалһа, йәмғиәтебеҙҙең генә түгел, дәүләтебеҙҙең күп проблемалары беҙҙә традиционлыҡ, ҡәҙимселек принциптарының тейелгеһеҙлегенән хасил була. Иҫкергән ҡараштарҙан, урынһыҙ консерватизмдан азат була алмауҙың ҡеүәтле дәүләттәрҙе емереүсе көстәрҙе уятыу өсөн төп шарт булыуы раҫ бит.

### Ата-әсә тупаҫлығы - бумеранг

Ғаилә мөхитендә тотош йәмғиәткә хас булған иҫке, күнегелгән ҡалыптар уғата киҫкен ҡапма-ҡаршылыҡтарға килтерә. Мәҫәлән, беҙ дәүләт идараһы системаһын үҙе баш, үҙе түш булған хакимдан башҡа күҙ алдына килтерә алмайбыҙ, был ҡанун барса авторитар йәмғиәттәргә хас нәмә. Авторитар система тышҡы яҡтан үтә ойошҡан һәм һөҙөмтәле булып тойолһа ла, уға һәр саҡта ла һис көтөлмәгән хәүеф-хәтәр янай: күпмелер ваҡыт үтеүгә хакимға ҡаршы төркөм ойошоп, үҙ лидерын мотлаҡ өҫкә сығарыуҙы маҡсат итеп ҡуясаҡ. Әгәр ғаиләлә шулай уҡ тик бер кешенең өҫтөнлөгө (ғәҙәттә, ир кешенең) хөкөм һөрһә, ғаилә ағзаларының уға һис һүҙһеҙ буйһоноуына ҡарамаҫтан, ошо бәләкәй социумда эске көсөргәнешлек артҡандан-арта бара. Ғәҙәттә, ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡ осраҡтары, теге йәки был етешһеҙлектәр килеп сыҡһа, ғаилә башлығы башҡа ғаилә ағзаларына дәғүә белдерә башлай, хатта уларҙы ҡыйырһытыу-рәнйетеүҙе лә бар тип тә белмәй. Авторитарлыҡты үҙ иткән ғаилә башлығы үҙ холҡон, үҙ мөнәсәбәттәрен үҙгәртеү тураһында уйлап та бирмәй, ә ғаилә ағзаларынан ғәҙел булмаған ҡылығы өсөн ғәфү үтенеүҙе бөтөнләйгә ек күрә. Бындай ғаиләләрҙә үҫкән балалар тиҙ тоҡанып барыусан булып, үҙ тиҫтерҙәренә ҡарата агрессивлыҡ күрһәтә башлай. Ғәҙәттә, ошондай ғаилә башлығы ҡартайып, кәре кәмегәс, үҙҙәре үҫеп етеп, ғаиләле булған балалары ла уның үҙенә ҡарата үтә ҡырыҫ буласаҡ. Һәр хәлдә лә, уларҙа ысын туғандарса яҡынлыҡ, шәфҡәт һәм мәрхәмәт менән тулы ғаиләләрҙә генә үҫешә алған әхлаҡи сифаттар юҡҡа тиң була. Таныштарымдың береһе ошондай ҡаты күңеллелек, хатта тупаҫ һәм уҫал мөнәсәбәттәр хөкөм һөргән ғаиләлә үҫеүе хаҡында бик әсенеп һөйләгәйне. "Ата-инәйем үҙемдеке түгелдер, уларҙың үҙ балаһы булһам, шулай ҡаты тотмаҫтар ине", - тип, ул үҙен бала сағында бәхетһеҙ итеп тойоуын иҫкә алды. Ҡартайған ата-әсәһен ситкә типмәне, ләкин күңелендә уларға ҡарата ысын, ихлас яратыу ҙа булманы уның. Бына бит ул нисек: был ир-егеттең үҙенә лә ошондай уҡ тупаҫлыҡ, үҙе лә аңлай алмаған агрессивлыҡ хас булды. Ахыр сиктә, ул ғаиләһен ташлап, бәхет эҙләп, сит яҡтарға сығып китте...

### "Ғаилә романы"н нисек яҙырға?

Ижадында фәлсәфәүилиге бик көслө сағылыш тапҡан Лев Толстой бар бәхетле ғаиләләрҙең бер-береһенә оҡшаш булып, һәр бәхетһеҙ ғаиләнең үҙенсә бәхетһеҙ булыуы хаҡында фәһемле фекер әйтеп ҡалдырған. Әммә һәр ғаилә үҙ бәхетенә үҙенсә юл аса, һәм ғаилә бәхетен бер ҡалыпҡа һалып үлсәп булмай. Минеңсә, һәр яңы ҡоролған ғаиләне яңы ғына яҙыла башлаған ижади әҫәргә тиңләп булыр ине. Уның авторҙары билдәле инде - ир һәм ҡатын. Әгәр улар үҙ тормоштарын көндән-көн ҡабатлана килгән бер төрлөлөккә дусар итһә, әллә ни ҙур уңышҡа, йәғни бәхеткә өлгәшә алмаясаҡ. Бәхет асылын тормош еңеллегендә һәм матди байлыҡта ғына күреүселәр нныҡ яңылыша, сөнки ошондай шарттарҙа йәшәп тә, үҙҙәрен бәхетле итеп тоя алмағандар бихисап. Йәшәү бәхетен дә, тормош нисек кенә ауыр һәм ҡатмарлы булмаһын, ишле ғаиләнең бөгөнгөһөнән дә, киләсәгенән дә табып була. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: бер генә бала бағыу менән хушһынған ир менән ҡатын үҙ ғаиләһен, шул иҫәптән яҡын туғанһыҙ үҫкән балаһын тик туғандар араһында ғына хасил булған бәхетле аралашыуҙан мәхрүм итә. Ғаиләлә тыуған һәр бала ата-әсәһенә лә, туғандарына ла иҫәпһеҙ күп бәхетле мәлдәр алып килә. Шулай булғас, "ғаилә романы" ла ни тиклем күп персонажлы һәм сюжетлы була икән, ул шул тиклем ылыҡтырғыс һәм һоҡланғыс була. Әлбиттә, күп балалы ғаилә ҡороу ата-әсә иңенә оло яуаплылыҡ йөкмәй, әммә балаларының бөгөнгөһөнән һәм киләсәгенән табылған ҡыуаныс ҡына ысын ғаилә бәхетенә нигеҙ була.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

# ТОРМОШ ДАУЫЛДАРЫ ҮТҺӘ ЛӘ,

## күңел ярһыуҙары һис тынмай

- Йәш саҡта хаталаныуҙарҙан һаҡлан, ул хаталар ҡартлығыңда кесерткәнле һуйыл менән "һыҙырыр", бөтмәҫ күңел ғазабы кисертер.
- Ҡайғы килгәндә бөгөлмә, түҙ - кәүҙәң булһын тәҙ, телең һөйләһен ғәҙел, изге һүҙ.
- Күңелең һәр саҡ булһын аҡ һәм пак - керле күңел тутығып серегән тимергә тиң.
- Таяҡ күтәргәнгә күҫәк күтәрмә - күҫәк башыңды ашар.
- Иң тәмле алма орлоғонан да татлы алма үҫмәгән кеүек, тормоштоң да бөтә яҡшылығы ләззәт-рәхәтлек бирмәүен аңлай белеү - оло асыш, ҙур хәҡиҡәт.
- Тормоштоң әсе ел-дауылы, бәлә-ҡазалары, төрлө яу-афәттәре үтте, тынлыҡ, рәхәтлек килде, тип хушланмағыҙ: күңелдәге ярһыуҙар, ашҡыныуҙар-елкенеүҙәр, фекер көрәштәре бер ҡасан да тынмай, туҡтамай - яу дауам итә.
- Бейеккә күтәрелер алдынан алда төшөүеңде хәстәрлә - тәкмәсләүең бар.
- Оялам, тип йыуашланма - әрһеҙ әҙәм ауыҙыңдағы телеңде лә һурып алыр.
- Матур әйберҙәргә ҡыҙыҡма - ул күҙ яратыуы ғына, яҡшы күңелле кешеләргә һоҡлан - ул йөрәк һөйөүе, аҡыл күҙе.
- Ҡайһы бер дуҫтарыңдың ысын кеше булырға теләмәүен уйлама, үҙеңдең ысын кеше булыу мөмкинлегеңде юғалтыуҙы уйла.
- Әҙәпһеҙҙәргә ҡарап ғибрәт ал да әҙәплелеккә ынтыл.
- Көсөң етмәҫлек эшең килеп сыҡһа, күршеңә мөрәжәғәт ит - урамдан үткән-сүткәнде көтөп һағалама.
- Көслөмөн, тип гел йоҙроҡ болғама - көнө килһә, "ата ҡаҙ" менән "йолҡош әтәс"кә лә сәләм бирәһең.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы Байым ауылы.**

ОЛУҒ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ

# ПУШКИН ӘКИӘТЕНДӘ - ЛУКОМОРЬЕ...

## ысынбарлыҡта ул - Башҡорт хандың Ҡара диңгеҙ буйындағы дәүләте

**Боронғо ғәрәп тарихсыһы Әл-Бәлхи башжордтарҙы (башҡорттарҙы) ике ҙур ҡәбиләгә бүленгән, ти. Береһе болғарҙарға яҡын урман-тау тарафтарында, икенселәре бәжәнәктәргә сиктәш ерҙәрҙә һәм румиҙар менән күршеләш, тип яҙа ул. Тимәк, башҡорттарҙың төп ватаны һәм йәшәгән ырыуҙарының күпселек өлөшө хәҙерге Көньяҡ Урал, Яйыҡ, Волга буйҙары икәнлеге лә асыҡлана.**



Башҡорт хан. Ансар Ғалин һүрәте.

Ә урта быуат ғәрәп тарихсылары Әл-Димашки, Әбүлфида, Әл-Бакуви яҙмаларынан бәжәнәктәр менән союздаш башҡорттарҙың XI-XII быуаттарҙа Ҡара диңгеҙ буйында Днепр менән Днестр йылғалары араһында үҙаллы ханлыҡ төҙөгәне аңлашыла. Быны нәҡ ошо XI-XII быуаттарҙа Ҡара диңгеҙ буйындағы әлеге территорияла Башҡорт хан төҙөгән ханлыҡ ныҡлы раҫлай (Рус тарихи яҙмаларында (летописи) Лукоморье - диңгеҙ буйы ханлығы, тип исемләнә).

Хазар ҡағанаты хәлһеҙләнгәс йәки тарҡалғас, көнсығыштан ҡимаҡтар, көньяҡтан уғыҙҙар тарафынан ҡыҫырыҡланған көньяҡ-көнбайыш башҡорт ырыуҙарының ҙур төркөмө ҡыпсаҡтар, бәжәнәктәр менән бергәләп, көнбайышҡа, Азов диңгеҙе, Тын йылғаһы буйы далаларына, Ҡара диңгеҙ буйҙарына күсеп китергә мәжбүр булған. IX-X быуаттарҙа инде улар ошо ҙур территорияла, ғәрәп яҙмаларында исемләнгәнсә, Дәшти-Ҡыпсаҡ - Ҡыпсаҡ иле тигән ҡәбиләләр берләшмәһендә йәшәп ята.

XII быуатта рус йылъяҙмаларында Бүнәк хан, Шару хан, Һәләүек хан, Башҡорт хан, Утраҡ хан исемдәре йыш күренә. Шулар араһында Ҡыпсаҡ берләшмәләрен бергә туплауы менән ҡеүәтле Бүнәк хан ҡаған дәрәжәһен тотҡан. Уның заманында Башҡорт хан олуғ хан менән бер нисә яуҙа ҡатнашҡан булырға тейеш. Олуғ хандың даны һәм кәре кәмеп, Ҙур урҙаһы тарҡала башлаған йылдарҙа Башҡорт хандың Диңгеҙ буйы урҙаһы нығынып китә. Уның урҙаһы, рустарҙың Ипатьев йылъяҙмаһында күрһәтелгәнсә, 1159 йылда 20 мең кешегә етә, биләмәһе Днепр йылғаһының түбәнге ағымын, Ҡара диңгеҙ, Азов диңгеҙе буйҙарын иңләп ята. Рус тарихсыһы В.Н. Татищев уны иң көслө хан-кенәздәрҙең береһе, тип атай.

Владимир Мономахтың улы Мстислав кенәз Киев тәхетендә ултырған осорҙа, 1128 йылда, Олег кенәз тоҡомонан Всеволод кенәз тәхеткә дәғүә итеп, Киевты яулап алыр өсөн ярҙамға ҡыпсаҡ ханы Һәләүекте ғәскәре менән саҡыра. Быға Башҡорт хан да ярҙамға килергә әҙер тора. Ләкин был яу әллә ни уңыш килтермәй.

Олег кенәз тоҡомдары (Ольговичтар) менән туғанлашҡан Башҡорт хан Ярополк кенәз 1135 йылда Киев тәхетендә ултырған саҡта Всеволод кенәздең саҡырыуы менән йәнә Киев кенәзлегенә ҡаршы яуҙа ҡатнаша. Всеволод кенәз ғәскәрҙәре менән берлектә улар Переяславль кенәзлеген ҡыйратып, Киев эргәһенә килеп етә, унан алыҫ түгел Городец нығытмаһын яндыра. Ләкин бейек таш ҡәлғә менән уратып алынған Киевты яулап ала алмайҙар. Шулай ҙа Всеволод кенәз 1140 йылда тәхетте барыбер яулап ала.

Киевта тәхет өсөн көрәш ҡыҙа ғына бара. Ростов-Суздаль кенәзе Юрий Долгорукий үҙенә ярҙамға Чернигов кенәздәре Изяслав менән Владимир Давыдовичтарға һәм Башҡорт ханға мөрәжәғәт итә. Рус йылъяҙмаларына теркәлеп ҡалған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, был юлы Киев өсөн һуғыш үтә ҡаты була. Днепр аша кисеүҙән һөжүм иткәндә, Киев ҡәлғәләре янында Юрий кенәздең ғәскәре, Башҡорт хан һыбайлылары күпләп ҡырыла. Сигенгән ваҡытта Юрий Долгорукий менән ҡыпсаҡ ханы ғәскәре Рутец йылғаһы буйында Изяслав Мстиславич ғәскәре тарафынан ҡамап алына һәм бөтөнләй ҡыйратылыу йә әсир төшөү ҡурҡынысы аҫтында ҡала. Кенәздәр һөйләшеп килешергә ынтылып ҡарай. Быға Башҡорт хан ҡырҡа ҡаршы төшә. Уға әсир бирелеү үҙ ханлығынан һәм башынан яҙыуға тиң һанала.

Яңынан һуғыш башлана. Долгорукий менән хан ғәскәре дошман ҡулсаһын өҙөп, далаға ысҡына. Был яуҙа Башҡорт хан ғәскәренең бер сарҙары, Бүнәк хандың улы Һөйөнөс батыр, кенәздәр яғынан Владимир Давыдович һәләк булып ҡала. Күп кенә яугирҙар әсиргә эләгә.

Чернигов кенәздәренең иң яҡын дуҫы, союздашы булып танылған Башҡорт хандың яу батырлығы, дипломатик һәләте кенәздәр араһында ҙур абруй ҡаҙандырһа, уның мөһабәтлеге княгинялар ҡоронда һоҡланыу ҙа тыуҙырғандыр, моғайын. Владимир Давыдович кенәз һәләк булғас, тол ҡалған княгиняның ҡасып китеп тигәндәй, Башҡорт ханға ханша булып кейәүгә сығыуы бөтә ҡыпсаҡ далаһы, рустар, хандар, бейҙәр, кенәздәр, воеводалар өсөн оло ваҡиғаға әйләнә. Никах менән нығытылған был туғанлыҡ Башҡорт хан урҙаһы менән Чернигов кенәздәре, Давыдовичтар араһын тағы яҡынайта.

Киев тәхетендә ултырған Юрий Долгорукий 1157 йылда вафат булғас, уның урынына олуғ кенәз итеп Чернигов кенәзе Изяслав Давыдович ултыртыла. Ҡәйнеше Изяслав Давыдовичты тәхеткә ултыртышыуҙа Башҡорт хандың роле аҙ булмай.

Чернигов кенәздәре Ольговичтар тоҡомоноң Киев кенәзлегенә йоғонтоһо бөткәс, Изяслав Давыдович олуғ кенәзлектән төшөрөлгәс, Башҡорт хандың исеме Киев Русе тарихында, йылъяҙмаларында бүтәнсә йыш күренмәй. Башҡорт хан ҡартая барһа ла, XII быуаттың 80-се йылдарында уның ханлыҡ урҙаһының шаҡтай ҡеүәтле икәне рус тарихына һаман билдәле әле. Был осорҙа Башҡорт хан урҙаһы Урал башҡорттары иҫәбенә лә нығына барған, буғай. Ул кәрәк сағында ярҙам һорап, алыҫ ҡәрҙәштәренә лә мөрәжәғәт иткән булырға тейеш.

Аҡ һөйгәнде хаҡ һөйгән, ти башҡорт мәҡәле. Боронғо Киев Русе тарихында мәғлүм урын тотҡан, Чернигов, Киев олуғ кенәздәре менән дуҫлашып һәм туғанлашып йәшәгән Башҡорт хандың ханлыҡ дәрәжәһе, яу батырлыҡтары, илселек һәләттәре, бағындырыр ир-егетлек сифаттары менән уның тоҡомдаштары ғорурланырға хаҡлы. Иң мөһиме, Башҡорт хан - башҡорт-ҡыпсаҡ дәүләтен төҙөгән беҙгә билдәле иң беренсе олуғ тарихи шәхесе. Уның исеме, эштәре тарихыбыҙҙа, йырҙарҙа, тарихи әҫәрҙәрҙә маҡталырға, тулы баһаланырға лайыҡ.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**("Тарих сәхифәләре" китабынан).**

БЫЛ - ГОНАҺ!



# АТА-ӘСӘНЕ ТЫҢЛАМАУ

**Ҡөрьән-Кәримдең "Исра" сүрәһенең 23-24-се аяттарында былай тип әйтелә: "Раббың бары тик үҙенә генә ғибәҙәт ҡылыуығыҙҙы, ата-әсәгеҙгә лә изгелекле булыуығыҙҙы ҡәтғи рәүештә бойорҙо. Уларҙың береһе йәки икеһе лә һеҙҙең янда ҡартайһа, уларға: уф (туйҙым һеҙҙән), тип әйтмәгеҙ; уларға ҡысҡырмағыҙ; икеһенә лә яҡшы мөғәмәләлә булығыҙ. Миһырбанлыҡ һәм түбәнселек менән улар алдында (күңел) ҡанаттарын йәй ҙә әйт: "Раббым, сабый сағымдан алып улар мине нисек яратып үҫтергән булһа, Һин дә уларға шулай мәрхәмәтле бул", - тип доға ҡыл".**

"Беҙ кешеләргә ата-әсәгә изгелекле булыуҙарын васыят иттек. Әгәр улар һин танымаған, белмәгән башҡа бер нәмәне Миңә тиңләштерһәләр (һәм шуға инанырға ҡушһалар), уларға итәғәт итмә. Һеҙ Минең янға ҡайтарыласаҡһығыҙ. Шул саҡта Мин һеҙ ҡылғандар тураһында хәбәр бирермен" ("Ғәнкәбүт", 8).

Аллаһ илсеһе (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ете һәләкәтле гонаһтарҙы һанаған ваҡытта ата-әсәне тыңламауҙы ла телгә алып үткән. Ул былай тигән: "Һинең атайыңа булған яҡшы мөғәмәләң ожмахҡа иң яҡшы ишектән инеүгә сәбәп булыр. Бөгөндән башлап был һинән тора: йә уның хоҡуҡтарын ҡабул итеп, ишек аша үтәһең, йәки уның хоҡуҡтарын боҙоп, уға ҡарай юлды юғалтаһың".

Бер көндө Бәйғәмбәргә (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәләрҙең береһе "Мин һуғыш походында ҡатнаша аламмы?" - тип һорарға килгән. Бәйғәмбәр: "Ата-әсәйең иҫәнме?" - тип һораған. "Эйе", - тип яуап биргән сәхәбә. "Уларҙы ҡарау һинең йыһатың булһын", - тип яуап биргән Бәйғәмбәр.

Бер көндө Аллаһ илсеһенән (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) "Кемгә яҡшы мөғәмәлә итергә кәрәк?" тип һорағандар, быға ул: "Әсәйеңә, атайыңа, һиңә иң яҡын апайыңа, ағайыңа, һуңынан инде башҡа яҡын туғандарыңа", - тип яуап биргән.

Бәйғәмбәрҙең ошондай һүҙҙәре лә бар: "Ожмахҡа ата-әсәһен хөрмәт итмәгәндәр, күрһәткән шәфҡәтлелекте аҙһыныусылар, эскеселәр һәм сихырға ышаныусылар инмәйәсәк".

Бер кеше Бәйғәмбәрҙән: "Эй, Аллаһ илсеһе! Әгәр ҙә мин намаҙ уҡыһам, Рамаҙан айында ураҙа тотһам, зәкәт түләһәм һәм Аллаһ йортона йөрөһәм, һин миңә нимә эшләргә ҡушырһың?" Бәйғәмбәр: "Был ҡағиҙәләрҙе үтәгән һәм ата-әсәһен хөрмәтләгән кеше бәйғәмбәрҙәр, диндар кешеләр һәм шәһиттәр янында булыр", - тип яуап биргән. Һәм тағы шулай тип дауам иткән: "Бөйөк Аллаһ ата-әсәне хөрмәтләмәүҙән башҡа һәр төрлө аҙымды Ҡиәмәт көнөнә тиклем кисектереп тора, сөнки Аллаһы Тәғәлә ата-әсәһен хөрмәтләмәгән кешене язаларға ашыға".

Бәйғәмбәр тағы былай тигән: "Инәй (әсәйҙең апайы) - әсәй кеүек".

## ...СИТТӘН ТОРОП

**Осрашыуҙар мәлендә беҙҙән йыш ҡына: "Кемдәр гәзиттең авторы була ала?"- тип һорайҙар. "Уйлы, фекерле кешеләр", - тип яуап бирәбеҙ. "Һәр кем уйлай ҙа, фекерләй ҙә белә инде ул", - тиер кемдер был юлдарҙы уҡығас. Әлбиттә, белә, ләкин уйламай, фекерләмәй йәшәгәндәр ҙә күп хәҙер. Уйлағанда, күңел төпкөлөндә күп һорауҙарға яуап табып буласаҡ. Бер риүәйәт бар: "Хоҙай Тәғәлә кешеләрҙең туҡтауһыҙ зарланыуынан, уфтаныуынан шул тиклем арып китеп, "Ҡайҙа ғына ҡасып торайым икән быларҙан? Диңгеҙ төбөнә төшһәм - табырҙар, иң бейек тау түбәһенә ҡасһам да аһ-зарҙары барыбер килеп етер…" тип аптыранып ултырғанда, фәрештәһе уға: "Хоҙайым, һин шул кешеләрҙең күңел төпкөлөнә инеп ултырып тор, улар бер ваҡытта ла унда күҙ һалмай", тигән…" Был риүәйәттә әле генә әйтелгән хәҡиҡәт сағыла: уйланмай йәшәүселәр күп. Ә бына "Киске Өфө"нө уйлана белгәндәр уҡый. "Киске Өфө"гә уйлана белгәндәр яҙыша. Бына шундай авторҙарҙың бер нисәһе менән ситтән тороп диалог ҡорҙоҡ, йәғни уларға өс һорау бирҙек. Был һорауҙарға яуап яҙып, хат һәм электрон почта аша беҙгә яуап ебәреүселәр - Баймаҡ ҡалаһынан Урал МОСТАФИН, Өфөнән Фәүзиә ЯХИНА (Усманова), Учалынан Спартак ИЛЬЯСОВ. Һүҙ - авторҙарыбыҙға.**

**▸ Шөғөлөгөҙ журналислыҡ булмаһа ла, яҙышырға яратаһығыҙ. Был һеҙҙең битараф булмауҙан киләлер. Ғөмүмән, гәзиткә мәҡәлә яҙғанда һеҙ ниндәй теләк-ынтылыштар менән солғанаһығыҙ? Яҙғандарығыҙҙың ниҙелер үҙгәртеренә, донъяны яҡшыртырына, кемделер тәрбиәләренә ышанаһығыҙмы?**

тәжрибә алып, күпме кеше үҙ ғүмерендә кешелек сифаттарын һаҡлап ҡала алғанын кем иҫәпләп ҡараған?!

Яҡшылыҡ, әҙәплелек яу һалып ҡысҡырып йөрөмәй, шуға ла улар күҙгә күренә һалып бармай. Ә аламалыҡ, яуызлыҡ, тәртипһеҙлек күңелде болғатып, йәнде ерәндереп, донъяны баҫып алып бара, яҙышып маташмаҫ та инем. Робағи, мәҫәл, шиғырҙарым уйлы кешеләрҙе уйландырһа, ғәмлеләрҙе сәмләндерһә, бирешкәнде өмөтләндерһә, көйөнгәнде һөйөндөрһә, уйҙарынан яңғыҙы алйып ыҙалағанға фекерҙәш, иптәш булһа, мин шуның менән дә ифрат ҡәнәғәт булыр инем. Иманым камил, яҡшы уй-ниәттән эш-

да, дөйөм фекерҙәрҙе редакцияға яҙып ебәрәм. Улар гәзит биттәрендә баҫылып та сыға. Тимәк, гәзит үҙ уҡыусылары менән диалог ҡора, тығыҙ бәйләнештә ижад итә. Шағирыбыҙ Рәми Ғарипов яҙғанса:

Һәр нәмәне халҡым зиһене менән,

Халҡым күҙе менән күрермен...

Шулай булғас, нисек яҙышмайһың был гәзиткә. Бына һеҙ "Яҙғандарығыҙ нәмәнелер үҙгәртеренә ышанаһығыҙмы?" тип һорайһығыҙ. Ҡатмарлы һорау. Ышанамдыр, өмөтләнәмдер. Иҫемдә, Мәскәүҙә йәшәүсе әхирәтем тормошоноң ауыр, ҡатмарлы саҡтарында: "Һин миңә хаттарыңды йышыраҡ яҙ, хатта минең яуап хаты килмәгән мәлдәрҙә лә яҙ. Һинең хаттарың минең күңелемде күтәрә, артабан йәшәргә көс бирә", - тип яҙа ине. Был донъянан үтте ул, тик рәхмәт һүҙҙәрен әйтеп үтте. Һәйбәт һәм кәрәк һүҙҙәр, хаттар, мә-

еңел табышты еңел табып өйрәнгән. Шуғалыр ҙа, дәүләт дилбегәне бер аҙ ысҡындырыу менән урлау, талау, коррупция һәм башҡа социаль эҙемтәләр илде солғап алды. Тик закондар сығарып ҡына хәлде яҡшыртып булмаясаҡ. Ҡанундар эшләмәйәсәк, сөнки ул ҡанундарҙы күҙ буяу өсөн алға һөргән шул уҡ ҡулдар уның эшләмәүен дә тәьмин итәсәк. Ә шулай ҙа ҡулды һәләндерергә ярамай, яҙа белгәндәр - яҙып, башҡа алымдарын белгәндәр үҙҙәренсә донъябыҙҙы яҡшыртыуға үҙ өлөшөн индерергә тейеш.

**▸ Матди донъя бар, рухи донъя бар. Кемдер матди донъя менән генә йәшәй, ә кемгәлер, бик аҙ халыҡҡа, рухиәт ҡәҙерле. Һеҙ ошо хаҡта ни уйлайһығыҙ? Күпселектең ҡапыл ғына гәзиттәр, китаптар уҡыуҙан, театрҙарға йөрөүҙән туҡтауына нимә сәбәпсе? Рухһыҙлыҡ билдәһеме был?**

**Урал МОСТАФИН.** Китап, журнал, гәзиттәр уҡыу - аҡыллы, аңлы кешеләрҙең аралашыу сараһы. Аңһыҙҙарҙың аралашыу ысулдары бөтөнләй икенсе төрлө бит, ул ғәмһеҙҙәргә ваҡыт күңелле үтһә йәки

# ЗАМАНЫБЫҘҘЫҢ АҢЫН ДАУАЛАРЛЫҠ...

## заңын дағаларлыҡ һүҙебеҙ бар

**Урал МОСТАФИН:** Йәшәгән дәүеребеҙҙәге донъяның күңелемде борсоған, аңымды албырғатҡан хикмәттәре, әкәмәттәренә вайымһыҙ ҡарап ултыра алмағандан, уларға шәхсән мөнәсәбәтемде белгертергә теләп яҙышам мин. Бөгөнгө тормошта, бөгөнгө көндә донъяның ниндәй булыуы минән дә тора бит, был донъя хәлдәренә минең дә ҡыҫылышым бар: алама күренештәрендә мин дә ғәйепле, яҡшыларына мин дә шатланырға, ғорурланырға хаҡлымын. Әгәр бөтәһенә лә битараф булһаң, үҙ дәүереңдең тормошо эргәңдән елпелдәп кенә үтер ҙә китер. Ә был бик үкенесле хәл! Әлбиттә, быға тиклем дә, минән башҡалар ҙа, хатта был тарафтарҙа бөйөклөк яулаған уҡымышлы әһелдәр ҙә, үҙҙәренең йәшәгән дәүере тураһында ентекләп яҙған, яҡшылыҡты баһалап, яманлыҡты фашлап бихисап китаптар баҫтырып сығарған. Бик күп аҡыл, фәһем, әҙәп орлоҡтары сәселгән. Ә тормош үҙенсә аҡҡан да аҡҡан. Бер кем дә уның ағышын үҙе теләгән яҡҡа бора алмаған. Хатта беҙҙең замандың бер арҙаҡлы яҙыусыһы: "Миңә тиклем аҡыллы һүҙҙәр яҙғандар, мин яҙҙым, ләкин кешелек бер ҙә яҡшы яҡҡа үҙгәрмәне", - тигәнде ишеттем яңыраҡ. Уның был пессимистик фаразы менән ризалаша алмайым! Бәлки, орлоҡтарҙың бәғзеһе ҡыҫыр ергә лә төшәлер, бәлки ваҡытында һыу һибелмәй, сүп-сарҙан баҫылып, шытып та сыҡмайҙыр, ҡорошҡостарҙан ҡурсаланмай, әрәм дә булалыр. Бәлки! Әммә бөтә орлоҡтар ҙа шытыуға, үҫеүгә, емеш биреүгә һәләтһеҙ тип юрау - төптән дөрөҫ түгел! Сөнки, шул сәселгән аҡыл, фәһем емештәрен тиреп, йәненә түҙемлек, аңына өмөт,

күҙҙе сығара яҙып төртә. Уларҙы күрмәйем тиһәң дә, күрмәй хәлең юҡ! Ҡорбандарын эҙләп сабып йөрөйҙәр, килешкән, бирешкәндәрҙе ялмап-талап, ҡомһоҙ боғаҙҙарына тығалар. Бөтә донъяла улар өҫтөнлөк иткәндән түгел, фәҡәт шул үҙҙәренең бит йыртып, күңелгә инеүҙәре менән генә көслөләр. Ә, асылда иһә, беҙҙең тирәлә игелеклек менән итәғәтлек күберәк. Әгәр шулай булмаһа, яманлыҡта ғына йәшәгән кешелек күптән үҙен-үҙе юҡ итер ине. Яманлыҡ көслө, тип бөтәбеҙ ҙә уға бағынып йә ҡул ҡаушырып ултырайыҡмы инде? Юҡ! Донъяға битараф булмаған кешеләр барҙа, яманлыҡ яҡшылыҡты бер ваҡытта ла еңә алмаҫ! Мин шуға ышанам! Шуның өсөн дә уйлаған, белгәндәремде кешеләргә еткерергә: кемделер насар аҙымдан иҫкәртергә, кемделер өмөтләндерергә, кемделер яҡшылыҡҡа өндәүҙән ҡурҡмайым. Яҙылған, әйтелгән яҡшы һүҙҙәр, шул һүҙҙәргә мохтаж кешенең ҡолағына ҡасан булһа ла барыбер салына, аҡылы менән ҡапыл ҡабул итмәһә лә, барыбер аңына фәһем булып йоға һәм ҡасандыр күңелендә шытып сығып, үҙенә тәғәйен ғәмәлен үтәй. Шуға ышанмаһам, йә яҙғандарым күңелем аша үтмәгән буш һүҙ, тип уйлаһам, кеше башын ҡатырып, ваҡытын әрәм иттереп,

ләнгән эш файҙаһыҙ булмай! Яҡты уйҙа, изге теләктә киләсәккә ышаныс менән йәшәгән кеше яңғыҙ түгел! Беҙ күмәкбеҙ! Беҙ берҙәм, беҙ дәртле, беҙ өмөтлө булһаҡ, донъябыҙҙы аңһыҙлыҡ бер ваҡытта ла баҫып ала алмаясаҡ, тигән ышанысымды бөтә күңел көсөм менән еткерергә тырышам уҡыусыларыма. Яҙышайыҡ, аралашайыҡ ҡәрҙәштәр!

Донъяларҙан төшөп ҡалған
Әҙәм түгел, ташҡа яҙған,
Илһам уты ҡосағында
Үҙе сыраҡ булып янған...

**Фәүзиә ЯХИНА:** Мәктәптә уҡып йөрөгәндә үк башҡорт теле, әҙәбиәте дәрестәрен яраттым. Быға уҡытыусыбыҙ Зайлалова апайҙың дәрестәре, әҫәрҙәрҙе оҫта, һоҡландырырлыҡ итеп уҡып күрһәтеүе сәбәп булғандыр. Туған телемдең гүзәллеген аңлап, уға һоҡланыу хисе күңелемдең иң тәрән төпкөлөнә уйылды. Һуңынан сит ҡалала уҡып йөрөгән йылдарҙа телемде, илемде һағыныу ошо һөйөү хисен тағы ла көсәйтте. Илемдән ситтә йәшәһәм дә, Башҡортостанда баҫылып сыҡҡан гәзит-журналдарға яҙылып, уларҙы уҡып йәшәнем. Ә инде "Киске Өфө" гәзите ойошторолғас, үҙ фекеремде хаттар аша еткерә башланым. Гәзитебеҙҙе уҡып барыу - бер, иң мөһиме, фекер алышыу. Гәзитебеҙҙе уҡып барған һабаҡташтарым, таныштарым менән һөйләшеп алам

ҡәләләр менән тормошто үҙгәртеп була, тип әйтеүгә ишара был миҫал.

**Спартак ИЛЬЯСОВ:** Мәҡәләләр яҙғанда мин үҙ рухымда булғандар менән уртаҡлашам. Йәғни, шағир әйтмешләй: "Мин халҡымдың сәскә күңеленән бал ҡортондай ынйы йыямын. Йыямын да йәнле ынйыларҙан хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын..." Тағы ла анығыраҡ әйткәндә, әлегә рәсми тарихта сағылыш тапмаған, әммә үҙемә билдәле ауыҙ-тел ижадында, халыҡ хәтерендә һаҡланған тарихи осмоттарҙы халыҡтың үҙенә еткерергә тырышам. Мин үҙ халҡымдың улы, тигән һәр башҡорт үҙ еренең, иленең, халҡының ысын тарихын, шәхестәрен белергә, уларҙы өйрәнергә, бөйөклөгөн аңларға, күңелендә уға баһа бирергә бурыслы. Сөнки үҙ тарихының асылын белгән кеше үҙенең дә кем икәнлеген, халҡының бөйөк героик үткәнен төшөнөр. Ул ваҡытта еренә, иленә хужа булыу тойғоһо артыр.

Рәсәйҙә тормоштоң яҡшы яҡҡа тиҙ генә үҙгәреренә ышанмайым. Сөнки бөгөнгө тормошто үҙгәртер өсөн глобаль иҡтисади мәсьәләләрҙе башҡаса нигеҙләргә кәрәк, тигән фекерҙәмен. Рәсәй Америка түгел, йәки Америкаса уйлаған Европа ла түгел. Рәсәйҙең менталитеты башҡа. Улар

үҙ ихтыяждарын ғына ҡәнәғәтләндереүгә сарыф ителһә, булды. Уларҙы имәнесле тормош күренештәре, хәүефле донъя хәлдәре лә бик үк борсомай. Беҙ ни тиклем хәбәрҙар булһаҡ, ни тиклем бер-беребеҙгә итәғәтле булһаҡ, таяныс булһаҡ, илебеҙҙе, телебеҙҙе, мөхитебеҙҙе лә именлектә, игелектә һаҡлай алырбыҙ. "Яҡшы һөйләгәндә кәңәш булыр, яман һөйләгәндә талаш сығыр", тип халҡыбыҙ дөрөҫ әйтә. Бер-беребеҙгә күберәк яҡшы хәбәр һөйләйек, яҡшы теләктәр теләйек, туғандар. Яҡшылыҡ яҡшылыҡтан ғына тыуа! Насар булыр өсөн "бисмилла" кәрәкмәй бит.

Хәҙер радио, телевидение, матбуғат баҫмаларының күптәре үтә ҡурҡыныс йә үтә сағыу материалдар менән эш күрһәтергә ярата, йәиһә буш ҡына хәбәрҙән дә шау-шоу эшләп, сенсация әтмәләп маташалар. Шул арҡала ысын, ҙур әһәмиәткә, дөйөм иғтибарға лайыҡлы ғәмәл, хәлдәрҙе күрмәмешкә һылтаналар. Борон уҡ Заратустра исемле донъяға танылған аҡыл эйәһенең: "Ысын тормош яңы шау-шоуҙар тыуған ерҙә түгел, яңы рухи ҡиммәттәр тыуҙырылған ерҙә әйләнә, һәм ул тауыш-тынһыҙ ғына әйләнә" - тигән аҡыллы фекерен китап, гәзитте ҡулына алып та ҡарамаған бахырҙар ҡайҙан ғына белә алһын инде. Күп баҫмалар, тормош сенсацияларҙан, шау-шоуҙарҙан ғына тора, тигән уйҙы алға һөрөп, белем, ғилем, тәрбиә, ижад, аҡыл һәм физик эштәрҙә фиҙәкәр хеҙ-

**✓ Башҡа бер нәмәгә лә ыжламаған иң уҫал, яһил, талапсандарҙың да ҡаты күңелен араҡы йомшартыуын һиҙҙе. Бер өҫтәл артында ултырып һыйланһаң, күп сетерекле мәсьәләләрҙе ыңғай хәл итеп була икән.**




Батыр менән бер нисә эшсеһе элегерәк эшкә яраҡһыҙ тип сығарып ташланған рамды ат һарайына һөйрәп индереп, кәрәк-яраҡтарын хәйерселәп йүнләп, яйлап, ямап таштан ҡоролған нигеҙгә нығытып ултырттылар. Кәрәк запас өлөштәрен эҙләп бер нисә тапҡыр тирә-йүндә сабып әйләнделәр, әллә нимәләрен бирергә вәғәҙә итеп тә, теләнселәп тә барыһын да таптылар. Үҙ әрһеҙлектәре менән таҡта бысыу ҡоролмаһын, ҡырлау, йышыу станогын эшләтеп ебәреүгә өлгәштеләр. Киләһе уңышлы эштәренең килеменә ышанып трактор, машина яллап ағас сығарҙылар. Бысып, һатып тәүге аҡса алыуҙарына ҡыуандылар. Ҡыуаныстары ғына оҙаҡҡа булманы. Быға тиклем эш башлап ебәреүгә шарттар тыуҙырыуға һүҙ ярҙамы ла күрһәтмәй эштәрен ситтән генә күҙәтеп ултырғын үҙәк идаралыҡ етәкселәре етештергән материалдарҙы үҙ белдеге менән теләһә кемгә һата башланы. Кем етте, шул конторҙан "генерал" директорҙың фарманын тотоп килә лә тауар давайлай. Бирмәһәң, ҡағыҙын баш осонда болғап тороп, янай башлай. Хәл юҡ, аҡсаһын үҙәк конторға түләгәс, ебәрергә тура килә. Тәүҙәрәк, ярай, унда түләгәстәре беҙгә эш хаҡын бирерҙәр, тип ышандылар. Ышаныстары аҡланманы: таҡта, транса, бура китә торҙо, ә эшселәргә һуҡыр бер тин тәтемәне. Бурыстарға муйындан батып бөтөп, тағы туҡтанылар.

Аптыранып йөрөй торғас, тағы бер ынтылып ҡарарға булдылар. Был юлы, аҡсаға һатыуҙың бер файҙаһын да күрә алмаясаҡтарын белеп, "бартер"ға эшләргә килештеләр. Эйе, эштәре һәйбәт китте. Һатып алыусылар ағасты, материалды он, шәкәр, иген, ем, кейем-һалымға алыштырып алалар. Барыбер буш эшләү түгел бит инде. Үҙ конторҙарында бәләкәй генә магазин асып, артығын ауыл халҡына һатыу ойоштorҙолар. Ҡулаҡса ла килде. Үҙәк конторҙың "әүҙем" етәкселәре был башбаштаҡлыҡта дәүләткә ҡаршы енәйәтселек күреп, бер өйөр тикшереүселәр ебәрҙе. Иҫәп-хисапҡа, ағас эшкәртеү цехына, складҡа, магазинға мисәтле ҡағыҙ йәбештерҙеләр. Әҙер материалдар, тауарҙар әсирлеккә алынды. Йәмғиәт эше туҡтаны. Енәйәт эше асылды, бер-бер артлы тәфтишсегә йөрөнөләр. Ыңғайыраҡтар шаһиткә, тиҫкәрерәктәр енәйәтсегә әйләнде. Бер йыл буйы барған тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә бөтә ышаныс, дәрт, өмөттәрен һүндереп, башҡа ҡыл да ҡыбырҙатмаҫлыҡ биҙҙереп, өркөтөп, ҡурҡытып, "эш"те яптылар. Үҙ йүнебеҙҙе күрәбеҙ тип тырышҡан егеттәр башҡа эш башламаҫлыҡ һабаҡ алдылар.

Бартерҙың бер алама яғы ла асылды. Унда тормош кәрәк-яраҡтары менән бергә араҡы ла ташынылар. Тәүҙәрәк йәшенеңкерәп алыш-биреш эшләһәләр, тора-бара ғәҙәти күренешкә әйләнде. Ниңә, хужалыҡта ул да кәрәк нәмә! Туй үткәреүселәр була, ҡунаҡ йыйыуҙы ла бер кем тыймаған, өмәләрҙә, башҡа берәй күмәкләп эшләгән эшкә, утын, бесән алырға ла кәрәк нәмә. Батыр, араҡы йүнлегә килтермәҫен белеп һипһенһә лә, ниңәлер тәүҙән үк ҡәтғи тыйманы. Шул шайтан әсеһе егеттәрҙе яйлап боҙҙо. Элек тә таҡта тейәшеүселәр эш хаҡына алған араҡыларын эштән һуң йәшеренбоҫорон эскәндәре һиҙелде. Батыр унынһын да белде, ләкин эш урынында, эш ваҡытында шаярғандарға ҡаты булһа ла, эштән һуң булышҡандарына әллә ни өндәшмәне. Эскән кешене түгел, араҡының еҫен һөймәгәнен белеп, унан һаҡландылар: күренмәҫкә, һиҙҙермәҫкә тырыштылар. Ҡырҡ ата балаһының холҡо ла ҡырҡ төрлө, бөтәһен дә бер ҡалыпҡа һалып булмай. Ҡайһылары һаҡ ҡыланһа, ҡайһылары хыянат ҡылды, ике йөҙлө йылғырҙары хәйләкәрләнде. Кемдең кем икәнен айырып тормай, тикшереүселәрҙең битараф күңелдәрен йомшартайым, янауҙарынан эшселәрен аялайым тип, тәбиғәт ҡосағында уларға бер нисә тапҡыр һый-мәжлес ойошторорға тура килде. Шул арала араҡыға элекке дошманлығы ла кәмене. Ҡайһы бер тормош ауырлыҡтарынан йән әрнеүен баҫҡанда, төрлө ҡатмарлы осраҡтарҙы хәл иткәндә араҡының тылсымлы көсөн белде. Башҡа бер нәмәгә лә ыжламаған иң уҫал, яһил, талапсандарҙың да ҡаты күңелен араҡы йомшартыуын һиҙҙе. Бер өҫтәл артында ултырып һыйланһаң, күп сетерекле мәсьәләләрҙе "әшнәләрсә" ыңғай хәл итеп була икән. Закон да боҙолмай, талаптар ҙа йомшара, маҡсаттар үтәмәҫлек ҡатмарлы күренмәй, бурыстар күтәрмәҫлек йөк булып елкәне баҫмай. Тәүҙәрәк, мәжлестәрҙән һуң, кеше күреп ҡалмаһын тип, ҡаса-боҫа ҡайтты. Әсәһе, бисәһе, балаларынан уңайһыҙланды, улар йоҡларға ятып бөткәс ҡайтырға тырышты йә, арыған кешегә һылтанып, тамағына ла ашамай йоҡларға ятты. Әсәһе лә, бисәһе лә һиҙҙеләр, әлбиттә, ләкин ниндәй нахаҡ эштән эшселәрен, үҙен ҡурсалау әмәлен эҙләп өҙгөләнеп йөрөүен белеп, ризаһыҙлыҡтарын ҡысҡырып әйтмәнеләр, ғауға ҡуптарманылар. Үҙе лә яҡындарынан оялғанын, уңайһыҙланғанын күргәс, ярай, ваҡытлыса ғына шул хәлгә тарығандыр, хәлдәре йүнләнһә, был сараһыҙҙан йоҡторған алама ғәҙәтен ташлар, тип өмөтләнделәр. Барыбер, күпме йәшермәһендәр, тора-бара өйҙәгеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәре үҙгәрҙе. Элекке кеүек аңлашып, һәйбәт йәшәй башларбыҙ, тигән ышаныстары көндән-көн һүрелде. Бер нәмә лә ҡапыл ғына элекке хәленә ҡайтмай шул. Бәләкәй генә ямғыр күләүегенә яҙа тайып ҡолап бысраҡҡан кейемде лә нисек кенә матур итеп йыуып, үтекләп кеймә, барыбер элекке кеүек саф, таҙа булмай инде. Сөнки шул кейем кейгән һайын бысраҡҡа ҡолағаныңды иҫеңә төшөрәсәк.

* * *

Етмеш йәше менән барған атаһының вафатынан һуң саҡ теремекләнеп йөҙө асылып килә ине, был көтмәгәндә йоҡҡан ауырыуы йонсоған йәнен өҙгөләй, теткеләй башланы. Тик, донъяның ниндәйҙер яҙылмаған яуыз ҡанундары буйынса, бәлә-ҡаза яңғыҙы йөрөмәй шул. Сираттағыһы Батырҙы йыға һуғырҙай ҡайғы булды. Аҡыллы, әҙәпле, ипле әҙәм балаһына ниндәй гонаһтары өсөн был бөтмәҫ һынауҙар тип, хатта ят кешеләр ҙә хайран ҡалды. Ошоға тиклем иркәләтеп кенә үҫтергән тәүге улдары Айҙарҙы һаҡлап ҡала алманылар. Батыр менән Гүзәл балалары тыуыуын, теле асылыуын шикләнеү, өмөтләнеүҙә түҙемһеҙлек менән көттөләр. Әсәһенең һөйләшеү етешһеҙлеге балаһына күсеп ҡуйыуынан ҡурҡтылар. Балалары ике йәшендә һөйләшмәне, өс йәше тулғас та теле асылманы. Табибтарға алып йөрөнөләр. Улары: "Ҡайһы баланың теле биш йәшендә саҡ асыла" - тип, ата-әсәнең борсолоуына иҫтәре лә китмәй, ғәмһеҙ генә тынысландырҙылар. Аптырағас, имсе-томсоларға ла йөрөнөләр. Улары барған һайын аҡсаларын ҡайырып алып өшкөргән, һылаған, һыйпаған булдылар. Кемдәре ярҙам иткәндер, әллә үҙ тәбиғәтенәнме, биш йәше менән барғанда, улдары тәүге һүҙҙәрен аңлайышлы әйтә башланы. Һөйләшеүендәге һиҙелерлек кәмселегенән балалар көлөр тип баҡсаға ла йөрөтмәнеләр. Мәктәпкә уҡырға барғанында һөйләшеүе үҙ тиҫтерҙәренән айырылмай ҙа ине, тик, ҡайһы берҙә ниңәлер әҙерәк һуҙыңҡырап, һығылыңҡырап һөйләште. Сәбәбен белә алманылар. Һин дә мин шарылдап һөйләшеп йөрөй ҙә ҡапыл боғаҙына баҫҡан кеүек һығылып китә. Шул мәлдәрҙә ҡороҡтан ысҡынырға тырышҡан кеүек үңәсен уңға-һулға борғоларға ғәҙәтләнде. Мәктәпкә барғанда уҡый-яҙа ла белә ине инде, өйҙә тырыштылар. Өлгәшендә тиңдәштәренән ҡалышманы, уның ҡайһы берҙә өнһөҙ ҡалыуына иптәштәре тиҙ арала өйрәнеп, иғтибар итмәнеләр, ҡыйырһытыусылары булманы кеүек. Өсөнсө класты яҡшы билдәләренә генә тамамлағас, йәйге лагерға мәктәптән бушлай юллама бирҙеләр. Балалары ят ерҙә, ят кеше араһында өйрәнеп китә алмай йә ҡаушап, тотлоғоуынан уңайһыҙ хәлгә ҡалып ҡуйыр, тип, ата-әсәһе ҡаршы килһәләр ҙә, үҙе барам да барам тип ҡырталашып йөрөгәс, теләмәй генә ризалаштылар. Барыбер, ҡасан булһа ла кеше араһына сығырға кәрәк, һаман да үҙ ҡабырсағында йәшәй алмаҫ инде, тип йыуаттылар үҙҙәрен. Аяуһыҙ замананың ҡаты бәғерле балалары үҙ тиҫтерҙәрен дә аямай. Әҙерәк тотлоғоуын һиҙеп ҡалғас та "баҡа" тигән исем таҡҡандар. Намыҫлы ауыл балаһы был ғәҙелһеҙлектән ғәрләнә, иптәштәренән ситләшер, өндәшмәҫ була. Бер көн һыу төшөргә барғанда ҡыҙҙар шаярып күлдәген һыуға ташлайҙар.

- Һин бит баҡа, бар йөҙөп барып ал ҡабығыңды...

Үҙҙәре рәхәтләнеп көлөшәләр. Айҙар нишләргә белмәй аптыранып торған арала ел күлдәген тәрәнгәрәк йөҙҙөрә. Сәмләнгән малай, яр ситенән һыуҙы кисеп йүгереп бара ла, еүешләнеп бата башлаған күлдәген эләктерәм тип, артынан сума. Тәрәнлеге үңәскә лә етмәгән һай ерҙә әллә шул ашығып сумғанда һыу йотоп тонсоғамы, ашҡынып ынтылғанда тын алып өлгөрмәй сәсәйме, әллә аяғөҫтө тороп баҫам тиһә, аяҡтары һыу төбөнә буйламаһа, ҡурҡышынан тын юлына һыу китәме? Кем генә белһен. Һыуҙан башы күренмәгәс, ҡыҙыҡ күреп ҡарап торған балалар тырым-тырағай ҡасып бөтә. Шул тирәлә һыу төшөп йөрөгән өлкәндәрҙеңме, балаларҙыңмы берәһе булһа ла ҡулын һонһа, тартыр ҙа сығарыр ине. Юҡ, ҡул һонорлоҡ кеше табылмаған, үкенескә күрә. Аҙаҡтан һыу төбөн тикшереүселәр әйтеүе буйынса, шул тәңгәлдә тас ултыртырлыҡ ҡына сөмбөл урын булған. Ул соҡорҙо балалар уйнап ҡаҙғанмы, тулҡын ҡомон йыуып шылдырғанмы әллә башҡа берәй ғәжәп көс булдырғанмы, бер кем аңламаны. Был фажиғәле хәл бөтә ауыл халҡын ҡайғыға һала: йәш саҡтарынан уҡ шаҡтай ауырлыҡтар кисереп, яңы саҡ әҙәмсә йәшәй башлаған Батыр менән Гүзәлде йәлләп, ҡайғыларын уртаҡлашып илашалар, ниндәй һүҙҙәр табып йыуатырға белмәй ыҙалайҙар. Күмәк кеше менән ҡайғыны уртаҡ күтәреүе еңелерәк тиһәләр ҙә, мәрхүм баланың ата-әсәһе күҙгә күренеп һуйылып төшә. Бигерәк тә Батырҙың сикәләре батып, кәүҙәгә бәләкәсәйеп, күҙҙәре һүнгән кеүек йөрөүен күреүе ауылдаштарына ауыр ине.

* * *

Әллә ниндәй шомло тауышҡа һиҫкәнеп уянды Иван Иванович. Әллә йоҡоһо шулай һай ғына булдымы? Алыҫтан самолет осоп үтһә, тауышы гөрөлдәп ишетелмәһә лә, һауаны йыртып һыҙғырған тауышы ҡолаҡҡа салына торғайны. Башын яҫтыҡтан күтәрә биреп, тыңлаңҡырап ятты. Юҡ, үтеп китмәй, көсәйә бирә лә, тағы юғалған һымаҡ. Был нимә икән? Төн уртаһында хәүефләнеп йоҡоң буленһә, харап, йоҡо ҡасырға әҙер тора, күңелең тиҙ генә тынысланып кире йоҡлармын тимә. Был юлы ла шулай булды. Урынынан ҡалҡыңҡырап та тыңланы, башын тегеләй-былай борғолап та, имеш, бер ҡолағы ишетмәһә, икенсеһе ишетә була инде. Ишетмәһә ярар ине: икеһе лә шул үҙенең иҫке ҡолаҡтары. Диңгеҙ шаулай тиер инең, алйып барһаң, аҡылы теүәл шикелле, һәр хәлдә кис йоҡларға ятҡанда шулай ине. Ут яндырып ҡараһа, сәғәт саҡ ике. Шаулаған тауыш, шайтандар туйындағы кеүек шыйылдарға кереште: шы-ы-ый-шы-ы-ыу, шый-ый-йыу-шыу-ыу-уыу. Ә-ә-әй, суҡынғыры, ояртылағы шыршы шыйылдай башлағас, аңлашылды: буран башлана! Көсәйә барған ел шыршы ботаҡтарын скрипка итеп уйнап ҡараны, йүнле тауыш сығара алмағас, ҡыйыҡты барабан итеп таҡылдатырға кереште: таҡ-таҡ-таҡ; ҡәнәғәт булмай, бағана араһындағы тимерсыбыҡтарҙы мандолина ҡылдары күреп сиртә башланы: дыр-дыр-дыр. Улары бер-береһенә ҡағылып, ялт та йолт килеп ут сәсә. Торбаға өрөп ҡараны: дыу-дыу-ды-у-у. Шул арала ҡәҙимге бер яңы оркестр тыуҙы. Ҡыҙыу уйнай, ҡәһәрең! Берәйһе ҡушылып сәпәкәй итәһе генә ҡалды. Ҡайһылай килештерә һуң әле, хәҙер уйнап туймайынса теңкәне ҡоротор инде. Ярты сәғәттән ул оркестр бөтәһен дә үҙ көйөнә бейетте. Шыршы тубырсыҡтары ҡыйыҡ ҡалайына туптырҙап төшә башланы, эштәр һәләк: буран ғына түгел, дауыл ҡупҡанын көт тә тор. Бына ғәжәп: апрель айында ҡыш буйына былай ҡотормаған буран! Таңға ҡәҙәр, хәҙер тағы ҡайҙа, ниндәй яңы тауыш сығара инде тип, ҡолаҡтары ҡарпайып, тыңлап тик ятты. Ҡасан йоҡлап киткәндер, уянғанында, дауыл көсәнә-көсәнә, өйҙө урынынан йолҡоп алам тип, һелкетә ине. Ынтылып, яртылаш епшек ҡар һыланған тәҙрәнән тышты ҡараны. Айһа-а-ай! Ғәләмәт мәшхәр ҡупҡан икән! Дауыл оркестры көйөнә ҡар-буран ҡойондары бейешеп йөрөй. Ана, береһе текә баҫып, лизгинканы башҡара. Икенсеһе иңкәйеп-туңҡайып, йәйелеп, өйөрөлөп киң ыштан, күлдәк итәктәре менән тамашасы өйҙәрҙе биттәренән, йөҙҙәренән һыйпап, эргә-тирәләрендә борғаланып, өҫтәренә менә яҙып, әллә гопакка, әллә краковякка төшөргә саҡыра. Береһе барыняға төштө, буғай: һәлмәк кенә килеп сығып, ап-аҡ мамыҡ шәлдәренә төрөнгән ҡупшы тамашасылары алдындағы майҙанды вис яулап алды. Яңғыҙ ҙа, парлап та, күмәкләп тә дыу теттерәләр. Хәтә-ә-әр, шәп килеп сыға, шайтан алғыры! Байыҡты, казачокты, цыганочканы ла еп-еңел еппәрәләр генә! Концерт шәп! Дауыл бөтәһен дә үҙ көйөнә бейетергә уйлай шикелле. Дәртенә ҡарағанда, бейетмәҫ, тимә! Радиолағы халтура түгел инде: ҡолаҡтарҙы, йәнде ялҡытып, көн дә бер көйҙө әйләндерәләр. Миҙгеленә тура килһә, бер хәл, күрәләтә, йәйге селләлә көр тауыш менән "Иртә буран, кис тә буран", - тип һалдыралар, ҡыш буран ҡоторғанда "Сейәләрем сәскә

атҡанда", - тип мыйылдайҙар бит әле. Мыжыҡ инде әҙәм балаһы, мыжыҡ. Бөтәһе лә һинең генә кәйефеңә, һинең кисерештәреңә тап килеп торһа, ҡана һуң. Гел генә һин теләгәнсә булмай шул тормошта, Алланың ҡашҡа тәкәһе лә түгелһеңдер әле. Ана, иҫтәреңә төшөрҙөмө ни, тағы ла:

...Ярһып, ярһып, өйөрөлөп ҡойон уйнай, ҡойон,
Ҡалһаң ҡойон уртаһында, ҡыйын икән, ҡыйын...

Уйнай шул, уйнай. Тәбиғәтте яңыртҡан, күңелдәрҙе ярһытҡан дауыл, буран, ҡойондар уйнап ҡына тора. Уйнау ғына түгел, үҙ көйҙәренә хәтәр бейетә. Иван Иванович, урамдағы дауыл күренештәре әҙәм балаһының ғүмерендә кисергән ваҡиғалар менән ниндәй оҡшаш булыуын яңы аңлаған кеше кеүек, тәҙрә аша аптырап ҡарап торҙо: тәбиғәттең дауылдары, бурандары, ҡойондары хас әҙәм балаһының тормошо.

Эйе, донъялар үҙгәреүсән. Эйе, яҙмышы һынай әҙәм балаһын. Эйе, бәлә-ҡаза әҙәм башынан йөрөй, бер кемде лә аяламай. Ләкин хәҙерге ҡаршылыҡ, ҡыйынлыҡтарҙы һуғыш мәлендәге ауырлыҡтар менән сағыштырып ҡараһаң, иҫ китерлек һығымта яһарға була. Әҙәм балаһы шул арала ваҡланды. Күҙгә күренеп, нıҡ ваҡланды. Донъя бер ваҡытта ла ябай булмаған, тормош һынауҙарын ата-бабаларға ла ҡушҡуллап һоғондороп ҡына торған, яҙмышын кеше үҙе яҙа, яҙмышына кеше үҙе хужа. Шулай булғас, бөтә ғәйеп үҙен шул хәлгә ҡалдырыусы әҙәм балаһында булмай, кемдә булһын? Электән таныш кеше булмаһа, бер хәл, ошо йәшенә тәртибе, холҡо, аҡылы, эшлеклеге менән ауылдаштарының ихтирамын яулаған, ауырлыҡтарҙы еңеп, матур ғаилә ҡорған, типһә, тимер өҙәрлек ир хәйерсе кеүек мөстәнләнеп һоранып йөрөһөн әле? Йәнең көйөрмө, юҡмы? Бер булдыҡһыҙы булһа, бер хәл, ауылдаштары күҙ терәп торған хужалыҡтың етәксеһе, балаларына, ейәндәренә үрнәк итеп күрһәткән ышанысл кеше ине бит. Ул шулай ҡойолоп төшкәс, башҡаларға ни ҡала? Бөтә йәнең-тәнең менән ышанып та шул ышанысың селпәрәмә килеүе асыуыңды ҡабартмаҫмы? Ары ла шул юлды ҡыуырмы, ҡайһылайтып туҡтатыр әмәлен табырға? Ул кеше ҡылғандары өсөн башҡа ғәйебе бар кешенән дә ҡатыраҡ яҙаһын алырға тейеш, сөнки ул күптәрҙең ғәҙеллеккә, әҙәплеккә, әрһеҙлеккә ышанысын үлтерә, тырышҡанда әҙәмсә йәшәп булыуына өмөттәрен һүндерә, йәненең мөсһөҙлөгө менән бөтә әҙәм затын мәсхәрә итә. Ул хәтлем түбәнлеккә төшөр сәбәптәр ҙә донъяуи афәттәрҙән түгел бит. Әлбиттә, һуңғы ике йылда Батырҙың үҙенә, ғаиләһенә лә еңел булманы. Илде баҫып алған донъя буталыштарын күреп, үҙенең кәмһетелгән быуыны өсөн ғәрләнеп, инаныстары ҡыйрауына ҡайғырып, кешеләрҙең ғәмһеҙлегенә хайран ҡалып, үҙенең көсһөҙлөгөнә көйөп, ғүмерендә донъя рәхәттәрендә иркәләп йәшәргә лә өлгөрмәй, атаһы вафат булды. Күп тә үтмәй өлкән улдарының вафаты бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡайғыға һалды. Эшендә, бинаһаҡҡа, ришүәт биреүҙә ғәйепләп, яһил эҙәрләүҙәре лә эҙһеҙ үтмәгәндер. Аяныслы хәлдәр инде, һүҙ ҙә юҡ! Ләкин ғүмерҙә тыуыу ҙа үлем дә бар, фажиғәле хәлдәр ҙә булып торғолай. Әҙәммен тигән әҙәм балаһы үҙендә көс-иҙиһат табып, нисектер ғәзиз башына төшкән ауырлыҡтарҙы лайыҡлы күтәрә бит...

* * *

Батыр менән Гүзәл өлкән улдарын фажиғәле юғалтыуҙа үҙҙәрен генә ғәйепләне. Һылыу, мөләйем Гүзәл күҙгә күренеп һүрелде. Айҙары баттыы, ҡояштары ҡалҡманы. Ҡайғы өҫтөнә ҡаза тигәндәй, иренең кешелектән сығып барыуынан бөтөнләй ҡойолоп төштө, ҡапыл ҡартайып киткәндәй булды. Башҡа бәләләргә башын эймәй, йәнендә көрәшер көс тапҡан ире балаһының вафатынан һуң хурлыҡ соҡорона тәгәрәне. Батыр тәүҙәрәк кешенән йәшенеп эсте, эсһә, кеше күҙенә артыҡ күренмәҫкә тырышты. Ояты тотҡандыр. Һуңғараҡ эскән килеш һирәк-мирәк урам буйына ла сыҡҡыланы. Ҡайҙа барһа ла, кемгә инһә лә, уны йәлләгәндәрен ишетте. Йәлләүҙәрен ҡысҡырып әйтмәһәләр, тормошҡа, яҙмышына зарланып йәлләтте үҙен. Ҡайһы берәүҙәр йылы һүҙ, өгөт-нәсихәт менән дәртләндерһә, ҡайһылары рюмка һондо, ҡайғыһын "бүлеште". Бер йыл тирәһе Батыр иң яҡын күршеләренә күренергә, инергә оялып йөрөнө. Урамда осрашһалар, ашыҡ-бошоҡ һаулыҡ һорашып тиҙерәк ҡасыу яғын ҡараны, өйгә инһәләр, сәбәбен тапҡан булып сығып китте. Зары менән башҡаларҙы ялҡытып бөткәнгәме, икенсе сәбәптәнмелер, ул оят кәртәһен дә ашаҡланы. Иван ағаһы өйҙә юҡты һағалап тороп, Аня апайына меҫкенләнеп теләнселәнергә ғәҙәтләнде. Тәүҙәрәк әйткән һылтауы - ауырый, башҡа кешенән һоранырға ояла, йәнәһе! Даны таралғанын үҙе лә белмәйҙер йә белмәмешкә һалышалыр, ярай, исем һатып эҙләнеп йөрөмәһен, тигән булып йәлләп, Аня апайы бер нисә тапҡыр башын "йүнәлтеп" сығарҙы. Нисек йәлләмәһен аҙып-туҙып йөрөгән бер елғыуар булһа бер хәл, улы менән бергә күҙ алдында үҫкән, әҙәпле, аҡыллы бала ине бит. Ингән һайын теләнсе үҙен ҡыйыуыраҡ тота, хатта араҡы талап итә башланы. Һуңғараҡ Иван ағаһы өйҙә саҡта ла тартынмай инеп һорарға өйрәнде...

* * *

Кәмселеген Гүзәле менән бергә кисергән, бергә ыҙалаған, һүҙҙәрҙең ҡәҙерен, тел зәғифлегенең ғәрлеген башҡаларҙан да яҡшыраҡ белгән кеше, бөгөн үҙенең әсә телен һатып ултыра. Ғибрәт! Бер Батырға ғына килгән ҡайғы түгел. Ләкин ул был һынауҙарҙан бөгөлөп төштө. Ҡолап ҡына ҡуймаһа ярар ине. Иван Ивановичтың мейеһен ошо хәтәр уйҙар суҡыны көн һайын. Ниндәй юлын, ниндәй әмәлен, ниндәй һүҙҙәр табырға? Яҡшы кеше әрәм була бит! Был ғәҙелһеҙлеккә нисек түҙеп, вайымһыҙ ҡарап ултырмаҡ кәрәк? Ошо һорауҙар иртәнән-кискә йәнен иҙҙе, яуап таба алмай һеңгәҙәүҙәренән һиңмайға әйләнә инде. Тормошҡа ла, Батырға ла, үҙенең белдекһеҙлегенә лә йәне көйҙө. Хәҙер һүҙ менән генә ғәрләндерерлек түгелдер. Ғәрләндереп кенә еңеп булырмы уны? Ҡағыҙға имзаһын ҡуйҙырып тороп, көн дә күҙенә төртөп көлөп тороуға оялырмы, исмаһам, ҡылғанына әһәмиәт бирерме? Иван үҙе был башлаған "этлеген" оҙаҡ дауам итә алырмы? Кеше белеп ҡалһа, ояты ни тора? Ҡайҙа сараһы? Нимә булһа ла, нимәләр күрһәң дә, ишетһәң дә, бер нәмәгә ҡарамай башлаған битһеҙлектәренең аҙағына етер кәрәк. Намыҫы, моғайын, бөтөнләй юйылмағандыр, бәлки, күңел ҡылдарын, ошолайтып тейеп, ҡуҙғыртып булһа ла уятып булыр?

Батыр күршеһе бер көн танышын эйәртеп килеп инде. Йүнле йомош менән йөрөйҙәрме, тип уйлап та өлгөрмәне, тегеләр үҙҙәре һүҙ башланы: әлеге лә баяғы ғибрәтле эште киңәйтергә килгәндәр икән. Эсеп ултырғандарында, теле сиселеп, маҡтанған Батыр. "Ниңә һин ул уңайлыҡ менән бер үҙең файҙаланырға тейешһең? Хаҡың юҡ! Әйҙә мин дә барам, килешеү төҙөшәм дә, бергә йөрөйөк", - тип элеп алған иптәше.

- Аҡылығыҙҙан бөтөнләй яҙған икәнһегеҙ, оялмайһығыҙмы әҙерәк?

- Нимә оялырға? Хәҙер баҙар заманаһы, бөтәһе лә эшҡыуар: кем ниндәй кәсеп менән шөғөлләнһә лә хаҡы бар! Беҙ һүҙ һатабыҙ, кем тыя ала?

- Уй, битһеҙҙәр! Ауыҙығыҙ нимә һөйләгәнде ҡолаҡтарығыҙ ишетәме һуң?

- Иван ағай, давай, ҡаҡшатма! Һиңә ни зыяныбыҙ тейә?

- Ә ниндәй файҙағыҙ бар? Һеҙгә кәрәкмәгән һүҙҙәрҙе мин ҡайҙа итәйем?

- Ә-ә-ә! Уныһы һинең эш. Һатып алған нәмәңде ҡайҙа ҡуйырыңды үҙең ҡайғыртаһың инде, хәл юҡ...

- Ярай, әйҙә ултыр, килешеүҙе үҙ ҡулдарың менән яҙ!

Батырҙың килешеүен күсереп яҙҙырҙы, имзаһын һалдырҙы. Өндәшмәй яҙып тик ултыра, мәлғүн, йүнле эш атҡара, тип уйлар берәү. Ҙур эш эшләгән кеше кеүек, үтә ҡәнәғәт ҡиәфәт менән күҙҙәре упайып хаҡын көтөп тора.

- Мин үҙемдекен эшләнем, давай, һин үҙ бурысыңды үтәй һал тиҙерәк... Был тиклем самаһыҙ шашыуҙы күреп, йәне көйгән Иван Иванович, әгәр иртәгә бөтә ауыл менән килһәләр ҙә, ҡарышып килешеү төҙөшәсәген белә ине. Нимә булһа ла, булыр, үҙе оятҡа ҡалһа, - ҡалыр, унан көлгәндәре өсөн үҙҙәрен дә мир алдында мәсхәрә итә ул барыбер! Ҡайһылайтып тороп талап итәләр, баҙарға утын һатырға алып килгәндәр, тип уйларһың.

Бабайы Батыр күршеһе менән шаярып ҡына булышалыр тип ышанған әбейе, был ғәләмәт хәлгә икенсе тапҡыр шаһит булғас, шартланы. Өйҙәрендә ят кешеләр бар тип тә уңайһыҙланып торманы. Баяғы туҡмас таяҡтай ризаһыҙлығы теленән генә түгел, йәненән урғылып сыҡты:

-Битһеҙҙәр! Нимә ҡыланаһығыҙ көпә көндөҙ? Былары, ярай, араҡыға мейеләре серегән, ә һин, кафыр, ҡарт ишәк, нимә ҡыланғаныңды белмәйһеңме әллә? Уй, Аллам, әҙәмдән оят!

Быуа йырылды, боҙ китте. Уҡытыусыларынан шөрләгән ирҙәр шым ғына сығып тайҙы. Хәҙер әллә күпме ваҡытҡа тыныс көндәр бөттө былай булғас: һөйләнер ҙә һуҡраныр, һуҡраныр ҙа ҡарғаныр инде әбейе. Өйҙә әүәлге татыулыҡтың еҫе лә ҡалманы. Өндәшмәй генә ултырып сәй эсәләр. Ҡыштыр-мыштыр ғына йөрөп, өй эштәрен эшләгән булалар, башҡа хужалыҡ бурыстарын үтәйҙәр.

Ошоноң менән генә бөтһә, бер хәл, уҡытыусы Хәйҙәр ҙә килде. Ғүмере инмәгәнен, хәл белешергә индем, тигән булып, алыҫтан һүҙ башланы, ә тел төбөндә икенсе мөһим хәбәре бар икәне һиҙелеп тора. Күҙҙәрен йәшереп һөйләшеп, ыҡ-мыҡ итеп ыҙалап ултырҙы ла, ахыры, туранан-тура тәҡдимен әйтте.

- Иван ағай, баш ауырта, эш хаҡы давно түләмәйҙәр, өйҙә бисә бауылдай, берәй нәмәң әсеп ултырмаймултырмай микән, тигәйнем.

- Аҡса юҡтан баш ауыртмай, ҡустым, юҡты һөйләмә.

- Юҡ, кәнишнә. Уға ауырта тимәйем.

- Аҡсаны өй беренсә йөрөп хәйерселәп йыймайҙар түгелме һуң? Эшеңдә түләмәгәстәре, берәй кәсеп менән булышырға кәрәк.

- Әй, ауылда ниндәй кәсеп булһын инде, эшкә йөрөп кенә өйрәнгәнбеҙ бит, ана, йәштәр эшҡыуарлыҡ менән булышһын, беҙгә һуң инде.

- Атаҡ-атаҡ, ҡартайҙыңдамы, пенсияға әҙерләнәһеңме ҡырҡ йәштән?

**(Дауамы бар).**

ЗАУЫҠ



## АЛҒА, РӘСӘЙ!

*Һине кемдәр яраланы?*
*Уны үҙең беләһең.*
*Әле һаман төҙәлмәйһең,*
*Алға бара белмәйһең.*

*Таянып ҡына таяҡҡа,*
*Алға барып булмай шул.*
*Әлегәсә яраларың*
*Һулҡылдатып һыҙлай шул.*

*Етте һиңә, алға атла,*
*Ситкә ырғыт таяҡты.*
*Таянып ҡына таяҡҡа*
*Нығытмайҙар аяҡты.*

*Хәлең һис тә мөшкөл түгел,*
*Алға атла, нıҡ баҫып,*
*Ялҡҡанһыңдыр, меҫкенләнеп,*
*Алға бармай, тик ятып.*

*Алға, Рәсәй!*
*Халҡың көтә.*
*Ышана, өмөт итә.*
*Үҙ халҡыңдың яҡлауына,*
*Ышанысҡа ни етә?*

## ЙӨРӘК ҠАПҠАҺЫ

*Яҙырға тип, ҡулға ҡәләм алдым,*
*Асылмаған йөрәк ҡапҡаһы.*
*Иң кәрәкле һүҙҙәр табылмаған,*
*Ҡайҙан уны эҙләп табаһы?*

*Бына бер саҡ, ҡапҡа асылды ла,*
*Күңелемдә илһам йылмайҙы.*
*Матур һүҙҙәр алға теҙелделәр,*
*Илһамланып яңы йыр яҙҙым.*

*Донъя матурлығын, Уралтауҙы*
*Бикләп буламы ни йөрәккә?*
*Иген баҫыуҙарын, урмандарҙы*
*Нисек һыйҙыраһың күкрәккә?*

*Асыҡ торһон йөрәк ҡапҡалары,*
*Оло донъя бикле тормаһын.*
*Йөрәк ҡапҡаларын асып сығып,*
*Моңло йырҙар күңел сорнаһын!*

## ОНОТА АЛМАҪ ИНДЕ

*Ҡаранйылға буйы бигерәк йәмле,*
*Аҫыл ирҙәр тыуған был ерҙә.*
*Һалҡын һыуҙарыңды эскән ирҙәр*
*Ил терәге икән был ерҙә.*

*Тулҡындарың ҡыҙҙар толомондай,*
*Көмөш тамсы икән һыуҙарың.*
*Ҡаранйылға һыуы бигерәк тәмле,*
*Һомғол һылыу икән ҡыҙҙарың.*

*Томбойоҡтар тағы йәмдәр өҫтәй*
*Шуға, әллә, яҡын күңелгә.*
*Тәмле һыуҙарыңды эскән кеше*
*Онота алмаҫ һине ғүмергә.*

## ҮҘЕМ БУЛЫП ҠАЛАМ

*Үҙем булып ҡалам, үҙгәрмәйем,*
*Үҙгәртергә күптәр теләне.*
*Намыҫыма ҡара яғырға тип*
*Хәсис йәндәр юҡҡа йөҙәне.*

*Үҙ ҡолағым менән ишеттем гел,*
*Кеше ишеткәндәр ят булды.*
*Үҙ һүҙемде әйттем - ишеттеләр,*
*Мине тыңлағандар шат булды.*

*Үҙ күҙҙәрем күрҙе күрерҙәйҙе,*
*Аша сыҡмай намыҫ сиктәрен,*
*Кеше күңелен дә күрә белдем,*
*Күрмәйенсә үттем ситтәрҙе.*

*Үҙ телемә генә инандым гел,*
*Туған телем - телдәр гүзәле.*
*Ни теләһәң, шуны әйтә алам,*
*Телде белеү - ғилем кимәле.*

*Үҙем булып ҡалам, үҙгәрмәйем,*
*Үҙгәртергә күптәр теләне.*
*Туған телем менән дуҫтар таптым,*
*Туған телем нурға биҙәне.*

**Уйылдан ШӘРИПОВ.**
**Ғафури районы Сәйетбаба ауылы.**

ИНТЕРНЕТТАН

## СПОРТ АВТОМОБИЛЕ... тестостеронды күтәрә

■ Бөйөк Британияның Милли статистика идаралығы ғалимдары билдәләүенсә, бөгөн 25 йәштән алып 29 йәшкә тиклемге ир-аттың дүрттән бер өлөшө һәм 30 йәштән 34 йәшкә тиклемге һәр унынсыһы ата-әсәһе менән йәшәй. Ғалимдар әйтеүенсә, һуңғы ун йыл эсендә был ике күрһәткес тә 10 процентҡа артҡан. Ойошманың рәсми сайтында күрһәтелгән отчетта билдәләнелеүенсә, быны сәбәптәре төрлөсә. Берәүҙәр эш урынын юғалтып, аҡса етмәй башлағас, икенселәр карьера эшләп өлгөрмәү сәбәпле атай һәм әсәй менән йәшәй. Һуң өйләнеү йәки айырылышыу ҙа төп сәбәптәрҙең береһе булып тора. Ә ата-әсәһе менән бергә йәшәүсе ҡатын-ҡыҙҙар аҙ ерәк.

■ Йылына 28 мең итальян кешеһе ялҡаулыҡтан үлә, тип белдерҙе үҙенең Апеннин ярымутрауында йәшәүселәрҙең сәләмәтлек торошо хаҡындағы отчетында һаулыҡ һаҡлау министры Маурицио Саккони. Уның фекеренсә, ир-аттарҙың ғүмер оҙайлығы 84, ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы 78,4 йәшкә етеп, сабыйҙар үлеме ҡыҫҡарһа ла, гиподинамия һәм аҙ хәрәкәтләнеү йылына 28 мең кешенең үлеменә килтерә. Баҡтиһәң, ялҡаулыҡ алдында һаулыҡ өсөн файҙалы урта дингеҙ диетаһы ла көсһөҙ икән.

■ Спорт автомобилен йөрөтөү ир-атта тестостерон бүленеп сығыуҙы әүҙемләштерә, тип белдерә Канаданың Конкордия университеты ғалимдары. Тикшереү барышында 39 йәш ир-ат Porsche 911 Carrera руле артында бер сәғәт ултырғандан һуң, 16 йыл элек сығарылған Toyota Camry-ҙың ғаилә вариантында бер сәғәт йөрөй. Тәүге автомобилде йөрөткәндә ҡандағы тестостерон кимәле байтаҡҡа күтәрелә, ә Тойота йөрөтөү был гормон бүленеүенә бер ниндәй ҙә тәьҫир яһамай.

■ Итальян психологы Роберт Стернберг өс компонентлы мөхәббәт теорияһы эшләп сығарған. Ғалим фекеренсә, мөхәббәт фәнни яҡтан нигеҙләнгән өс өлөштән: көслө теләк, тоғролоҡ, интимлыҡтан тора. Көслө теләк - енси теләккә бәйле мөхәббәттең этәргес компоненты. Тоғролоҡ - танып белеү компоненты, ул дөйөм бурыстарҙы һәм ауырлыҡтарҙы бергә бүлешергә теләүгә нигеҙләнгән. Интимлыҡ - мөхәббәттең хис-тойғоға бәйле өлөшө, күңел берлеге, икенсе яртыңды хәстәрләү һәм бергә булырға теләүгә нигеҙләнә. Стернберг фекеренсә, этәргес компонент - көслө теләк түбәнәйһә, мөхәббәт тә һүрелә башлай.

■ Бөйөк Британияның Лиде университеты психологтары асыҡ күлдәктең идеаль пропорцияларын иҫәпләп сығарған. Эксперимент барышында улар ресторан һәм төнгө клубтарҙа ир-аттың ҡатын-ҡыҙҙың күлдәгенә ҡарата реакцияһын күҙәткән. Оптималь вариант булып 40:60 пропорцияһы табылған, йәғни тәндең 40 проценты асыҡ, 60 проценты - ябыҡ. Әгәр ҙә тәндең асыҡ ҡалған өлөшө 30 проценттан аҙыраҡ булһа, ир-аттың иғтибары 2 тапҡырға, 50 процент тирәһенә етһә, унан да тиҙерәк кәмегән. Ғалимдар фекеренсә, был саҡта ир-атта "эволюцион тормоздар" уяна һәм ул аңһыҙ рәүештә ярым яланғас ҡатын-ҡыҙҙың уға ҡарата тоғролоҡ һаҡлаясағына шикләнә башлай икән.

■ Ҡыҙыл ыуылдырыҡ омега-3 май кислотаһының сығанағы, тип иҫәпләй Испанияның Альмерия университеты ғалимдары. Эксперимент барышында улар 15 төрлө балыҡ ыуылдырығының химик составын тикшергән. Омега-3 кислоталары хек, пинагор һәм лосось ыуылдырыҡтарында табылған. Ғалимдар фекеренсә, ыуылдырыҡ холестерин кимәлен түбәнәйтеп кенә ҡалмай, антиоксидант үҙенсәлектәргә лә эйә.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ТАТЫУЛАШЫҒЫҘ,

## араларҙы боҙоу динде ҡаҡшата...

**Мөхәммәт бәйғәмбәр мосолмандарҙы: "Бер-берегеҙ менән араларҙы өҙмәгеҙ, бер-берегеҙгә арҡа менән боролмағыҙ, бер-берегеҙгә нәфрәтләнеүҙән баш тартығыҙ, бер-берегеҙҙән көнләшмәгеҙ һәм ҡәрҙәштәр булығыҙ, эй Аллаһ ҡолдары!" - тип өндәгән.**



Кеше йәмғиәттән тыш йәшәй алмай. Беҙ үҙебеҙҙе йәмғиәт тормошона яраҡлаштырырға ынтылабыҙ. Әммә ундағы бәхет һәм тойғо мөхиттең ни тиклем сәләмәт булыуына бәйле. Әгәр ҙә беребеҙҙә ниндәй ҙә булһа проблема йә ҡыйынлыҡтар тыуһа, икенсебеҙ ҙә уны үҙендә тоясаҡ һәм бөтәһе менән уртаҡлашырға мәжбүр буласаҡ, ни өсөн тигәндә, йәмғиәт потенциалы - һәр беребеҙҙең ҡаҙанышы. Бәйғәмбәрҙең (салаллаһу ғәләйһи вә сәләм) был йәһәттән ошондай фекере бар: "Диндарҙар яратҡан, йәлләгән һәм шәфҡәт күрһәткән ваҡытта бер кеше кеүектәр; бер ағза ауыриһа, ауыртыныу бөтә тәнде солғап ала бит". Һәм тағы ла шулай тигән: "Диндар менән диндар бинаның таштары кеүек бер-береһенә бәйле". Аҙаҡтан Аллаһ илсеһе ҡул бармаҡтарын беркетеп, был бәйләнеште күрһәткән.

Бөгөнгө әхлаҡ нормаларын һәр кем үҙенсә аңлай һәм әхлаҡтың үҙенең шәхси ҡуҙаллауҙарына тура килгән яғын ғына һайлай. Шуға күрә лә бөгөн йәмғиәт тормошонон бөтә өлкәһендә лә зарарлы килешмәүсәнлек, кешеләрҙең бер-береһен аңламауы күҙәтелә. Диндар кешеләр бер-береһенә ярҙам итмәй: бер ҡәрҙәш уныхшы ҡәрҙәшенә көнләшә һәм, киреһенсә, уның ҡайғыларына ҡыуана.

Мосолман йәмғиәте ныҡ булырға тейеш - был турала Ҡөрьәндең күп аяттарында әйтелә. Шулай уҡ Аллаһ илсеһе шундай ҡәрҙәшлекте тәҙөү ысулдары тураһында ла әйткән. Йыш ҡына ул беҙҙең арала төрлө аңлашылмаусанлыҡтар килеп сығыу ихтималлығын иҫкәрткән. Шуға ҡарамаҫтан, мосолман килеп тыуған хәлде көсәйтергә түгел, ә Аллаһ булдырған ҡағиҙәләргә таянып, аңлашыуға килергә тырышырға тейеш. Бәйғәмбәрҙең хәзистәрендә кешеләргә үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙә тарҡалыуҙарҙан һаҡлау юлы күрһәтелгән. Ислам беҙгә үпкәләү һәм талаштын Аллаһы Тәғәлә тарафынан билдәләнгән асыҡ ваҡытын күрһәтә - өс көн. Был турала Бәйғәмбәребеҙ хәзисендә: "Мосолманға үҙенең ҡәрҙәшен өс көндән дә артыҡ ваҡытҡа ташларға рөхсәт ителмәй, ошо ваҡыт эсендә улар осрашҡанда бер-береһенән йөҙҙәрен ситкә бороррҙар, әммә был икәүҙең беренсе булып сәләм биргәне иң яҡшыһы булыр", - тиелә. Йәки тағы ла: "Үҙенең ҡәрҙәшен бер йылға ташлаусы уның ҡанын ҡойоусыға тиң булыр", - тип тә әйтелә.

Мосолмандар араһында аңлашылмаусанлыҡ килеп сыға икән - быға ҡарата Аллаһ ошондай бойороҡ ебәрә: "Мосолмандар ике төркөмгә айырылып, һуғыша башлаһа, уларҙы татыулаштырығыҙ. Береһе ғәҙелһеҙ һөжүм итһә, Аллаһ ҡушҡанса ғәмәл итә башлағанға саҡлы, шул яҡҡа ҡаршы һуғышығыҙ. Буйһонһалар, ғәҙеллек менән татыулаштырығыҙ. Һәм һәр эштә ғәҙел булығыҙ. Шик юҡ, Аллаһ ғәҙел ғәмәлдәрҙе ярата". Был аят менән Аллаһы Тәғәлә йәмғиәттә ике төркөмгә бүленгән мосолмандар араһындағы ҡаршылыҡты сисеү тәртибен һәм уларҙы дуҫлаштырыу юлын күрһәткән.

Бынан башҡа Мөхәммәт бәйғәмбәр бәхәскә ингән кешеләрҙе шулай иҫкәртә: "Дүшәмбе һәм Кесаҙна көндәре Аллаһы Тәғәләгә ҡолдарының эштәре күрһәтелер. Ҡәрҙәштәре менән араларҙы өҙәүселәрҙән башҡа тик Аллаһҡа ғына табыныусы һәр ҡолонон гонаһтары ғәфү ителер. Шул ваҡыт: "Был икәү татыулашҡансы көтөп торорғоҙ", - тигән тауыш ишетелер".

Ысынлап та, көндәлек тормошта төрлө бәхәстәр килеп сығыуы мөмкин, улар ике яҡ араһында дошманлыҡ тыуҙыра. Ҡөрьәндә әйтелә: "Изгелек менән яманлыҡ бер булмаҫ. Һин яманлыҡты изгелегең менән баҫ. Шулай итеп ғәмәл ҡылғанда, икегеҙҙең араһындағы дошманлыҡ бөтөр, һеҙ дуҫлашырһығыҙ".

Мосолмандарға шулай уҡ ғәйбәттәрҙән һәм юҡ-бар һүҙҙәрҙән - бәхәс һәм иреш-талаш сығанаҡтарынан ҡасырға кәңәш ителә. Шулай ҙа, әгәр ике йәки унан да күберәк мосолман талаша башланы икән, быны тиҙерәк туҡтатырға кәрәк. Ҡөрьәндә әйтелә: "Килешеү һәр ваҡыт хәйерлерәктер".

Күп аяттары менән Ҡөрьән беҙҙе дуҫлашырға һәм талашҡан ике яҡты килештерергә саҡыра. Быйың өсөн һәр мосолман яуаплы булырға тейеш, сөнки был уның рухи вазифаһы. Изге китапта шулай уҡ, дуҫлашыу һәм берберенде аңлау ғаиләлә үк үтәлергә тейеш - был Аллаһы Тәғәләнең нигмәтелер, тиелә. Бәйғәмбәребеҙ дошманлашыусы ике яҡты яраштырыусы булырға саҡырған һәм үҙе лә быны тайпылышһыҙ башҡарған. Бер ваҡыт Мөхәммәт (салаллаһу ғәләйһи вә сәләм) үҙенең сәхәбәләренә ошо һүҙҙәр менән өндәшкән: "Һеҙгә доғанан, ураҙанан, хәйерҙән дә хәйерлерәк нәмә тураһында әйтергәме?" Улар: "Эйе, эй Аллаһтың илсеһе", - тип яуап биргән. Шул ваҡыт Бәйғәмбәр: "Бер-берегеҙҙе татыулаштырығыҙ, юғиһә, араларҙы боҙоу динде ҡаҡшата", - тигән.

Бер хәҙистә ир менән ҡатын йәки бер-береһе менән талашҡан ике мосолманды дуҫлаштырыуҙың мөһимлеге тураһында әйтелә: "Уларҙы килештереү өсөн хатта хәйләләшеүгә барған кеше алдаҡсы булып һаналмай". Шуға күрә дуҫлаштырыр өсөн изге ниәт хуплауға лайыҡлы: "Йәшерен кәңәштәрҙән күбеһенең файҙаһы юҡ. Саҙаҡа биреү, кешеләрҙе татыулаштырыу тураһында һөйләшкәндәр былар һанына кермәй. Аллаһтың хуплауын теләп, ошо эштәрҙе башҡарған кешегә Беҙ оҙаҡламай олуғ әжер бирәсәкбеҙ".

Ҡөрьәндә дуҫлаштырыуҙың әһәмиәте нисек юғары хупланһа, шулай уҡ ҙур гонаһтар рәтенә ингән ғәйбәттәр ҙә тәрән ғәйепләнә. Аллаһ илсеһе иҫкәртә: "Ғәйбәтсе ожмахҡа инмәҫ".

Шуға күрә, Аллаһҡа һәм уның Рәсүленә буйһоноғоҙ, үҙ-ара ғауғалашмағыҙ, юҡһа, рухығыҙ төшөр һәм ҡеүәтегеҙ китер. Түҙегеҙ! Аллаһ түҙемлеләр янында.

ҺАБАҠТАР

## АҠСА ҺӘМ НАМАҘ

**Бер кеше аҡсаһын йәшереп ҡуйған да, уны ҡайҙа йәшергәнен онотҡан. Көндәр буйы шул урынды иҫләргә тырышып, әҙләп ҡаңғырған. "Миңә тик изге имамыбыҙ ғына ярҙам итә алыр, унан ярҙам һорайым әле", - тигән ҡарарға килгән ул һуңынан. Имам уға шундай кәңәш биргән: "Ҡайт та таң атҡанға тиклем намаҙ уҡы, Аллаһ йәшергән урынды күрһәтер, тип өмөтләнәм".**

Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылырға йыйынып, был кеше тәһәрәт алған һәм намаҙлығын йәйеп, намаҙ уҡый башлаған. Ярты төн дә уҙмаған, ул аҡсаны ҡайҙа һалғанын иҫенә төшөргән. Намаҙын уҡып бөткән дә, аҡсаны йәшергән урынынан алып, тыныс күңел менән йоҡларға ятҡан.

Иртәнсәк имамға килеп, шатлыҡлы хәбәрҙе еткергән: "Аллаһ һинән риза булһын - һин мине бәхетһеҙлектән ҡотҡарҙың".

Әммә имам уның шатлығын бүлешмәгән һәм былай тигән: "Намаҙыңды таң атҡансы дауам итмәүең ни тиклем үкенесле, сөнки шайтан һине намаҙҙан албырғатырға теләп, аҡса йәшергән урынды юрамал иҫеңә төшөргән. Ышан, һин Аллаһҡа шөкөрҙәр әйтеп, намаҙыңды таң атҡанға тиклем дауам итһәң, яҡшыраҡ булыр ине..."

ДОНЪЯ - ҠУЛАСА

**Коридор буйлап шәфҡәт туташы Әнисә йүгереп килә. Ҡабаланыуына, йөҙөнә ҡарағанда, тағы ла бер ауыр сирлене килтергәндәр. Табип, шәфҡәт туташының әйткәнен дә көтмәй, уға ҡаршы атланы.**

# ҮСЛЕ КЕШЕ

- Ғаяз Нурисламович... ҡаты тән йәрәхәттәре алған бер кеше... Тиҙ арала операция кәрәк, тиҙәр...

- Ҡайҙа ул?

- Әлегә ҡабул итеү бүлмәһендә... Һеҙҙе көтәләр... Әйткәндәй, пациент һеҙҙең районда, ағай... - Әнисә йүгереп китеп тә барҙы.

Табип һушһыҙ ятҡан ауырыу янына барып, танырға теләп, унын йөҙөнә эйелде. Таныны. Зиннур. Унын яҡташы, хатта ауылдашы. Улай ғына ла түгел, бергә уйнап үҫкән дуҫы, аҙаҡтан дошманы...

- Ғаяз Нурисламович, һеҙ нисек? Был кешене тик һеҙ генә үлемдән ҡотҡара алаһығыҙ, ул күп ҡан юғалтҡан. Һеҙ әҙерме? - Әнисә табипҡа һораулы ҡарашын төбәне.

- Әҙер... - Ғаяз үтә лә етди күренде.

Операция бүлмәһе коридорҙың теге яҡ осонда урынлашҡан. Ғаяз шунда юлланды. Унын ҡулында ғүмер буйы тыныс йөшәргә ирек бирмәгән кеше ғүмере.

...Ул көндә бөтә малайҙар күрше ауылдыҡылар менән футбол уйнарға йыйылды. Командала Ғаяз менән Зиннур ҙа бар ине. Ярыш үтә көсөргәнешле барҙы. Малайҙар көтөү ҡайтҡансы туп типте. Ә аҙаҡ иҫәпте теүәллэй алмай, әтәсләнеп талашырға, унан йоҙроҡ төйнәшергә тотондолар. Китте һуғыш! Күршеләр көүҙәгә лә мыҡтыраҡ, йәшкә лә олораҡ. Команда капитаны булараҡ, Ғаяз ыҙғышты туҡтатырға тырышты. Көс бит тегеләрҙә! Күп уйлап тормай, малай һуғыш ҡайнаған өйөргә оло бер ағас ботағы елгәрҙе. Ысынлап та, малайҙар шунда уҡ һиҫкәнеп ситкә һибелде. Уртала бер Зиннур ғына ҡымшанмай ята бирҙе. Баҡтиһаң, ағас тап унын муйынына тейгән. Малай елкәнен тотоп, ерҙә ыңғырашып ята. Берәү ҙә эргәһенә барырға баҙнат итмәй. Киреһенсә, берәм-һәрәм ауыл яғына тайҙылар. Бер Ғаяз ғына баҫҡан урынында ҡатып ҡалды. Ни эшләргә? Кемдер Зиннурҙың әсәһен саҡырған икән. Гөлһылыу апай тиҙ арала килеп, улының муйынын яулыҡ менән бәйләп ҡуйҙы. Үҙе кемдәлер әрләй, илай. Зиннурҙы дауаханаға алып киттеләр. Былар ҙы Ғаяз томан аша ғына хәтерләй. Ул бар гәйепте үҙенә алып, күңел төшөнкөлөгөнә бирелде... Зиннур дауаханала оҙаҡ ҡына ятты. Әллә нисәмә операция кисерһә лә, муйын тирәһе ҡыйыш булып ҡалды унын. Гөлһылыу апай күргән һайын Ғаязды әрләп, унын үҙенә лә гәриплек теләп ҡарғаны. Аңһыҙ балалар мәктәптә лә Зиннурға "Ҡыйыш муйын" тип ҡушамат таҡты. Быныһын да Гөлһылыу Ғаяздан күрҙе. Ул ҡоторҙҡан, йәнәһе. Зиннур үҙе лә дуҫын гәфү итә алманы. Ғаяз күп тапҡырҙар гәфү үтенеп маташһа ла Зиннур, киреһенсә, ярһый ғына барҙы. Тора-бара Ғаяз быны аңлап, юлын Зиннур менән киҫештермәҫкә тырышты, әммә тегеһе барыбер тынысланманы, ваҡыт үтеү менән элекке дуҫына яуызлыҡ ҡыла башланы. Портфеленә батҡаҡ тултырһынмы, дәфтәрен йыртһынмы, уҡытыусыларға ялғанлап ошаҡлашһынмы. Ғаяз түҙҙе, сөнки Зиннур алдында үҙ гәйебен тойҙо. Тик Зиннур ғына туҡтарға уйламаны, мәктәпте тамамлағас та, инде Ғаяз хеҙмәттән ҡайтҡас та, уға тыныслыҡ бирмәне. Төндә тәҙрә вата, баҡсаға мал ҡыуып индерә, бесәнен яндыра, кеше күрмәгәндә рәшәткәһен емереп китә. Ғаяз быға ла түҙҙе. Гәрипте йәлләй ине ул.

Тиҙҙән Ғаяз баш ҡалаға сығып китте. Медицина институтына уҡырға инде. Өйләнде. Ауылдан сығып киттем, Зиннурҙың этлегенән ҡотолдом, тип уйлауы юҡҡа ғына булған икән. Зиннурҙың яуызлығы бында ла килеп етте. Нахаҡ яла яғып, ғаиләһен тарҡатырға уйланы, фатирына ут төртөп маташты. Ҡатыны милицияға хәбәр итеүен һораһа ла, Ғаяз быны эшләмәне. Әлбиттә, ул да тыныс йөрәк менән йәшәмәне, башҡарған бөтә яманлығы өсөн Зиннурҙы үҙе елтерәткеһе, үҙе аҡылға ултыртҡыһы килә ине...

Бына шул Зиннур бөгөн үҙе Ғаяздың ҡулына килеп эләкте. Ниндәй хәлдә бит әле! Машина аҫтына эләккән. Яра елле генә. Ҡан күп юғалтылған. Ҡотҡарыуға әллә ни ышаныс юҡ. Ҡара әле, кәүҙәһе баһадирҙай, тәҫкә лә арыу икән дә баһа ул! Ә һаман бала һымаҡ үсләшә. Ғаяз был кешенең ҡылған яуызлыҡтарын иҫләп, уларҙың унын әлеге һөйкөмлө төҫ-ҡиәфәт менән ярашмауына аптырап ҡуйҙы. Шундай матур кеше. Сәстәрен сал баҫҡан. Үс ҡайтарыу юлынан йөрөп ағарҙы микән был сәстәр?

Операция ике сәғәт тирәһе барҙы. Унан Ғаяз бик арып, хәлһеҙләнеп килеп сыҡты. Артынан йүгереп килгән Әнисә:

- Ғаяз ағай, һеҙ бит был кешене үлем тырнағынан йолоп ҡалдығыҙ! - тип тулҡынланыуынан тыны ҡыҫыла-ҡыҫыла бышылданы.

- Мин, Әнисә, намыҫымды аҡланым был кеше алдында... - тип йылмайҙы Ғаяз. - Ә һинән һәйбәт табип сығыр ине, һылыу, кеше ғүмеренә битараф түгелһең. Артабан уҡырға тырыш, йәме...

Табиптың йонсоу йөҙөндә сағыу бер нур балҡығанын шәйләп ҡалды Әнисә. Ул нур ҡыҙыҡҡайҙың да күңеленә күсте...

**Эльвира ИСҠУЖИНА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

КИТАБЕННАС

# РИЗАИТДИН КИТАБЫ

**Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә бик йөкмәткеле, күркәм баҫма донъя күрҙе. Филология фәндәре кандидаты Миңлеғәли Нәҙерғолов XIX быуат аҙағында - XX быуат башында әүҙем ижад итеп, ифрат бай яҙма мираҫ ҡалдырған күренекле мәғрифәтсе, ғалим һәм әҙип Ризаитдин Фәхретдиновтың һайланма әҫәрҙәрен кириллицаға күсереп, текстологик эштәр башҡарған, аңлатмалар биргән.**

Ике быуат киҫешкән дәүерҙә йәшәгән Ризаитдин бине Фәхретдин әҙәби процесҡа, мәҙәни үҫешкә һиҙелерлек йоғонто яһаған шәхестәребеҙҙең береһе. Быға тиклем рухи мираҫының тейешле кимәлдә өйрәнелмәүе унын дин белгесе булыуы, Өфө Диниә назаратында эшләүе менән аңлатылырға кәрәктәр. Хәҙер иһә был арҙаҡлы шәхес менән ҡыҙыҡһыныу бермә-бер арта ғына бара. Ризаитдин Фәхретдинов үҙе лә тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлап ҡалыусы ғалим булып көүҙәләнә - егерменсе йылдар аҙағында Диниә назараты архивындағы ғилми-әҙәби һәм документаль сығанаҡтарҙың юҡҡа сығыу ҡурҡынысы килеп тыуғас, власть әһелдәренә мөрәжәғәт итергә ҡурҡмай һәм тегеләрҙе хаталы ниәттәренән дүндереүгә өлгәшә. Шулай итеп, унын фиҙаҡәрлеге менән бик күп яҙма ҡомартҡылар һаҡлап ҡалына. Килер быуындар был әһәмиәтле документтарға тейешле иғтибар бирәсәк әле. "Һайланма әҫәрҙәр"ҙең төҙөүсеһе Миңлеғәли Нәҙерғолов тәҡдим иткән яҙмалар ҡыҙыҡлы. Сөнки ул ҡомартҡыларҙың иң матур өлгөләрен тәҡдим итә. Ризаитдин Фәхретдиновтың үҙ дәүере ҡатын-ҡыҙҙары тураһында яҙғандары замандаштарыбыҙҙы ла уйландырырлыҡ. "Ирҙәрҙең һиммәте урындарынан тауҙарҙы күсерер, тиҙәр. Ләкин ҡатындарҙың һиммәте бынан да бөйөктөр. Сөнки уларҙың һиммәттәре арыҫландан ғәйрәтле ирҙәрҙе үҙҙәренең фармандары аҫтында тоторҙар. Теләһәләр, һис тәрбиә ҡабул итмәгән ирҙәрҙе тәрбиәле бер ир итмәгә өлгәшерҙәр. Ирҙәр һәр ваҡытта ҡатындары теләгәнсә булырҙар", тип яҙа әҙип үҙенең "Әсмә" повесында.

Беҙ һәр саҡ тарихи әҫәрҙәрҙе ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡыйбыҙ. Үткәндәр тураһындағы мәғлүмәт күңел офоғон киңәйтә, алыҫҡараҡ күҙ ташларға мөмкинлек бирә. Ә инде тарихи шәхестәрҙең яҙмаларына килгәндә, улар икеләтә ҡиммәтле сығанаҡ булып тора. Беҙ тарихтың эсенә үтеп инәбеҙ, шул мөхиттә йәшәгән заттарҙың уй-ынтылыштарын тәрәнерәк аңлайбыҙ. Сөнки автор уйҙырмаларҙы түгел, ә үҙе күргән-кисергәндәрҙе бәйән итә. "Аҫар" тигән ҡулъяҙмаһында әҙип үткән осор зыялыларының эшмәкәрлеген асып бирә. Арҙаҡлы ғалим Ризаитдин бине Фәхретдин Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев менән аралашып тора, уға Мифтахетдин Аҡмулла менән күҙгә-күҙ ҡарашып гәпләшергә насип була. Халҡыбыҙҙың рухи донъяһын байытыуҙа, диненимандын нығытыуҙа ҙур роль уйнаған Зәйнулла Рәсүлев, Ғарифулла Кейеков кеүек шәхестәр менән ҡатнашып йәшәй. Тағы ла бик күп исемдәр менән танышасаҡ китап уҡыусы. "Һайланма әҫәрҙәр" әле генә донъя күрҙе. Унын тураһында әҙәбиәт һөйөүселәрҙең, тарихсыларҙың да фекерҙәре ишетелер, тигән уйҙамын.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Тейешенә ҡарағанда арттырып бир

**Джон ҙур ҡала дауаханаһында алты йыл санитар булып эшләй. Бер аяғы сатанлағанға күрә, уны эшкә һынау срогы менән алалар. Был физик етешһеҙлеге тыуыштан булғас, Джон бала саҡтан етеҙ йөрөргә һәм һәр нәмәгә үҙенсә ҡулайлашырға өйрәнә. Һөҙөмтәлә, ул санитар бурысын яҡшы башҡарып ҡына ҡалмай, хәрәкәт иткәндә лә сәләмәт хеҙмәткәрҙәрҙән бер ҙә ҡалышмай.**

Джон бурысы талап иткәнгә ҡарағанда күберәк эшләй. Ул операция алдынан ҡурҡыу һәм тулҡынланыу кисергән ауырыуҙарға рухи һәм физик ярҙам итергә лә ваҡыт таба; ял сәғәттәрен ауырыуҙарҙың теге йәки был үтенесен башҡарыуына бағышлай. Ҡайһы саҡта үҙен насар тойған ауырыуға хат яҙышыр өсөн йәки хәлен белешер кешеһе булмаған пациент менән һөйләшер өсөн эш көнө тамамланғандан һуң да дауаханала тотҡарлана. "Тейешенә ҡарағанда арттырып биреү" Джон өсөн тәбиғи һанала, сөнки унын ата-әсәһе лә уға һәм һеңлеһенә ҡарата ошондай уҡ мөнәсәбәттә була. Балалыҡ һәм үҫмер йылдарында дауалаусы табибы уға тейешенә ҡарағанда күберәк иғтибар бүлә. Мәктәпкә барғас та башланғыс класс уҡытыусыһы уға мөлдөрәмә тулы һөйөү бүләк итә. Джон тейешенә ҡарағанда арттырып биреү - тормоштағы дөрөҫ юл, тигән инаныу менән үҫә һәм шуның менән уңа ла.

Ваҡыты-ваҡыты менән Джонда профессиональ өлкәлә юғарыраҡҡа өлгәшеү ниәте лә уянып ҡуя, әммә шул уҡ мәлдә ул был уйынан уңайһыҙланып, Аллаһы Тәғәләгә барына шөкөр ҡылып, рәхмәт әйтер була. Үҙенең санитар булып эшләүенең алтынсы йылында бер сибәр ҡыҙға өйләнеүе менән дә бик бәхетле була ул. Кәләше бер ваҡытта ла унын зәгиф аяғына иғтибар итмәй. Ул ирендә тейешенә ҡарағанда күберәкте бирергә һәм бөтөндәрҙән тормошон бәхетле итергә тырышып, ныҡышмалы һәм үҙ эшен аңлап башҡарған һөйкөмлө йәш егетте генә күрә. Тормош иптәше өйгә гәҙиттәргенә ҡарағанда һуң ҡайтҡанда ла, ул бөгөн кем унын ярҙамына мохтаж булыуын һорау менән генә сикләнә. Джон иһә үҙе лә ошонан да яҡшыраҡ, байыраҡ һәм йөкмәткеләрәк тормош булыуы мөмкин түгел, тип иҫәпләй.

Әммә унын тормошо тағы ла күберәккә лайыҡ була. Тейешенә ҡарағанда арттырып биреүгә бәйле факттарҙың береһе - биреүсе һәр ваҡыт үҙе лә бынын әжерен арттырып ҡабул итә, тигәндән ғибәрәт. Джон менән дә шулай килеп сыға. Бер көн уны клиника директоры үҙенә саҡырып ала һәм тиҙ ярҙам машинаһының санитарына уҡырға тәҡдим яһай. Джон был көтөлмәгән тәҡдимдән шул тиклем ҡаушай, хатта нимә тип яуап бирергә белмәй, сикәһе буйлап күҙ йәштәре тәгәрәй. Унын өсөн был ҡыйыуһыҙ ғына хыялының тормошҡа ашыуы була.

Ике аҙнанан уҡыуҙар башлана. Дәрестәрҙән бер өлөшө дауаханала, бер өлөшө университетта үтә. Джон курсты юғары билдәләргә тамамлай. Эш урынында тәжрибә үткән осорҙа ла яҡшы белгес өсөн талап ителгәнгә ҡарағанда күберәк тырышлыҡ күрһәтә. Хәҙер инде Джон тиҙ ярҙам машинаһында тәжрибәле парамедик. Ул үҙе йәшәгән ҡала халҡына тиҙ ярҙам күрһәтеү буйынса дәрестәр алып бара. Бынан тыш, ул дүрт йәшлек ҡыҙы һәм бер йәшлек улы булған бәхетле атай ҙа. Джондың тормошо беҙгә кешеләргә ярҙам итеү теләге менән алға ынтылғанда, кәрәгенән арттырыбыраҡ бирергә тырышҡанда, быға яуап итеп үҙебеҙҙе уратып алған кешеләрҙән дә шуны уҡ алыуыбыҙҙы күрһәтә. Әйе, шулай иткәндә, беҙҙең тормош һөйөү һәм күңел тыныслығы менән тулы буласаҡ.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

www.kiskeufa.ru

# Киске Өфө



“Киске Өфө” - һәр кемдең рухи таянысы булырға дәғүә итеүсе, баш ҡаланың интеллектуаль, ижади һәм эшлекле мөхитте республикабыҙ райондарына, ҡалаларына күсереүсе, юғарыға ҡарап фекер итергә саҡырыусы аҙналыҡ баҫма.

## 2010

| һыуығай | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 4 | 11 | 18 | 25 |
| шш | | 5 | 12 | 19 | 26 |
| шр | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| кс | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| йм | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шб | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| йш | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |

| шаҡай | | | | |
|---|---|---|---|---|
| дш | 1 | 8 | 15 | 22 |
| шш | 2 | 9 | 16 | 23 |
| шр | 3 | 10 | 17 | 24 |
| кс | 4 | 11 | 18 | 25 |
| йм | 5 | 12 | 19 | 26 |
| шб | 6 | 13 | 20 | 27 |
| йш | 7 | 14 | 21 | 28 |

| буранай | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шш | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| шр | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| кс | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| йм | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| шб | 6 | 13 | 20 | 27 | |
| йш | 7 | 14 | 21 | 28 | |

| алағарай | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 5 | 12 | 19 | 26 |
| шш | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| шр | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| кс | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| йм | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| шб | 3 | 10 | 17 | 24 | |
| йш | 4 | 11 | 18 | 25 | |

| һабанай | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 3 | 10 | 17 | 24/31 |
| шш | | 4 | 11 | 18 | 25 |
| шр | | 5 | 12 | 19 | 26 |
| кс | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| йм | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| шб | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| йш | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |

| һөтай | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| шш | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шр | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| кс | 3 | 10 | 17 | 24 | |
| йм | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| шб | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| йш | 6 | 13 | 20 | 27 | |

| майай | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 5 | 12 | 19 | 26 |
| шш | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| шр | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| кс | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| йм | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| шб | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| йш | 4 | 11 | 18 | 25 | |

| урағай | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 2 | 9 | 16 | 23/30 |
| шш | | 3 | 10 | 17 | 24/31 |
| шр | | 4 | 11 | 18 | 25 |
| кс | | 5 | 12 | 19 | 26 |
| йм | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| шб | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| йш | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |

| һарысай | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| шш | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| шр | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| кс | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| йм | 3 | 10 | 17 | 24 | |
| шб | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| йш | 5 | 12 | 19 | 26 | |

| ҡарасай | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 4 | 11 | 18 | 25 |
| шш | | 5 | 12 | 19 | 26 |
| шр | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| кс | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| йм | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шб | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| йш | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |

| ҡырпығай | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| шш | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| шр | 3 | 10 | 17 | 24 | |
| кс | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| йм | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| шб | 6 | 13 | 20 | 27 | |
| йш | 7 | 14 | 21 | 28 | |

| аҡъюлай | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| дш | | 6 | 13 | 20 | 27 |
| шш | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| шр | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| кс | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| йм | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| шб | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| йш | 5 | 12 | 19 | 26 | |

***✓ Социаль сәйәсәт министры Михаил Зурабов халыҡҡа ваҡытлы матбуғат саралары ярҙамында льготаларҙы юҡ итеүсе итеп күрһәтелде. Һуңғараҡ Зурабов сәйәсәттән ситләште.***

*ШАҢДАУ ПЛЮС*

# ТӘҮГЕ УН ЙЫЛЛЫҠТЫҢ...

## ҡайғылары һәм серҙәре

**(Аҙағы. Башы 3-сө биттә).**

### 2004 - Путин тағы президент, ә Бесланда мәктәпте баҫып алалар

2004 - Владимир Владимировичтың икенсегә Рәсәй президенты итеп һайланыу йылы, тип тынысланыр ҙа ҡуйыр инем. Булмай икән - Беслан "яра"һы һаман һыҙлай, һаман һыҡрай, һаман йоҡо бирмәй. 1 сентябрь көнө етһә, айырыуса. Бына бит, иң ауыртҡан урынға һуғырға өйрәнеп алды улар. Хәҙер байрам байрам түгел. 2004 йылдың 1 сентябрь кисе әле һаман хәтерҙә.

Бесландағы мәктәптә террорсылар өс көн буйына 1 меңдән ашыу кешене аманат итеп тота. Һуңынан данлыҡлы Рәсәй хәрбиҙәре штурм башлай һәм 400-гә яҡын кеше (бала-сағалар, уларҙың ата-әсәләре, хәрби хеҙмәткәрҙәр) һәләк була.

Бесландың иң мөһим һөҙөмтәһе нимәнән ғибәрәт, беләһегеҙме? Ул саҡта Рәсәй Президенты, террорсылар менән көрәште әүҙемләштерәм, тип, Рәсәй төбәктәре башлыҡтарын һайлап ҡуйыу тураһындағы тәртипте тәғәйенләп ҡуйыу менән алмаштырҙы. Был ике факт минең башыма һаман һыймай. Терактар Рәсәй территорияһында һаман үткәрелә. Элекке масштабтарҙа түгел, әммә "Нева экспресы" поезын инде икенсегә откос аҫтына ебәрәләр...

2004 йыл, ғөмүмән, терактарға бай булды. Уларҙың барыһы ла Беслан фажиғәһенә тиклем ойошторолдо. 9 майҙа Грозный ҡалаһында Чечня президенты Әхмәт Ҡадировты шартлаттылар. 22 июндә Ингушетияның баш ҡалаһы Назрань баҫып алынды. 24 августа Рәсәй күгендә бер түгел, ике пассажир самолеты шартлатылды, ә 31 августа Мәскәүҙә "Рижская" метро станцияһы эргәһендә шәһит ҡатын-ҡыҙ үҙ- үҙен шартлатты.

### 2005 - Зурабов синдромы, йәки ташламаларҙан арыныу йылы

Дөрөҫөн генә әйткәндә, йәмғиәттең ҡайһы бер ҡатламдарын Совет заманынан эйәреп килгән ташламаларҙан (льготаларҙан) арындырыу Рәсәй дәүләте өсөн сағыштырмаса еңел үтте. Эйе, пенсионерҙар (улар ҡала транспортында бушлай йөрөүҙән баш тартырға мәжбүр булды) һәм хәрбиҙәр баш күтәреп маташты. Хатта урамға сыҡтылар. Әммә мәғәнәһе булманы. Халыҡ сығыштарын төрлө сәйәси көстәр (башлыса, коммунистар) эләктереп алып, үҙ файҙаһына борорға маташты. Килеп сыҡманы. Пенсионерҙарға сәйәси лозунгылар түгел, а аныҡ ташламалар кәрәк ине. Улар урынына әҙ генә булһа ла аҡса бирелә башлағас, тынысландылар. Тәүҙә пенсионерҙар үҙ бәләләренең төп сәбәпсеһе итеп РФ Президентын күргәйне. Владимир Владимирович ситуацияны оҫта ғына бороп ебәрҙе. Төп ғәйепле оҙаҡҡа һуҙылмай ғына табылды. Социаль сәйәсәт министры Михаил Зурабов халыҡҡа ваҡытлы матбуғат саралары ярҙамында льготаларҙы юҡ итеүсе итеп күрһәтелде. Уға халыҡ тәнҡит һүҙҙәрен яуҙырыпмы яуҙырҙы. Һуңғараҡ Зурабов сәйәсәттән ситләште. Күренмәҫ булды. Мавр үҙ эшен эшләне, маврға китергә лә мөмкин. Шекспирығыҙ ары торһон!

### 2006 - Туҡма яуыз чеченды, йәки урыҫ халҡының милли үҙ аңы уяныу йылы

Сыуалыштар башлыса урыҫтар йәшәгән Үҙәк Рәсәй төбәктәрендә түгел, ә милли регион тип иҫәпләнгән Карелияла башланып китте. Дөрөҫ, бында урындағы милләт вәкилдәре - карелдар ни бары 10 процент ҡына тәшкил итә. Урыҫтар күпселек - 75 процент самаһы. Тимәк, был конфликтта әзербайжан һәм карелдар ҡатнашыуына ҡарамаҫтан, уны ысынлап та урыҫ халҡының милли үҙ аңы уяныуы менән бәйле ваҡиға, тип ҡарарға кәрәк. Осраҡлы рәүештә генә ресторанда (бәлки, иҫерек кешеләр араһында) ҡупҡан ыҙғыш бөтә Рәсәй кимәлендә яңғыраны. Уны хатта ҡайһы бер ижтимағи-сәйәси ойошмалар һәм сәйәси партиялар үҙ файҙаһына борорға маташты.

Эштең асылы нимәлә һуң? 2006 йылдың 29 август төнөндә Карелияның Кондопога ҡалаһындағы "Чайка" ресторанында ике ҡунаҡ (береһе - Сергей Мозгалев, икенсеһе - Юрий Плиев) официант Мамедовты туҡмай. Тегенеһе дуҫтарына барып зарлана. Дуҫтары - ресторандың "ҡыйығы" булған чечендар... Улары официантты туҡмаусыларҙы тапмағас, урамда осраған берәүҙе ҡанға туҙҙырып туҡмай башлай. Ҡандары ҡыҙыу бит - тау халҡы. Шулайтып, ике кешене туҡмап үлтерәләр, тағы ла туғыҙы ауыр хәлдә дауаханаға килтерелә.

1 сентябрь көндө вафат булыусыларҙы ерләйҙәр һәм шул уҡ төндә Кондопога халҡы урамға сығып, хужалары чечендар һәм башҡа Кавказ халыҡтары булған кафе-ресторандарҙы, ларек-магазиндарҙы туҙҙырырға, үрт һалырға тотона. 2 сентябрь көндө лә был "эш" дауам итә. Ҡала майҙанында халыҡ йыйылышы ойошторола. Унда ҡатнашҡан ике меңләп кеше Кавказдан һәм Урта Азиянан законһыҙ күсеп килгән мигранттарҙы Кондопоганан бер тәүлек эсендә ҡыуып сығарыуҙы талап итә. Үҙ ғүмере өсөн ҡурҡҡан чечендар милицияға килеп баш һала. "Законһыҙ иммиграцияға ҡаршы хәрәкәт" тип аталған ижтимағи ойошма шунда уҡ был ваҡиғаның уртаһына сума. Уның етәксеһе Александр Белов Кондопогаға килә. Хәрәкәттең Интернеттағы сайтында Карелиянан яңылыҡтар, сыуалыштарҙа ҡатнашыусыларҙың хәбәрҙәре урынлаштырыла. Ошо уҡ көндө кискеһен Кондопогаға республиканың премьер-министры, эске эштәр министры, федераль именлек хеҙмәте идаралығының вәкилдәре килеп етә. Эш бының менән генә тамамланмай әле. Ситуацияны Чечня президенты Рамзан Ҡадиров ҡырҡыулаштырып ебәрә. Үҙенә генә хас манерала ул Кондопога халҡы менән "мөнәсәбәттәрҙе асыҡларға" тәҡдим итә.

Кондопога сыуалыштарынан һуң Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә лә башҡа милләт вәкилдәрен туҡмау осраҡтары йышая. Санкт-Петербург һәм Воронеж, Мәскәү һәм башҡа ҡайһы бер ҡалаларҙа үзбәк, тажик, ҡытай халыҡтары, Африка илдәре вәкилдәрен туҡмап, ә йыш ҡына үлтереп китәләр. Шулай итеп, урыҫ халҡының милли үҙ аңы күтәрелеүе Рәсәйҙә йәшәгән башҡа милләттәрҙәге кеүек, милли телде, мәҙәниәтте үҫтереүгә, тарихты ентекләп өйрәнеүгә түгел, ә башҡа милләттәргә ҡарата күрә алмаусанлыҡ тойғолары уятыуға ҡайтып ҡала.

### 2007 - Ельцин һәм уның дәүере менән хушлашыу йылы

Был йыл минең өсөн ҡыҫҡа ғына булмаҡсы. Илебеҙ Рәсәйҙең тәүге президенты Борис Николаевич Ельцин менән хушлашты. 2007 йылдың 23 апрелендә ул яҡты донъяны ташлап китте. Күп кенә күҙәтеүселәр фекеренсә, ул бик ваҡытлы вафат булды. Бына бит, Хоҙай уның масштабындағы кеше үлемен дә контролдә тота, имеш. Сәйәсмәндәр фекеренсә, 2000 йылда дилбегәне Путин ҡулына тапшырғас, ул 2007 йылға тиклем яңы президенттың Рәсәй менән идара итеү һәләтен, мөмкинлектәрен байҡап торған. Йәнәһе, хатта ваҡыты-ваҡыты менән Путин уға килеп кәңәшләшкән булған. Ә инде Владимир Владимировичтың икенсе осоро тамамланыуға яҡынлашҡас, Путинға Ельциндың кәрәге ҡалмаған. Ул бит хәҙер үҙе был посты ҡалдырып, вариҫ тәғәйенләп ҡуйырға тейеш. Тап ошо мәлдә генә Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа сираттағы Мөрәжәғәтнамәһен иғлан итергә тейеш ине. Борис Николаевичтың вафаты уны был сараны кисектереп торорға мәжбүр итте. Тик оҙаҡҡа түгел. Бер көнгә генә.

2007 йыл Путин өсөн ул президент булған ике осорҙоң һөҙөмтәләрен байҡау мәле булды. Ул, Борис Николаевичтан айырмалы рәүештә, "Мин арыным. Мин китәм", тимәне. Киреһенсә, Дмитрий Анатольевич Медведевты Рәсәй президенты итеп һайларға тәҡдим итте. Уныһы иһә Путиндың Рәсәй Хөкүмәтен етәкләүен һораны. Шулай итеп, 2007 йылда уҡ әлеге ваҡытта "дуумвират" йәки "тандем", башҡортса - "бер дилбегәне икәүләшеп тотоу" идеяһы ҡалҡып сыҡты. Төрлөсә баһаланылар ул фекерҙе. Власть талаштыра, һуғыштыра, сәкәштерә, тиеүселәр булды. Ҡарағыҙ, әлегә тиклем тыныс ҡына эшләп йөрөйҙәр. Асыҡтан-асыҡ сәкәләшмәйҙәр. Хатта бергә саңғы шыуалар. Күргәнһегеҙҙер. "2012 йыл мәсьәләһе"н дә хәл иткәндәр кеүек тойола. Һәр хәлдә, Владимир Владимирович: "Беҙ бит аҡыллы кешеләр. Ултырып һөйләшербеҙ ҙә үҙ-ара килешербеҙ әле", - тип әйтеп өлгөрҙө инде.

### 2008 - осетиндар һәм абхаздар өсөн азатлыҡ яулау йылы

Һигеҙенсе йыл ваҡиғалары күҙ алдында ғына. Грузияның Ҡытайҙа Олимпиада башланған көнгә - 8 августа ғына тап килтереп һуғыш башлауы, Рәсәй ғәскәрҙәренең Көньяҡ Осетияға бәреп инеүҙәре, дәүләтебеҙ етәкселәренең Осетияла грузин хәрбиҙәре тарафынан ойошторолған геноцид хаҡында ҡыҙып-ярһып сығыш яһауы, Дмитрий Медведевтың Төньяҡ Осетияның һәм Абхазияның бойондороҡһоҙлоғон таныуы тураһында белдереүе, сит ил ваҡытлы матбуғат сараларының был конфликт хаҡында бер нәмә лә өндәшмәүе - барыһы ла әле генә булған һымаҡ. Ләкин, ситтән ҡараһаң, күп нәмәгә күҙ асыла икән шул. Үҙҙәрен "ирекле" тип атап йөрөгән Европа дәүләттәрендә лә дөйөм мәғлүмәт саралары дәүләт тарафынан контролдә тотола икән дә баһа. Ә "геноцид" тип ауыҙ асҡан етәкселәрҙең һәр бер һүҙенә ышанып барырға түгел икән. Чечня менән сағыштырғанда, Осетия ҡорбандарының һаны сүп кенә. Хәйер, һәр бер кешенең ғүмере уникаль, ҡабатланмаҫ, бер генә була һәм уға йоғоноусылар ҡаты язаға дусар ителергә тейеш.

Абхазия һәм Көньяҡ Осетияның үҙ аллылығын таныу менән дә әлегә эштәр хөрт тора. Рәсәй менән һәйбәт мөнәсәбәттәрҙә булғандар ҙа уларҙы танырға ашыҡманы. Рәсәйгә генә ҡарап торған бойондороҡһоҙлоҡ буламы икән?

**2009 йыл хаҡында... ҡабатлап яҙып тормайым. Ул беҙҙең өсөн әлегә "Аҡһаҡ алаша" йылы. Бәлки, киләһе ун йыл эсендә уға ҡарата мөнәсәбәтебеҙ үҙгәрер. Илебеҙгә күптән хас булған баш-баштаҡлыҡ, дыуамаллыҡ, бар нәмәгә ҡул һелтәп һәм күҙ йомоп ҡарау ғәҙәте сираттағы фажиғәгә килтерҙе.**

**Ҡасан да булһа, яҡшы ваҡиғалар хаҡында яҙыу мөмкинлеге булырмы? Әллә киләһе ун йыллыҡта ла мәйеттәр һәм ҡорбандар һанап ултырылыр микән?**

**Таһир ИШКИНИН.**

## 2010 ЙЫЛДА ДИНИ БАЙРАМДАР

**1 ғинуар, йома, 16 мөхәррәм** - Эске Рәсәй мосолмандарының рәсми рәүештә Ислам динен ҡабул итеү көнө (922 миләди йыл - 310 һижри йыл).

**25 февраль, кесе йома, 11 рәбиғәл әүүәл** - Мәүлит кисәһе.

**17 июнь, кесе йома, 5 рәжәб** - Рәғәиб кисәһе.

**8 июль, кесе йома, 26 рәжәб** - Миғраж кисе.

**26 июль, дүшәмбе, 14 шәғбан** - Бәрәғәт кисәһе.

**11 август, шаршамбы, 1 рамаҙан** - Изге Рамаҙан айы һәм ураҙа башлана.

**5 сентябрь, йәкшәмбе, 26 рамаҙан** - Ҡәҙер кисәһе.

**9, 10, 11 сентябрь, кесе йома, йома, шәмбе, 1, 2, 3, шәүүәл** - Ураҙа ғәйете.

**15 ноябрь, дүшәмбе, 9 зөлхизә** - Ғәрәфә көнө.

**16 ноябрь, шишәмбе, 10 зөлхизә** - Ҡорбан ғәйете.

**17, 18, 19 ноябрь, шаршамбы, кесе йома, йома, 11, 12, 13 - Зөлхизә** - Тәшрик көндәре.

**6 декабрь, дүшәмбе, 30 зөлхизә** - 1432 һижри йылды ҡаршылау кисе.

**16 декабрь, кесе йома, 10 мөхәррәм** - Ғәшүрә көнө.

**22 декабрь, шаршамбы, 16 мөхәррәм** - Эске Рәсәй мосолмандарының рәсми рәүештә Ислам динен ҡабул итеү көнө (922 миләди йыл - 310 һижри йыл).

## МӨХӘРРӘМ АЙЫНДА НАМАҘ ВАҠЫТЫ

| Мөхәррәм | Ғинуар, аҙна көндәре | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 | **9, шәмбе** | 08.06 | 09.36 | 13.30 | 15.41 | 17.11 | 18.41 |
| 25 | **10, йәкшәмбе** | 08.06 | 09.36 | 13.30 | 15.43 | 17.13 | 18.43 |
| 26 | **11, дүшәмбе** | 08.05 | 09.35 | 13.30 | 15.44 | 17.14 | 18.44 |
| 27 | **12, шишәмбе** | 08.04 | 09.34 | 13.30 | 15.46 | 17.16 | 18.46 |
| 28 | **13, шаршамбы** | 08.03 | 09.33 | 13.30 | 15.47 | 17.17 | 18.47 |
| 29 | **14, кесе йома** | 08.02 | 09.32 | 13.30 | 15.49 | 17.19 | 18.49 |
| 30 | **15, йома** | 08.01 | 09.31 | 13.30 | 15.51 | 17.21 | 18.51 |

СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

# АЛЛАҺ НУРЫН КӨТӨҮ...

## Йәғни Салауат Низаметдиновтың яңы операһы тураһында



**Ошо көндәрҙә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, композитор Салауат Низаметдиновтың "Нәҡи" операһының донъя премьераһы үтте. БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы заказы буйынса яҙылған операны сәхнәләштереү театр тарафынан бер нисә йыл элек үк планлаштырылған була.**

- "Нәҡи" операһы миңә енел бирелде, тип әйтмәҫ инем, - тип һөйләй Салауат Әхмәҙи улы. - Һәр ваҡыт төрлө ҡатмарлыҡтар тыуып, ҡаршылыҡтар сығып ҡына торҙо. Башта оҙаҡ ҡына тема эҙләнем. Уны табырға миңә йәш, һәләтле драматург Артур Сакаевтың идеяһы ярҙам итте. Аҙаҡтан матди-алды камиллаштырырға, оркестр, башҡарыусылар, режиссер менән оҙаҡ ҡына эшләргә тура килде. Театрға ҙур рәхмәтлемен, унын сәхнәһендә өсөнсө спектаклемде күрергә насип булды.

"Нәҡи" операһы ике бүлектән һәм алты картинанан тора, жанры буйынса уны ҡыйыу рәүештә психологик-мистик драма тип атарға була. Яңы операның төп геройҙарына килгәндә, улар - төрлө дәүерҙә ергә әйләнеп ҡайтҡан бер үк кешеләрҙең йәндәре. Музыка авторы үҙе лә ҡасандыр элекке заманда йәшәгәненә һәм киләсәк заманда йәшәйәсәгенә ышаныуын белдерә. Спектакль башында кешеләр тормошо боронғолоҡта ҡурһәтелә, аҙаҡтан ошо үк кешеләр беҙҙең замандашыбыҙға әүерелә. Уларҙың башҡарған ғәмәлдәре һәм идеалдары үҙгәрһә лә, йәндәре элеккесә ҡала. Үҙ ваҡытында данлыҡлы яугир булғаны беҙҙең заманда ихтыярһыҙ юғалта. Үҙ үҙенә ныҡлы ышанып, бер нәмәнән дә ҡурмағаны, "Ә Аллаһ бармы ул?" тигән һорау бирә. Бары тик бер генә герой - Йәнбикә менәр йылдар аша үҙенең иманын һәм кешеләргә ҡарата һөйөүен алып килә ала. Әҫәр сюжеты буйынса тап уның алдында кешеләрҙең күңелен таҙартыусы һәм уларға яҡшы киләсәккә өмөт уятыусы яңы бәйғәмбәрҙе һәм Нәҡи миссияһын тыуҙырыу бурысы ҡуйылған. Автор әйтеүенсә, Нәҡи - ул Аллаһ нуры килеүен көтөү.

Премьераны театрҙың опера труппаһы солистары Эльвира Алкина, Алина Латыпова, Лариса Потехина, Лилиә Халикова, Альбина Ғәбиҙуллина, Гөлнур Нарынбаева, Инна Романова, Сажидә Куклина, Наталья Маслова, Йәмил Әбделмәнов, Раил Кучуков, Салауат Аҫҡаров, Олег Килмөхәмәтов, Дмитрий Крыжский, Фәнәүи Сәлихов, Илгиз Хәкимов, Илһам Вәлиев, Әлим Ҡәйүмов, Рөстәм Мөсәлләмов һәм башҡалар әҙерләгән. Спектаклдә шулай уҡ хор, симфоник оркестр һәм "Dram-pas" пластик төркөмө ҡатнаша. Операның сәхнәгә ҡуйыусы етәксеһе һәм дирижеры - Марат Әхмәтзарипов.

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# БАС МЕНӘН БАРИТОН...

## яҡшы гөлләмә килеп сыҡты



**Яҡташыбыҙ, Мария театры солисы Илдар Абдраҙаҡов билдәле йырсы Дмитрий Хворостовский менән бер сәхнәлә сығыш яһаны.**

Ике талантлы опера йырсыһының дуэты М.И. Чайковский исемендәге Мәскәү дәүләт консерваторияһының Ҙур залында үтте. Илдар Абдраҙаҡов күптән Мәскәүҙә булғаны юҡ. Шуға күрә унын концерты мәскәүләләр өсөн көтөп алынған сығыш, тип әйтергә була. Дмитрий Хворостовский менән бер сәхнәлә йырлағандары ла булмаған уларҙың.

Концерт мәскәүлеләрҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятҡан. Дуэтты ҡарарға туп-тулы зал йыйылған. Билеттар билдәләнгән көндән күпкә алда һатылып бөткән. Яҡташыбыҙ үҙенең музыкаль профессионализмы менән опера һөйөүселәрҙе таң ҡалдырған. Унын менән бар донъяға танылыу яулаған Хворостовскийҙың баритоны бергә ҡушылып, тамашасыға яҡшы музыкаль гөлләмә бүләк иткән.

Яҡташыбыҙ, милләттәшебеҙ Илдар Абдраҙаҡов Өфө дәүләт сәнғәт академияһында Миләүшә Мортазина класында белем алғандан һуң, Башҡорт дәүләт опера театрына эшкә саҡырыу ала. 1998 йылда Санкт-Петербургта Мария театрында дебют яһай. 2000 йылда ошо театрҙың труппаһы солисы булып китә. Халыҡ-ара фестивалдәрҙә гран-при яулаған һәм лауреат исеменә лайыҡ булған. Барселона, Палермо, Вена, Париж, Верона сәхнәләрендәге сығыштары менән дә билдәле.

ҺИНЕ ЭҘЛӘЙЕМ




**Миңә 33 йәш, ҡыҙала йондоҙлого аҫтында тыуғанмын. Ауылда эшләйем. 33-35 йәштәрҙәге, насар ғәҙәттәре булмаған ир-егет менән танышырға теләйем.**

**Телефон номерым: 8 927 944 16 75**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠСА - НАСАР ХУЖА,

## ӘММӘ ЯҠШЫ ХЕҘМӘТСЕ

Бәхет - ул бәхетһеҙлектәр араһындағы арауыҡ.

**(Дон Маркиз).**

Бөйөк аҡылға эйә булғандар идеялар тураһында һөйләшә, урта аҡыллылар - ҡылыҡтарҙы, түбән аҡыллылар башҡа кешеләрҙе тикшерә.

**(Һинд мәҡәле).**

Аҡса - ҡот осҡос насар хужа, әммә бик яҡшы хеҙмәтсе.

**(Б.Т.Барнум).**

Хеҙмәт хурлыҡҡа ҡалдырмай, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хеҙмәтте хурлыҡҡа ҡалдырған кешеләр була.

**(Улисс Грант).**

Әгәр ҡырҡ йәшкә тиклем кешенең торлағы балалар тауышы менән тулмаһа, ул ғауға менән тула.

**(Шарль Сент-Бев).**

Уйланмайынса китап уҡыу аҙыҡты сәйнәмәй йотоуға тиң.

**(Эдмунд Берк).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер табылған шағирҙың эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүсе дуҫы була. Бизнесы уңышлы ғына барғас, был дуҫ уны киңәйтергә уйлап, ҡала ситендәге дачаһын һатырға ҡарар итә. Бына ул шағир эргәһенә килә лә:"Дачамды тиҙ генә һатып ебәрергә ине, шул туралағы иғлан тексын мөхәррирләп бир әле", - ти. Шағир ул ябай ғына иғланды былай тип үҙгәртә:"Саф шишмәләр менән уратып алынған, шатлыҡ һәм бәхет килтергән, ҙур булмаған бик матур йорт һатыла. Таң атҡанда эргәләге туғайлыҡтан ишетелгән һандуғас тауышына уянаһың. Йорт ҡыҙарып сыҡҡан ҡояштың йомарт нурҙарына мансыла, ә төшкә табан бүлмәләрҙә тынысландырғыс күләгә урынлаша. Ҙур булмаған бөхтә баҡсалағы төрлө сәскәләр һәм емеш-еләктәрҙән хуш еҫ бөркөлә...."**

**Бер нисә көндән һуң шағир әлеге дуҫын осрата һәм һүҙ араһында дачаһын һатыуһатмауы тураһында һораша. "Беләһеңме, һин яҙып биргән теге иғланды уҡыным да, ниндәй оло мөғжизәгә эйә булыуымды аңланым. Мин уны хәҙер бер ниндәй хаҡҡа ла һатмаясаҡмын..."**

**Тормошта ла шулай бит: беҙ йыш ҡына үҙебеҙҙең нимәгә эйә булыуыбыҙ хаҡында уйлап та ҡарамайбыҙ. Тормош беҙҙе тоғро дуҫтар, яратҡан эш, сәләмәтлек, талант, балалар һөйөүе менән бүләкләй, уларҙың ысын байлыҡ икәнен аңлап, ҡәҙерләргә лә өйрәнһәк..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририят:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Лəйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6423
Заказ 5586